ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
4-10 ноябрь (ҡырпағай) 2023
№43 (1085)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күпселек Палестинаны яҡлай**



3

**Беҙҙең тәжрибә...**

өлгө булараҡ ҡабул ителде



6

**Быйыл да...**

эре картуф ашап булмай инде!



10-11

**Ҡан хәтере тарталыр...**



13

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға 857 һум 04 тингә 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

КӨН ТЕМАҺЫ



# БЕРГӘ БУЛАЙЫҠ - БЕРҘӘМ БУЛАЙЫҠ!

**Бөтөн донъя илдәрендә, хатта ки цивилизациялы кешеләр бик һирәк аяҡ баҫҡан Океания утрауҙарында йәшәгән ярым ҡырағай тиерлек ҡәбиләләрҙә лә байрам көндәре була. Тимәк, байрам итеү - үтә боронғо йола. Был көндө халыҡ эшкә йөрөмәй, ял итә, тәмле аштар әҙерләй, ҡунаҡ саҡырып, ашап-эсеп, йырлап-бейеп күңел аса. Хәҙер бына донъябыҙҙа ниндәй генә байрамдар юҡ - хатта ки уларҙы билдәләр өсөн тотош йылдың көндәре лә етерлек түгел.**

Оло Рәсәй илендә шулай уҡ элек-электән байрамдар күп булған ул - донъяуиҙары ла, диниҙәре лә, шәхсиҙәре лә. Әлеге көндә лә етерлек улар, тик байрам итеп кенә өлгөр. Бына, мәҫәлән, 4 ноябрь көнө лә илебеҙҙә ҙур дәүләт байрамы - Халыҡ берҙәмлеге көнө тип аталып, юғары кимәлдә билдәләнә. Ул быйыл 18-се тапҡыр уҙғарыла, күнегеп тә киткәнбеҙ инде. Ә әүәл, совет осоронда, бындай байрам булғанмы-юҡмы, бер кем дә белмәне. Уның урынына беҙ, совет кешеләре, 7 ноябрҙә Бөйөк Октябрь байрамын, шаулап-гөрләп, демонстрацияларға сығып билдәләнек: күҙгә елдәрҙә тулҡын-тулҡын булып елберләгән хисапһыҙ ҡыҙыл флагтар, майҙандарҙа гөж килгән халыҡ колонналары ағымдары әлегә тиклем күҙ алдында торғандай.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЗАМАН БАШҠОРТО

# УРЫНДАҒЫ ХАЛЫҠТЫ...

## урынынан да, иҡтисадтан да айырмау кәрәк

**Баймаҡ районының Йомаш ауылы бик уникаль төбәк. Бында республика кимәлендә билдәле ике тиҫтәнән ашыу шәхес тыуған. Төрлө өлкәләге фән докторҙары ғына бишәү! Күрәһең, билдәле булыуға ҡарағанда, был ауылда билдәһеҙ булыу сәйер тойолалыр. Күптән түгел шундай шәхестәрҙең береһе, Өфө фән һәм технологиялар университетының Сибай институты профессоры, иҡтисад фәндәре докторы, 40 йылдан ашыу ғүмерен фәнгә һәм педагогик эшмәкәрлеккә бағышлаған Әҙеһәм Әғзәм улы БАРЛЫБАЕВ 65 йәшлек матур ғүмер үренә аяҡ баҫты. Юбилейы уңайынан ул "Почетлы остаз" билдәһе менән наградланды. Әҙеһәм Әғзәм улы менән тормош, фән, сәйәсәт тураһында әңгәмәләштек.**

### Аҡса аяҡ аҫтында

Бөгөн һәр кемдең ауыртҡан урыны - нисек аҡса эшләргә? Һүҙҙе шунан башлайыҡ. Теләһәң, аҡсаны ерҙән эйелеп алырға мөмкин, тик ниңәлер хәҙер ынтылып та тормайҙар, әллә ҡайҙа Себергә барып, олигархҡа эшләйҙәр. Ә аҡсаны бит йәшәгән урыныңда, ауылда ла эшләп була. Бының өсөн кешелә юғары хыялдар булырға тейеш, тип уйлайым, маҡсаттар ҡуйып йәшәй белергә кәрәк. Ғаиләнде көтөрлөк, балаларыңды аяҡҡа баҫтырырлыҡ ҡына түгел, эш хаҡы булһын да, йәшәргә урының булһын, тип кенә лә түгел, аҡса эшләү генә лә түгел, күңелгә ятҡан эш менән шөғөлләнеү булһын. Күңелгә ятҡан кәсеп кешелә ҡәнәғәтлек тойғоһо барлыҡҡа килтерә - мораль яҡтан да, финанс яғынан да. Күңел күтәренкелеге беренсе урында булһын. Финанс етмәһә, әлбиттә, яратҡан эшең менән шөғөлләнеп булмай, әммә баш беҙгә ни өсөн бирелгән?

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**



*Әҙеһәм Әғзәм улы студенттары менән.*

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# КИЛӘСӘКЛЕ АУЫЛ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө енел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Шайморат ҒИНИӘТУЛЛИН, Ишембай районы Кинйәбулат урта мәктәбе директоры:*** Һуңғы бер нисә тиҫтә йыл дауамында, колхоз-совхоздар тарҡалғас, эш юҡ, ауылдар бөтә, тигәнде йыш ишетәбеҙ. Ә ауыл йәшәһен өсөн нимә эшләнең һуң, тип һорағым килә ундайҙарҙан.

Мин үҙем Кинйәбулат ауылында 1983 йылдан бирле йәшәйем, 1985-1987 йылдарҙа балалар баҡсаһы мөдире булып эшләргә лә тура килде, 1997 йылдан мәктәп директорымын. Йәғни, ауылдағы тормош менән күмәк хужалыҡ булып йәшәгән дәүерҙән дә, уны үҙгәртеп ҡороу ваҡытынан бирле лә танышмын. Эйе, ысынлап та, колхоз ваҡытында ауылдар гөрләп торҙо. Тик ошо ерлектә йәшәгән халыҡ бер ҡайҙа ла китмәне бит, улар артабан ла ошо усаҡты дөрләтеп йәшәү өсөн аҡыл да, көс тә тапты. Шуға ла ауылдың бөгөнгөһө менән дә ҡәнәғәтмен. Мәктәп, балалар баҡсаһы, мәҙәниәт йорто, китапхана, мәсет бар. Мәҙәниәт йортонда халыҡ күңеленә яткан йүнәлештәге түңәрәктәрҙә шөғөлләнә ала. Беҙҙең "Зөбәржәт" халыҡ театры тураһында республикала ла беләләр, яныраҡ уның 20 йыллыҡ юбилейын билдәләнек. Үҙем дә рәхәтләнеп театрҙа уйнайым, уҡыусыларым да спектаклдәрҙә ҡатнаша. Уҡытыусы һәм мәктәп директоры булараҡ, бының улар өсөн мөһимлеген дә аңлайым, матурлыҡҡа ылығалар, телмәрҙәре үҫешә. Бер уҡыусыбыҙ артист һөнәрен һайлап, әлеге көндә белем алып йөрөй, тимәк, ошо театр уға үҙ һәләтен асырға, дөрөҫ һөнәр һайларға булышлыҡ иткән - был да мөһим. Өлкәндәр өсөн дә, балалар өсөн дә бейеү ансамбле бар. Башҡорт милли хоры коллективы ла ауыл кешеләренән тора, ҡасандыр Өфөгә телевидениега төшөргә лә барғайныҡ.

Йәмәғәт ойошмалары бик әүҙем беҙҙә. Ағинәйҙәребеҙ ауыл тормошонда, тәрбиә мәсьәләләрендә мотлаҡ ҡатнаша. Ветерандар советын маҡтап телгә алып киткем килә. Зыяратты кәртәләү, тәртиптә тотоу кеүек мөһим эштәрҙә электән улар ойоштора. Спортҡа иғтибар көслө, иң оҫта футболсылар, волейболсылар беҙҙә. Өлкәндәр ҙә уйнай, уларға ҡайҙалыр барып, енеү яулап ҡайтыу бер ни тормай. Үҙем дә йәштән спортты яраттым, шуға ла уның кешенең физик һәм рухи сәләмәтлегенә ыңғай яҡтарын яҡшы беләм. Йүгереүҙе үстерергә ине, тигән ниәтем бар, милли көрәшкә өйрәтер кеше лә бар, бары тик ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итергә генә кәрәк. Халыҡ бик һәйбәт беҙҙә, ошолай ойошоп, бер-беребеҙ менән аралашып йәшәйбеҙ. Үҙ эшен асыусылар бар, пилорама астылар, бер егет тимер ҡапҡалар эшләй. Малды ла, умартаны ла күпләп тоталар. Шулай ҙа ир-егет башлыса Себерҙә, уныһы инде беҙҙең төбәккә хас күренеш.

Бер мәл ауылда ололар күберәк ине, хәҙер йәштәр йорт һала. Тимәк, ауыл йәшәрә. Яңы йорттар ҡалҡып сығыуы үҙе үк ауылдың киләсәге барлығын күрһәтеп тора. Шулай ҙа хәҙер уҡыусылар һаны аҙыраҡ, бер класта 15-17-шәр бала, унан да аҙыраҡ булыуы ихтимал, ә бит элек 20-шәр бала менән 2-шәр класс йыйылып китә ине. Шулай ҙа был йәһәттән дә беҙҙә хәлдәр сағыштырмаса насар түгел, тип иҫәпләйем.

Ике йыл элек 1979 йылда һалынған мәктәп бинаһына капиталь ремонт эшләнеләр, заманса йыһазландырылған, матур яҡты мәктәптә уҡыйбыҙ. Тынысьлыҡ урынлашып, ир-егеттәр ҡайтып, донъялар теүәлләнеп китһә, балалар баҡсаһына ла ремонт үткәрергә уйлағанбыҙ, әле документтары теүәлләнә. Былдай мөмкинлек биргән район, республика етәкселәренә, мөғариф бүлегенә рәхмәт. Ә иң ҙур рәхмәт, әлбиттә, ауылдаштарға: балалар һаны аҙ булһа, беҙ ремонт тип ауыҙ ҙа аса алмаҫ инек. Тимәк, барыһы ла үҙебеҙҙән ҡулда! Кешенең яҡшы эше ҡалырға тейеш ул, был исем үҙендән бигерәк, балаларыңа кәрәк. Быны мин тыуған ауылыма ҡайтһам, "Сәйфулланың малайы", тип торалар. Ә бала, ата-әсәһенән күреп, өйрәнеп үҫә ул, шул рәүешле быуындар алышына, ауылдың киләсәгенә юл һалына.

**Дилбәр ХӘКИМОВА яҙып алды.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# БЕРГӘ БУЛАЙЫҠ - БЕРҘӘМ БУЛАЙЫҠ!

**(Башы 1-се биттә).**

Быны тик донъябыҙ һис үҙгәрешһеҙ тормай, яңы заман менән яңы заң да аңыбыҙҙы биләй, яңы хис-кисерештәр уята. Шуғамылыр, инде күптән онотолоп бөткән байрамдар ҙа тергеҙелеп, яңы биҙәктәр менән солғана икән. Бәҡтиһән, заманында быны әле һүҙ барған байрам көнө лә бик иҫтәлекле, Рәсәй дәүләте өсөн мөһим дата булған. Ул бынан 4 быуаттан ашыу элегерәк Рус дәүләте кисергән тарихи ваҡиғалар менән бәйле. Белеүебеҙсә, 1584 йылда батша Иван Грозный вафат булғас, Рәсәй тарихында "Болалы ваҡыт" ("Смутное время") тип нарыҡланған болғаныштар осоро башлана. Власҡа ынтылыусылар араһында ыҙғыш-низағтар, ҡанлы конфликттар бер-бер артлы булып тора, тәхеткә ялған батшалар ултыра. Ахыр сиктә, Мәскәүҙе поляк ғәскәрҙәре баҫып ала. Әммә шул болалы замандың патриотик рухлы кешеләренән Түбәнге Новгородтың земский старостаһы Кузьма Минин һәм кенәз, баш воевода Дмитрий Пожарский заманы өсөн ҙур һәм ҡеүәтле ополчение ғәскәрен ойоштора. Мәскәүҙе дошмандан азат итеү алыштарында, хәрбиҙәрҙән тыш, Рәсәйҙән барса сословиелары, төрлө халыҡтары вәкилдәре, шул иҫәптән, башҡорттар ҙа ҡатнаша. Һөҙөмтәлә 1612 йылдың 4 ноябрендә ополченецтар Мәскәүҙең Ҡытай-ҡала биҫтәһен штурм менән ала, поляк баҫҡынсылары илдән ҡыуыла. Күп тә үтмәй, митрополит Филареттың улы Михаил Романов Земский собор тарафынан Рус дәүләте батшаһы итеп һайлап ҡуйыла.

Ошо даулы осорҙа рус халҡында православие динен ҙурлау, уның мөғжизәле йөғөнтоһона ышыныу нык арта, ә ополчениелағы дин әһелдәре Аллаһ Инәһенең Ҡазан иконаһын үҙҙәре менән йөрөткән була. Шуға күрә дошмандың еңелеүен ошо мөғжизәле иконаның Рәсәйҙе ҡурсалауы һөҙөмтәһе итеп танығанбар. 1645 - 1676 йылдарҙа хакимлыҡ иткән батша Алексей Михайловичтың указы менән 4 ноябрҙе мотлаҡ рәүештә Изгеләрҙән изге Аллаһ Инәһен хөрмәтләү көнө сифатында байрам итә башлайҙар. Ә сирҡәү календарына ярашлы, ошо көн 1612 йылда Мәскәүҙе һәм Рәсәйҙе поляктарҙан ҡотҡарыу иҫтәлегенә арналған Аллаһ Инәһенең Ҡазан иконаһы байрамы тип тә нарыҡлана. 1917 йылдан һуң ошо иҫтәлекле көн 2005 йылға тиклем онотолоп тора.

Тарих тәгәрмәсе туҡтауһыҙ әйләнә, һәм, ҡыҙғанысҡа күрә, уҙған быуаттың 90-сы йылдарында сәйәси түңкәрелеш һөҙөмтәһендә Советтар Союзы тарҡалыуға дусар була. Коммунистарҙың "Бөтөн илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!" тигән лозунгыһын инде бары сарказм менән генә ҡабатлайҙар. Сәйәси ҡапма-ҡаршылыҡтар шул тиклем көсөргәнешле булып, ил яңы граждандар һуғышы ҡубыуҙан саҡ-саҡ ҡына ҡотолоп ҡала. Партиялар, иҗтимағи хәрәкәттәр, күп һанлы ойошмалар халыҡтарҙы албырғатып, мәғлүмәти ыҙғыштар ойоштороп, һәр ҡайһыны үҙ ҡараштарын, үҙ тәғлимәтен генә объектив, тип иҫәпләп, дөйөм сәйәси һәм иҗтимағи тарҡалышҡа юл ҡуя. Ҡайҙан булһын инде ул йылдарҙа берҙәмлек - халыҡ аңын көрсәклә осорҙа нисек итеп етешерәк көн итеү, аҡса-мал табыу кеүек уй-кисерештәр биләй. Күптәр үҙ мөхитенән ары китмәй, йомолоп йәшәй - "башҡалар ҡайғыһы төштән кире" принцибы өҫтөнлөк ала. Фән телендә быны иҗтимағи һәм шәхси атомлашыу тип нарыҡлайҙар.

Тап шул саҡта Рәсәй политтехнологтары инде күптән онотолған иҫтәлекле 4 ноябрь көнөн иҫкә төшөрә. Әлбиттә, уны күп конфессиялы илдә элеккесә православие байрамы сифатында билдәләү һис дөрөҫ булмаҫ ине. Әммә был көндөң заманында берләшкән Рәсәй халҡының дошмандарын еңеү көнө итеп байрам ителгәне мөһимерәк булғас, ул яңыртылып, Халыҡ берҙәмлеге көнө исеме аҫтында тергеҙелә.

Большевиктар кеүек, хеҙмәтсәндәрҙе берләшергә саҡырып, йәйһә күркәм байрамдар ойоштороп ҡына дөйөм халыҡ берҙәмлегенә өлгәшеп булмай. Был берҙәмлек - иҗтимағи-сәйәси, хатта рухи феномен, ул билдәле бер мөхиттә, билдәле бер шарттарҙа объектив тарих күренеше булараҡ формалаша. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, халыҡ берҙәмлегә яу-дауҙар ҙа, сәйәси тетрәнеүҙәр ҙә, ил-дәүләт мөстәҡиллегенә оло хәүеф янағанда тыуа. Унын өсөн тағы ла бер шарт булыуы зарур - халыҡ массалары аңын һәм күңелен тулыһынса биләп алырҙай идея булыуы. Әлегә ваҡытта беҙ уны милли идея, тип тә атайбыҙ.

Ҡоро һүҙ булмаһын тиһәк, килебеҙҙең сағыштырмаса яҡын тарихынан миҫал килтерәйек. Ҡан ҡойошло граждандар һуғышынан, аслыҡ-емереклектәрҙән һуң Рәсәйҙең коммунистик етәкселәге элекке батша власы ирекле тормоштан, уҙаллы үҫештән мәхрүм иткән күп милләтле халыҡтарға, ул нисек кенә сикләнгән булмаһын, үҙбилдәләнеү хоҡуҡын бирә. Ә киләсәктә коммунистик йәмғи-әт тип нарыҡланған яңы тормош төҙөү идеяһы ысынбарлыҡта халыҡ күңеленә хуш килә, һәм күп тиҫтә йылдар дауамында ябай хеҙмәтсәндәр, йәшәйеш ни тиклем ауыр булмаһын, ошо яҡты һәм гүзәл киләсәк хаҡына ихлас фиҙаҡәрлек өлгөләрен күрһәтә. Ә 1941 - 1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы осоронда СССР халыҡтары берҙәмлегә яуыз дошманды еңә алыу өсөн төп шарттарҙың береһе булыуын бер кем дә инҡар итмәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**XXI быуат баштарында бөтөн донъя кимәлендә, шул уҡ Европа илдәрендә лә, яңы глобалләшеү термины аҫтында илдәр, дәүләттәр берҙәмлегә идеяһы алға һөрөлә ине. Ҡыҙғаныс, ике тиҫтә йыл эсендә ошо глобаль идеяһы, ташҡа бәрелеп ярылған көҙгөләй, селпәрәмә килде. Күрһәң, әлегә дөйөм кешелек берҙәмлегә ғәмәлгә ашырылыуы мөмкин булмаған бер хыял кеүек кенә ҡуҙаллана. Тик шунһы: берҙәмлек хисе, башҡа халыҡтар менән телләктәшлек, динеңә, теленә, милләтенә ҡарамай, изгелек үә яҡшылыҡ ҡылыу рухыбыҙҙың нығыу нигеҙе булып ҡалһын, тип йәшәү фарыҙ беҙгә. Ошо изге ниәттәребеҙҙән ваз кисмәнәк үә өмөттәребеҙҙе өҙмәнәк ине, йәмәғәт.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 99 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 129 пациент, шул иҫәптән 76 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 1128 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 482-һе - 60 йәште үткән. Башҡортостанда коронавирус инфекцияһынан дауаланыу өсөн буш койка фонды 10 процент тәшкил итә.

✓Башҡортостанда уҙған аҙнала киҫкен респиратор инфекция һәм грипп йоҡтороуҙың 21 меңдән ашыу осрағы теркәлгән. Шуларҙың 42,8 проценты балаларға тура килә, тип хәбәр иттеләр Роспотребнадзорҙың республика идаралығынан. Үткән аҙна менән сағыштырғанда ауырыу осраҡтарының 7,7 процентҡа кәмеүе күҙәтелә. Әммә тынысланырға иртәрәк әле, тип иҫкәртәләр санитар ведомствола, сөнки сирҙең иң юғары нөктәһе декабрь-февраль айҙарына тура килә.

✓Радий Хәбиров үҙенең бойороғо менән Рәсәй Конституцияһы һәм Башҡортостандың Төп законы ҡабул ителеүгә 30 йыл тулыуға арналған саралар үткәрергә ҡушты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Конституцияһы 1993 йылдың 12 декабрендә ҡабул ителде. 2020 йылдың 1 июлендә халыҡ тауыш биреүендә уға үҙгәрештәр индерелде. Ошо уҡ йылдың 15 ғинуарында Рәсәй Президенты Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһендә Конституцияға илдең дәүләт ҡоролошондағы сәйәси үҙгәрештәргә, шулай уҡ өҫтәмә социаль гарантияларға ҡағылышлы үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итте.

✓31 октябрҙә Өфөлә Башҡортостан Башлығы Кубогына йәйге һәм ҡышҡы спорт төрҙәре буйынса икенсе республика универсиадаһы старт алды. Ярыштар 31 дисциплинала 27 спорт төрө буйынса үткәрелә. 2023 йылдың октябренән 2024 йылдың майына тиклем барған ярыштарҙа республиканың төп юғары уҡыу йорттары вәкилдәре ҡатнаша. 2023 йылдың 2 июнендә Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы спортты һәм физик культураны үҫтереү буйынса совет ултырышында Радий Хәбиров Башҡорт дәүләт аграр университеты ректорына вуз командаһы Универсиадала еңгән өсөн күсмә кубок тапшырҙы.

БЫНАҒАЙЫШ!

**Росстат сан ҡаға: Рәсәйҙә йәш ғаиләләр аҙыраҡ ашай башлаған. 2022 йыл мәғлүмәттәренә ярашлы, алдағы йыл менән сағыштырғанда аҙыҡ-түлектең бөтөн төрҙәрен ҡулланыу 22 процентҡа тиклем кәмегән. Йә хәҙерге йәштәрҙең ашар өсөн аҡсаһы юҡ, йә улар магазиндан аҙыҡ-түлек түгел, ә әҙер ризыҡ һатып ала - эксперттар быны сәбәбен үҙенсә фаразлай.**

# ЗАМАН ЙӘШТӘРЕ АСМЫ,

## әллә ашарға бешерергә яратмаймы?



Шуныһы ҡыҙыҡ, 2022 йылда халыҡтың ошо категорияһы ғына ризыҡты аҙыраҡ һатып ала башлаған. Ошо уҡ ваҡыт арауығын ҡарағанда, күп балалы ғаиләләр аҙыҡ һатып алыуға күберәк аҡса тотонған, эшләмәгән пенсионерҙар ҙа, инвалидтар ҙа ашауҙы төрләндереүҙән баш тартмаған. Эйе, был төркөмдәрҙә емеш-еләк, шулай уҡ картуф, һөт ҡулланыу кәмегән, әммә башҡа төрҙәр буйынса үҙгәрештәр юҡ тиерлек. Ә йәш ғаиләләрҙә һөт һәм һөт ризыҡтарын ҡулланыу - 22, емеш-еләк, үҫемлек майҙары, башҡа майҙар 19 процентҡа кәмегән. Улар балыҡты аҙыраҡ ашай башлаған (17 процент), шәкәр һәм кондитер изделиелары ла кәмегән, хатта йомортҡа менән икмәк тә 15 процентҡа тиклем түбәнәйгән. Тукланыуҙың ҡиммәтенә килгәндә, йәш ғаиләләрҙең рационы углеводтарға һәм майҙарға наҡыҫланған, ә бына аҡһым кимәле әллә ни үҙгәрмәгән. Белгестәр әйтеүенсә, 2020 йылдағы пандемия осоронда ла халыҡтың тукланыуында былдай бер төрлөлөк һәм ярлылыҡ күҙәтелмәгән.

Шулайтмаһа ярар ине, улар ни һанар инде, тигән шигегеҙҙе белдерергә ашыҡмағыҙ. Росстаттың был тикшереүҙәрендә 48,8 мең респондент ҡатнашҡан, улар ике аҙна буйына тотонған бөтөн аҡсаһын теүәл генә итеп яҙып барған. Әйткәндәй, унда, бәлки, кемгәләр ауылдан аҙна һайын килеп торған картуф, һөт-иттәр ҙә теркәлгән, улар ҙа дөйөм аҙыҡ-түлек иҫәбенә инеп киткән. Шулай уҡ ғаилә әҙер ризыҡ һатып ала һәм унда, мәҫәлән, ит өҫтөнлөк итә икән, уны ит графаһына яҙғандар. Ә бына ашханала, кафела, ресторанда тукланыу бер нисек тә иҫәпләнмәгән.

Ярай, ә аҙыҡ-түлек һатып алыуҙы кәметкәс, күпме аҡсалары үҙҙәренә ҡалды инде, тигән һорау тыуыр. Дөйөм ҡарағанда, башҡа сығымдар араһында ризыҡҡа тигән графалағы сумма иң кәме, шулай ҙа ул алдағы йыл менән сағыштырғанда артып, 29,3 процентҡа еткән. Сама менән әйткәндә, айына бер кеше 7,76 мең һумға ашай, был хатта 2021 йыл менән сағыштырғанда 80 һумға күберәк тә икән. Ошо 7 меңдең 2,5 мене - иткә, 1,3 мене - һөткә, 1,1 меңе икмәккә тотонолған. 2022 йылда Рәсәйҙә дөйөм инфляция 11,9 процент булған, шул иҫәптән аҙыҡ-түлек 9,8 процентҡа ҡиммәтләнгән: ит - 6,5, балыҡ - 14,4, һөт ризыҡтары 12,8 процент. Тимәк, бында бер нindәй ҙә аҡса экономлау тураһында һүҙ ҙә юҡ.

"Йәш ғаилә" тигәндә статистик хеҙмәт ир һәм ҡатындың 35 йәштән үтмәгән булыуын күҙ уңында тота. Бәлки, эш башы ошо һандарҙалыр? Әйләнә-тирәгеҙҙәге ошо йәштәге туғандарығыҙҙы, таныштарығыҙҙы барлап ҡарағыҙ әле. Йәки эшкә килешләй-ҡайтышлай иғтибарлыраҡ булығыҙ, һәр икенсе йәш кешенең ҡулында шаурма кеүек ризыҡ. Уларҙа даими рәүештә төрлө инфекциялар табылып тора, кешеләр күпләп ағыулана, әммә һатып алыусылары кәмемәй, киреһенсә, көн үҙәгендә сират йыйылып китә. Хәҙер был ризыҡты әҙерләүсе киоскыларҙы уҡыу йорттары, шулай уҡ студенттар йәшәгән ятаҡтар янында махсус рәүештә урынлаштыралар, ахыры.

Ошо йәштәге балалары ҡайтһа, әсәләре нимә бешерергә белмәй тора. Һыйыр, йылҡы ите, тултырма ашамайҙар, организм өсөн бик кәрәкле булған эсәк-ҡарын, ҡойҡа тураһында һүҙ ҙә юҡ, ундайҙарҙың еҫтәрен дә яратмайҙар. Ауыл һөтөнән, ҡаймағынан һыйыр еҫе сыға, тиҙәр. Һыйырҙан һауып алынған, сығалыр ҙа инде, химиянан яһалғанынан нимә тәме сыҡҡанын белеп кенә бөтмәйбеҙ. Ҡыҙҙырылған тауыҡ, шешлек, колбаса кеүектән тамаҡтары туйып, күнелдәре була инде.

Элекке кеүек, ауылға ҡайтып, ата-әсәһенә ярҙамлашып йөрөгән балалар ҙа һирәк хәҙер. Ер емереп эшләнәләр, ашауға ла барымдары булыр ине. Таныш бер апай Өфөгә килеп, урам һепереүсе булып эш башлағайны. Бешереп тә тормайҙар, суплекка сығарып ташлайҙар һәйбәт ит киҫәктәрен, тип иҫе китә. Ауылдан көсләп-көсләп тейәп ебәрелгән иттәрҙер инде ул. Элек кенә ул, ит ашамау - ярлылыҡты, етешһеҙлекте күрһәтә ине. Хәҙер ит бешереп ашаусылар, йәштәр күҙлегенән, донъянан, модалы тенденциларҙан артта ҡалыусы, сәләмәтлеген ҡайғыртмаусы булып иҫәпләнәләр, күрәһең. Углеводлы, майлы ризыҡтан баш тартыу ошоно ла күрһәтеп тора бит. Әммә белгестәр әйтеүенсә, хайуан майҙарын ашамау мускулдарҙың һығылмалылығын юғалтып, һәленеп төшөүенә, иммунитет түбәнәйеүенә килтерә. Бигерәк тә үҫеүсе, йәш организм өсөн зыянлы бындай диеталар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тимәк, Росстаттың, йәш ғаиләләрҙең ашар өсөн аҡсаһы юҡ, тигәне өлөшләтә генә хаҡ. Ысынлап та, бөгөнгө ҡулланыусыларҙың бер төркөмө тукланыуына аҡсаһын экономияларға мәжбүрҙер, хаҡтарҙың көн һайын артып тороуы рациондың ярлыланыуына килтереүе раҫ. Шулай ҙа ҙур ҡалаларҙа бөтөнләй икенсе трендтар барлыҡҡа килеүенә лә күҙ йома алмайбыҙ: хәҙерге йәш ғаиләләр йә кафе-рестарандарҙа туҡлана, сөнки ашарға бешерергә яратмай, бешерә лә белмәй. Заман менән ҡулланыусының "йөҙө" лә үҙгәрә, улар әҙер ризыҡҡа өҫтөнлөк бирә.**

Ләйсән ДАЯНОВА.

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# КҮПСЕЛЕК ПАЛЕСТИНАНЫ ЯҠЛАЙ



**Был донъяла ниҙәр бар? Шул һаман да йөрәкте өйкәп торған һуғыш һәм уның касафаттары. Тегендә лә, бында ла ҡан ҡойош дауам итә, ҡорбандар һаны арта бара, әммә солох, килешеү саралары, утты туктатыу хаҡында бер генә саҡырыу ҙа, өндәмә лә юҡ.**

Дөрөҫ, Палестинаны яҡлап урамдарға сыҡҡан протест акциялары, митингылар тулҡыны бөтөн Европаны тип әйтерлек солғап алды. Берлиндың мигранттар йәшәгән райондарында Израилгә ҡаршы ысын мәғәнәлә ихтилал ҡупты. Берлиндағы Синагога менән йәһүд мәҙәни үҙәгенә һөжүм итеп, Палестина яҡлы активистар бина тәҙрәләренә "Молотов шыйыҡсаһы", фейерверктар ырғыта; Мадрид, Рим, Гаага, Афина, Стамбул урамдарынан Палестина флагтары, плакаттар тотоп үтәләр. Палестина яҡлылар колоннаһы шулай уҡ "Израилгә санкция иғлан итергә!" тигән лозунг менән Вашингтон урамдарынан Аҡ йортҡа тиклем килеп етте. "Газа секторындағы һуйышты туктатырға!" тигән талап менән бихисап демонстранттар Варшава урамдарынан да үтте.

28 октябрҙә Стамбулда булып үткән протест митингыһына миллион ярымлап халыҡ сыҡты. Унда Төркиә президенты Реджеп Эрдоган ҡатнашты һәм сығышында: "Беҙ Израилде хәрби енәйәтсе тип иғлан итәбеҙ", - тип белдерҙе һәм Газаға һөжүмде кискемәҫтән туктатыуҙы талап итте. Ул БМО Генераль Ассамблеяһы тарафынан ғәрәп илдәре тәҡдим иткән Палестина-Израиль конфликтын көйләү буйынса ҡабул ителгән резолюцияны хупланы һәм уны "ынҡай аҙым" тип атаны. Әйткәндәй, резолюция 120 ил, шул иҫәптән, Рәсәй, Ҡытай, Төркиә, Ғәрәп Әмирлектәре һәм башҡа ил вәкилдәре тарафынан хупланды, 45 ил икеләнеү белдерһә, 14 ил: Израиль, АҠШ, Австрия, Хорватия, Чехия, Гватемала, Венгрия һәм башҡа бер нисә бәләкәй ил ҡаршы сыҡты. БМО-ның Генераль секретары Антониу Гуттериш был документты раҫлап, "Палестина халҡы 56 йыл буйына быуылып, оккупацияла йәшәне",- тигән "мисәтте" менән нығытып ҡуйҙы.

Әммә ғәҙел талап ҡуйған был резолюцияға тауыш биргән мәлдәрҙә Израиль оятһыҙ рәүештә Газа секторына пехота һәм бронетехникаһын һөсләтеп, туктауһыҙ көслә ут асты һәм был уның күпселек ихтыярына "яуап һүҙе" булды, ахырыһы. Эйе, йыш ҡына көсһөҙҙәр "үҙ көстәрен" шулай ҙа күрһәтә икән. Ҡайны бер күҙәтеүселәр әйтмешләй, Израиль өлкән ағаһы АҠШ менән әҙселектә ҡалды. Эреле-ваҡлы илдәрҙә һуғыш ҡотҡоһо алып барыусы АҠШ үҙ йортондағы хәлдәр менән хәбәрҙар булып өлгөрәме икән әле һуң? Юғиһә бит, вәкилдәр палатаһының яңы спикеры Майк Джонсон Украина хәрби көстәренең контрһөжүмен туктатыуы ла ихтимал, имеш! Был хаҡта South China Morning Post баҫмаһы яҙып сыҡты: "Джонсон Киевҡа ярҙам ебәреүҙе дауам итеүгә ҡаршы сығыш яһай, ә республикандар тарафынан контроллек ителеүсе вәкилдәр палатаһы Израиль менән Украинаға ярҙам итеү тураһында АҠШ президенты Джо Байдендың талабын бер заман үтәүҙән баш тартыуы ла ихтимал". Майк Джонсондың: "Рәсәйгә ҡаршы йүнәлтелгән санкцияларҙың һөҙөмтәлелеге юҡ, ул бары Рәсәйҙең иктисади үҫешен тиҙләтә генә", - тигән "ҡанатлы" һүҙҙәре лә Байден ҡарттың бөлтерәгән аңына барып етә алмай, ахыры...

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда тәүге тапҡыр республикабыҙҙың беренсе Президенты Мортаза Рәхимов исемендәге класс асылды. Был турала Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө Башҡорт республика гимназияһы директоры Шаймурат Тимербулатов хәбәр итте һәм тантаналы сарала төшөрөлгән фотоһүрәттәр менән уртаҡлашты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө Башҡорт республика гимназияһы Күмертау ҡалаһында урынлашҡан.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында КПРФ фракцияһы етәксеһе Юнир Ҡотлоғужин вазифаһын ҡалдырҙы. КПРФ-тың республика комитеты хәбәр итеүенсә, чиновник үҙ теләгенә һәм КПРФ-тың Үҙәк Комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Юрий Афониндың яҙма тәҡдименә ярашлы вазифаһынан бушатылды. Коммунистар фракцияһы етәксеһе вазифаһын Ҡотлоғужин урынына Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы вице-спикеры Вадим Старов билəй.

✓Рәсәй банкының Директорҙар советы ултырышы йомғаҡтары буйынса 27 октябрҙә төп ставка бер юлы 2 процент пунктына - йылына 15 процентҡа тиклем арттырылды. Яңы ставка 30 октябрҙә көсөнә инде. Үҙәк банктың релизында билдәләнеүенсә, ағымдағы инфляция баҫымы һиҙелерлек көсәйҙе, 23 октябргә баһа буйынса, йыллыҡ инфляция 6,6 процентҡа ҡәҙәре артты (сентябрҙә 6 процент ине). 2023 йылға инфляция буйынса фараз - 7-7,5 процент.

✓Башҡортостан Яҙыусылар союзы иғлан иткән "Асыш" конкурсына әҫәрҙәр ҡабул итеү тамамланды. Ойоштороусыларға башҡорт телендә - 30-ға яҡын, татар телендә 16 эш килгән. Конкурс "Шоңҡар" һәм "Толпар" йәштәр журналдары ҡатнашлығында уҙғарыла, ҡатнашыусыларҙың иң яҡшы шиғырҙары һәм хикәйәләре ошо баҫмаларҙа донъя күргән. Башҡортостандың Яҙыусылар союзынан хәбәр итеүҙәренсә, конкурсҡа йомғаҡ яһау һәм еңеүселәрҙе бүләкләү сараһы 15-30 ноябрҙә була.

✓Рәсәйҙә дөйөм белем биреү өлкәһендәге дәүләт мәғлүмәт системаһын индереү планлаштырыла, ул өйгә эштәрҙе автоматик рәүештә тикшереүгә күҙ уңында тоторға тейеш, тип хәбәр итә РИА Новости һанлы үҫеш, элемтә һәм киң коммуникациялар министры урынбаҫары Олег Качановҡа һылтанма менән. Был укытыусыларҙың эшен кәметергә мөмкинлек бирергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта белем биреү сифатына талаптарҙы үтәү мотлаҡ.

*✓ Башҡортостанда Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатов исемендәге 185 махсус класс эшләй, унда дүрт меңдән ашыу бала шөғөлләнә, был һан йылдан-йыл арта.*



ҠЫҪҠАСА

# ҠОТЛАНДЫЛАР

**Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров аграр тармаҡтың алдынғы вәкилдәренә Рәсәйҙең һәм республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы.** "Бөгөн беҙ еңел булмаған, әммә бик мөһим аграрий һөнәрен һайлаған кешеләрҙе тәбрикләйбеҙ. Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнө уңайынан ихлас ҡотлауҙарымды ҡабул итегеҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе. Уның һүҙҙәренсә, республикабыҙ өсөн ауыл хужалығы оло әһәмиәткә эйә. Аграрийҙарҙың хеҙмәте менән Башҡортостан бөгөн йәшәй һәм сәскә ата, ышанысլы аҙымдар менән алға атлай. Һауа шарттарының ҡатмарлы булыуына ҡарамаҫтан, быйыл да аграрийҙар республиканы яҡшы уңыш менән һөйөндөрҙө.

✓ **РФ Мәғариф министрлығы уҡыусыларға дәрестә смартфон ҡулланыуҙы тыйҙы. Өфө ата-әсәләренең 81 проценты бының менән килешә, тип яҙа SuperJob сервисы.** Һәр ата-әсә балаһы мәктәптә булғанда ла уның бәйләнештә булыуын теләй, әммә дәрес барғанда смартфон ҡулланыуына ҡаршы. Был турала сервис үткәргән һорау алыуҙар күрһәтә. Әйткәндәй, был ҡарарҙы хуплаусылар араһында атайҙар күберәк - 84 процент. Инициатива менән килешеүсе әсәйҙәр һаны иһә 77 процент. Һорауҙарға яуап биреүсе уҡытыусыларҙың 88 проценты был яңылыҡты хуплай. Мәктәптә телефон ҡулланыуҙы тулыһынса тыйырғамы, юҡмы, тигән һорауға яуаптар төрлөсә. Был идея менән 10 педагогтың 6-һы килешә, әммә 10 ата-әсәнең 3-әүһе генә быының менән ризалашырға әҙер. Баланың мәктәпкә телефон алып китеүе йышыраҡ әсәйҙәргә кәрәк.

✓ **Башҡортостанда мәктәпкәсә йәштәге балалар һәм 1-4 класс уҡыусылары өсөн йәш шайморатовсылар клубтары барлыҡҡа килеүе ихтимал.** Был хаҡта Мәғариф һәм фән министрлығының милли белем биреү идаралығы начальнигы Илдус Ҡаһарманов хәбәр итте. Уның билдәләүенсә, хәҙер Башҡортостанда Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатов исемендәге 185 махсус класс эшләй, унда дүрт меңдән ашыу бала шөғөлләнә, был һан йылдан-йыл арта. "Йәй һәм ҡыш көндәрендә данлыҡлы генерал исемендәге күсмә кубокка шайморатов уйындары ойошторабыҙ. 2023 йылда тәүге тапҡыр биш көнлөк ике профилле смена эшләне, тәүҙә - бишенселәр, аҙаҡ 6-7 кластар өсөн. Балалар хәрби һәм тактик күнекмәләрҙе үҙләштерҙе, медицина ярҙамы күрһәтергә өйрәнде. Киләһе йылда республикала "Патриот" паркы филиалдары асылғас, ошондай сменалар булдырырға әҙерләнәбеҙ", - тип һөйләне Илдус Ҡаһарманов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов исемендәге кластар Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса ойошторола. Тәүгеләре Рәми Ғарипов исемендәге республика гимназия-интернатында, Өфөнөң 44-се һәм 162-се полилингваль мәктәптәрендә асылды.

✓ **Август айында Башҡортостанда 3611 сабый донъяға килгән. Был 2022 йылдың августына ҡарағанда 249 балаға (7,4 процент) күберәк, тип хәбәр итте республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова.** "Ләкин быйыл былтырғыға ҡарағанда 270 сабыйға аҙыраҡ тыуған. Волга буйындағы башҡа төбәктәрҙә лә шундай уҡ хәл", - тине хеҙмәт министры. Тыуымды арттырыу өсөн Башҡортостанда 2025 йылға тиклем бер нисә бурысты үҙ эсенә алған план раҫланған: аборттар һанын кәметеү маҡсатында йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам итеү, репродуктив һаулыҡты нығытыу һәм ярҙамсы репродуктив технологияларҙы үҫтереү, йәш студент ғаиләләренә, күп балалы, 10 йәшкә тиклемге балалары булған һәм эшләп йөрөгән ата-әсәләргә ярҙам итеү.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯЛҒАН ЭСЕМЛЕККӘ...



**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Этил спирты, алкоголь һәм спиртлы продукция етештереү һәм уның әйләнеше өлкәһендә эшмәкәрлекте һәм алкоголле эсемлектәр ҡулланыуҙы көйләү тураһында" БР Законының 10-сы статьяһына үҙгәрештәрҙе икенсе уҡыуҙа ҡабул итте.**

Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, законға үҙгәрештәр республика биләмәһендә һатылған аҙ алкоголле продукцияның (сидр, һыра һәм һыра эсемлектәре, бал һәм пуаре) хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә, граждандарҙы ялған эсемлектәрҙән һаҡлауға йүнәлтелгән. Ойошмалар һәм эшҡыуарҙар бындай продукцияны маркировкалау талаптарын мотлаҡ үтәргә тейеш. Үрҙә әйтеп үтелгән аҙ алкоголле эсемлектәрҙе махсус реестрҙа теркәлгән ойошмалар ғына етештерергә хоҡуҡлы. Ойошманы реестрға индергәндә предприятиеға планлы тикшереү үткәрелә, уның барышында төп технологик ҡорамалдарҙың булыуын раҫларға кәрәк. "Законға бындай үҙгәрештәр һөҙөмтәле дәүләт көйләүе системаһы булдырырға һәм ысынбарлыҡтағы етештереүҙе йәшереү өсөн шарттарҙы юҡ итергә, рөхсәт ителмәгән продукцияны әйләнешкә индереү мөмкинлегенә юлды ябырға ярҙам итәсәк. Ә был үҙ сиратында граждандарҙың ғүмеренә һәм һаулығына хәүеф ихтималлығын кәметәсәк", - тине БР Дәүләт Йыйылышының сәнәғәт, инновация үҫеше, сауҙа, эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса комитет рәйесе Алексей Шмелев. Бынан алдараҡ составында метанол булған сидр менән күпләп ағыуланыу осрағы тураһында бөтә матбуғат сараларында ла хәбәр ителгәйне. Башҡортостанда 13 мең литр ошондай эсемлек асыҡланған.

# ИҢ ЯҠШЫЛАРҒА



**Башҡортостанда иң яҡшы студенттарға махсус стипендиялар билдәләнде. Тейешле ҡарарға Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған.**

Республиканың Мәғариф министрлығы тәҡдиме буйынса, 2023-2024 уҡыу йылында Сосланбәк Тавасиев исемендәге стипендия Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты Анастасия Сизоваға бирелә. Данлыҡлы скульптор исемендәге стипендия 2020 йылда булдырылғайны. Ул яҡшы уҡыған, һынлы сәнғәт өлкәһендә һәләтен күрһәткән студентҡа тапшырыла. Күләме - 5750 һум. Туған телдәрҙе һәм әҙәбиәтте һаҡлау, үҫтереү, популярлаштырыу буйынса йәмәғәт эшмәкәрлегенә өлөш индергән өсөн Рауил Бикбаев исемендәге махсус стипендияларға Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты Марсель Закиров, Өфө фән һәм технологиялар университеты студенты Азалия Мирзина лайыҡ булды. Йыл дауамында уларҙың стипендияһына өҫтәмә рәүештә 1200-шәр һум аҡса түләнә. Өфө фән һәм технологиялар университеты Хоҡуҡ институтынан өс студент - Айнур Сиражетдиновҡа, Ләйсән Мәмбәтоваға һәм Александр Даниловҡа РСФСР-ҙың һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған юрисы, Башҡортостандың элекке Конституция суды рәйесе Ирек Мөҡсинов исемендәге стипендия бирелә. Улар ҙа өҫтәп 1200 һум ала башлай. Өфө фән һәм технологиялар университетының тағы өс студенты Мостай Кәрим исемендәге махсус стипендияға лайыҡ булды. 1200 һумлыҡ өҫтәмә филология факультеттары вәкилдәре Хәлимә Дәүләтгәрәева һәм Гүзәл Сирғәлинаға түләнә.

# ТӘГӘРМӘСЕҢДЕ АЛЫШТЫРҘЫҢМЫ?



**1 декабрҙән миҙгелгә ярашлы алыштырылмаған шиналар өсөн сикләнмәгән күләмдә штраф ҡаралған, тип хәбәр итәләр БР Транспорт министрлығынан.**

"Йәйге шиналарҙы - ҡыш, ә энәле шиналарҙы йәй файҙаланыуҙы сикләүҙең маҡсатҡа ярашлылығы тирәләй күп йылдар барған бәхәстәр 2023 йылда бындай файҙаланыуҙарҙы рәсми тыйыу файҙаһына тамамланды. Бындай тыйыу уны боҙған өсөн ҙур күләмдә булмаһа ла штраф менән нығытыласаҡ. Уның ҡарауы, тәртипкә буйһонмаған водителгә бындай штрафты сикләнмәгән тапҡыр, шиналарын алыштырғанға тиклем, һалырға була", - тип аңлатма бирәләр ведомствонан. Әйткәндәй, бындай тәртип боҙған өсөн штраф 500 һум күләмендә. "Ошоға тиклем Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрендә әлеге тыйыуҙарҙың аныҡ тәртибе булмағанлыҡтан, ЮХХДИ инспекторҙары водителдәргә штраф сәпәй алмай ине. Күп йылдар автомобилистар өсөн энәле шиналы машиналарҙа йәй йөрөргә ярамағанлығы "һүҙһеҙ" ҡағиҙәгә әүерелеүенә ҡарамаҫтан, ҡайһы берәүҙәр был тәртипте боҙа башланы һәм йыл әйләнәһенә ҡышҡы резиналарҙа йөрөр булып китте. Шул уҡ ваҡытта һыуыҡ көндәрҙә водителдәргә машинаһына энәле тәгәрмәстәр кейҙермәһә лә, "йәбешкәк" ("липучки") тәгәрмәстәрҙә йөрөү тыйылмай. Был айырыуса көньяҡ төбәктәр өсөн мөһим. Баҫылып сыҡҡан нормаларҙан күренеүенсә, энәһеҙ ҡышҡы резинала йәй ҙә йөрөргә була - быының өсөн штраф ҡаралмаған. Штраф фәҡәт энәле шиналарҙа йөрөгән өсөн һалына.

**Элина ӘХМӘТОВА.**

# ЕНӘЙӘТ АСЫҠЛАНДЫ



**Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте идаралығы 23 йәшлек сит ил гражданының енәйәт эшмәкәрлеген асыҡлай һәм уны туҡтата. Был кеше Рәсәйҙә наркотиктарҙың ҙур партияһын һатырға йыйынған була.**

Сығышы менән Урта Азия республикаларының береһенән булған йәш кеше йәшертен ғәмәлдәрен социаль селтәрҙә мессенджер аша үҙенең бер енәйәттәше менән ярашлырып бойомға ашырмаҡсы булып, Мәскәүҙән Башҡортостанға килә һәм Өфө-Ырымбур трассаһы янындағы йәшертен урынға һалынған наркотиктарҙы алған ваҡытта Хәүефһеҙлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре тарафынан тотола. Тентегән ваҡытта унан 2,4 кг героин һалынған төргәк тартып алына. РФ Енәйәт кодексының "Енәйәт ғәмәле әҙерләгәне һәм енәйәт ҡылырға йыйынғаны" өсөн 30-сы статьяның 3-сө бүлеге һәм РФ Енәйәт кодексының "Законһыҙ рәүештә наркотик саралар һәм психотроп матдәләр әҙерләгәне, һатҡаны йәки таратҡаны" өсөн 228-се статьяның 5-се бүлеге буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылды. Стәрлетамаҡ ҡала суды был кешене ғәйепле тип тапты һәм ҡаты тәртиптәге холоҡ төҙәтеү колонияһында 9 йылға иркенән мәхрүм итергә ҡарар сығарҙы. БР Юғары судының апелляция билдәләмәһе менән суд ҡарары көсөнә инде.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡалала Өфө дәүләт нефть техник университеты хөрмәтенә аталған урам барлыҡҡа килде. Хакимиәттең матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, мэр Ратмир Мәүлиев ҡала советы ултырышында быйыл үҙенең 75 йыллығын билдәләгән юғары уҡыу йортоноң башланғысы менән ошондай тәҡдим индергәйне. Хәҙер Матвей Пинский һәм Космонавтар урамдары араһында урынлашҡан 240 метр оҙонлоғондағы биләмә Нефть университеты урамы тип атала.

✓3 - 8 ноябрҙә "Халыҡтар күп - ил берәү!" лозунгыһы аҫтында VIII Халыҡ-ара мәғрифәт акцияһы - "Ҙур этнографик диктант" уҙғарыла. Тест ике өлөштән тора: тәүге 20 һорау - дөйөм федераль өлөш, ул барыһы өсөн бер үк; тестың төбәк өлөшө 10 һорауҙан тора, ул Рәсәй Федерацияһының һәр субъектының этнографик үҙенсәлектәрен сағылдыра. Бөтә һорауҙарға ла дөрөҫ яуап биргән кешегә 100 балл ҡуйыла. Тест электрон форматта бирелә һәм кире ебәрелә, уны үтәү өсөн 45 минут ваҡыт бирелә.

✓Өфөлә ҡала йәмәғәт транспорты водителдәренә ҡытлыҡты кәметеү буйынса комплекслы эш алып барыла. Мәҫәлән, дөйөм белем биреү учреждениелары һәм һөнәри уҡыу йорттары менән үҙ-ара эш итеүҙе иҫәпкә алып баш ҡаланың автотранспорт предприятиеларын тулыландырыу мәсьәләһе ҡарала. Әлеге ваҡытта муниципаль ташыусыларға 340-тан ашыу хеҙмәткәр талап ителә, шуларҙың 140-ы - автобус, 126-һы - троллейбус һәм 77-һе - трамвай водителе.

✓Өфөнөң Киров районында "РВ-1" радиоэлектрон технопарк асырға йыйыналар. Технопарк проекты электрон сәнәғәт өлкәһендә объекттар төҙөүҙе күҙ уңында тота. 2030 йылға 370 эш урыны булдырыу ҡарала. Башҡортостанға сәнәғәт технопарктары инфраструктураһын үҫтереү өсөн 504 миллион һум күләмендә федераль аҡса бүленә. Быны раҫлаған ҡарарға Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған.

✓Рәсәй Гидрометүҙәге хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда ноябрҙең йылы булыуы фаразлана. Уртаса һауа температураһының норманан 1-1,5 градусҡа юғарыраҡ (норма минус 4,4 градус), ә айлыҡ яуым-төшөмдөң нормаға яҡын булыуы көтөлә (норма 30-50 мм).

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Ҡуртым ипотека менән сағыштырғанда арзанғараҡ төшә - айлыҡ ҡуртым хаҡы ипотека түләүенән байтаҡҡа аҙыраҡ. Экспертар әйтеүенсә, беренсел һәм икенсел баҙарҙа хаҡтарҙың артыуы торлаҡ һатып алыу мөмкинлеген кәметә.***



*ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!*



# ҒӘҘӘТИ БУЛМАҒАН КҮРГӘҘМӘ



**Баш ҡалабыҙҙың Софья Перовская урамындағы "Көньяҡ полюс" сауҙа үҙәгендә, "Интеллектус" мауыҡтырғыс фәндәр йортонда үтә ҡыҙыҡлы күргәҙмә эшләй башланы, ул "Рәсәйҙең күсмә халыҡтарының традицион торлаҡтарының геометрик гармонияһы", тип атала.**

Бында, мәҫәлән, тирмәләр, Шухов башнялары һәм гиперболоид араһында ниндәй бәйләнеш булыуы хаҡында мәғлүмәт алып була. Билдәле булыуынса, халыҡтарҙың традицион торлаҡтарының формаһы күп быуаттар дауамында үҙгәрешһеҙ ҡалған. Эш уларҙың бер ни тиклем ҡалыплашҡан, күнегелгән һәм һәр халыҡтың йәшәү рәүеше өсөн уңайлы булыуында ғынамы икән? Нисек кенә сәйер тойолмаһын, быға яуапты математика һәм физика аша табып була. Күргәҙмәлә экскурсия барышында Рәсәй халыҡтарының өс төрлө торлағы - чума, иглу һәм тирмә нигеҙенә ниндәй геометрик формалар һалынғанлығы, күсереп йөрөтөп була торған торлаҡта ел-ямғырҙан, һыуыҡтан һаҡлана алыуҙың физик асылы хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирелә. Күсмәндәрҙең мобиль торлаҡтарының механик ныҡлығын, баҫым бүленешен һәм йылы һаҡлау мөмкинлектәрен математика һәм физика ҡанундары ярҙамында өйрәнеү бынан бик күп быуаттар әүәлерәк йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың ғәмәли зиһен тәрәнлеген аңларға ярҙам итә. Күргәҙмә 2024 йылдың 31 августына тиклем эшләйәсәк.

# "УҠЫУ ӨЙӨ"НӘ РӘХИМ ИТЕГЕҘ!



**С.Т. Аксаков исемендәге яңыртылған мәҙәниәт һәм ял итеү баҡсаһына ошо күркәм йола тергеҙелде - бында "Уҡыу өйө" асылды.**

Заманында баш ҡалабыҙҙың элекке А.В. Луначарский исемендәге баҡсаһында ял итергә килеүселәр өсөн махсус уҡыу павильоны эшләгән, гәзит-журнал, әҙәби әҫәрҙәр менән танышыу мөмкинлеге булған. "Уҡыу өйө"ндә иң тәүҙә Өфө ҡалаһы музейҙары үҙ программаларын халыҡҡа тәҡдим итә башланы, тыуған яҡ, мәҙәниәт, әҙәбиәт тарихы менән бәйле әңгәмәләр, остаз-класстар үткәрелә, үҙҙәренең экспонаттары ҡуйылған күргәҙмәләр ойоштора. Үткән ял көндәрендә "Аксаков тарихтары баҡсаһы" проекты сиктәрендә Өфө ҡалаһы тарихы музейы ойошторған интерактив майҙансыҡҡа 120-нән артыҡ кеше килде. Улар Өфө тарихы буйынса уҙғарылған әңгәмәлә әүҙем ҡатнашты, китап һәм журналдар менән танышты. Бында ғаиләләр балалары менән килә ала: улар шашка уйнай, башҡа өҫтәл уйындары менән мәшғүл була, һүрәт төшөрә.

# ҠУРТЫМ ХАҠЫ ҠИММӘТ



**Өфөлә фатирҙы ҡуртымға алыу хаҡы арткан, тип билдәләй "Фатирҙар донъяһы" федераль порталы аналитиктары.**

Экспертар быны ихтыяждың артыуы менән бәйләй, сөнки ҡуртым ипотека менән сағыштырғанда арзанғараҡ төшә - айлыҡ ҡуртым хаҡы ипотека түләүенән байтаҡҡа аҙыраҡ. Портал мәғлүмәттәренә ярашлы, баш ҡалала бер бүлмәле фатирҙы ҡуртымға алыу хаҡы 6,5 процентҡа артҡан (айына 17,22 мең һум). Ике бүлмәлеһе ғинуар айынан 8 процентҡа ҡиммәтләнгән (22,85 мең һум). Ә өс бүлмәле фатирҙың хаҡы йыл эсендә 7,6 процентҡа артып, 30,8 мең һумға еткән. Экспертар әйтеүенсә, беренсел һәм икенсел баҙарҙа хаҡтарҙың артыуы торлаҡ һатып алыу мөмкинлеген кәметә. "Күптәр өсөн ҡуртымға алыу торлаҡ мәсьәләһен хәл итеүҙең берҙән-бер юлы булып тора. Шуға ярашлы, ихтыяж һәм ставкалар арта, баҙарҙа фатирҙар ҙа кәмей. Йыл аҙағына тиклем ҡуртым хаҡы тағы ла ҡиммәтләнер тип уйлайбыҙ", - тип белдерҙеләр "Фатирҙар донъяһы"нда.

# ҺЫЛЫУҠАЙҘАР...



**Өфөлә "Рәсәйҙең йәш һылыуҡайы - Башҡортостан" конкурсының төбәк этабы үтте. Конкурста балалар категорияһында - 5-12 йәшлек, ә үсмерҙәр номинацияһында 13-17 йәшлек ҡыҙҙар ҡатнашты.**

Төрлө конкурстарҙа Башҡортостанды күрһәтеү өсөн өс ҡыҙ һайлап алынды. 16 йәшлек Ангелина Баркутова 3 ноябрҙә Мәскәүҙә "Донъя һылыуы-2023" халыҡ-ара матурлыҡ конкурсында ҡатнаша. "Рәсәйҙең йәш һылыуҡайы" Адель Ильясоваға 9 йәш. Ул художестволы гимнастика менән шөғөлләнә, инглиз һәм ҡытай телдәрен өйрәнә. "Берҙәмлек һылыуҡайы" - 12 йәшлек Самира Вахитова. Самира - уҡыу алдынғыһы, 39-сы гимназияла уҡып йөрөй, спорт һәм бал бейеүҙәре менән шөғөлләнә. Гагарин олимпиадаһы еңеүсеһе һәм туғыҙ тапҡыр бал бейеүҙәре буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары еңеүсеһе. Төбәк этабын ойоштороусы "Һомай" студияһы һәм Айгөл Үтәгәнова.Конкурс Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты һәм Башҡорт асыҡ КВН лигаһы булышлығында ойошторолдо.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЗАКОНҒА ҮҘГӘРЕШТӘР

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы Көстәр ветерандары тураһында" законға үҙгәрештәрҙе тикшерә.** Парламент рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, улар Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларында хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан яугирҙарҙы социаль яҡлауға йүнәлтелә. Әле хәрби хәрәкәттәр ветераны һәм хәрби хәрәкәттәр инвалиды статусы 2022 йылдың 24 февраленән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға - хәрби хеҙмәткәрҙәргә һәм добровольцтарға бирелә. Ләкин Донбасс биләмәһендә хәрби хәрәкәттәр 2014 йылдан бирле бара. Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары Рәсәй составына инде, уларҙың халҡы - Рәсәй граждандары социаль гарантияларға хоҡуҡлы. Тейешле сығымдар 2024 йылға һәм 2025, 2026 йылдарҙың план осорона Башҡортостан Республикаһы бюджеты проектында ҡарала. Закон проектына Башҡортостан Башлығы һәм Башҡортостан Хөкүмәте ыңғай һығымта бирҙе.

✓ **Башҡортостанда йыл башынан алып 283 меңдән ашыу баланың ата-әсәһе берҙәм пособие алған.** Пособиелар социаль ҡаҙнасылыҡ йүнәлешендә рәсмиләштерелә. Бының өсөн дәүләт хеҙмәттәре порталы аша бирелгән бер ғариза етә, ә ғаиләнең килеме һәм мөлкәте тураһында мәғлүмәттәрҙе белгестәр ведомствоара документтар менән алмашыу барышында тикшерә, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Социаль фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән. Рәсәйҙә берҙәм пособие 2023 йылдан индерелде. Пособие элек ғәмәлдә булған бер нисә пособиены берләштерҙе. Түләүҙе тәғәйенләгәндә ғаиләнең килеме һәм мөлкәте баһалана, шулай уҡ ата-әсәләрҙең мәшғүллеге иҫәпкә алына. Башинформ хәбәр итеүенсә, 2023 йылда республикаға балалар пособиеларын түләү өсөн федераль бюджеттан 5,4 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән.

✓ **Башҡортостанда автокредит алыусылар һаны кәмей. Кредит тарихтары милли бюроһы мәғлүмәттәренә ярашлы, сентябрҙә улар 6,6 процентҡа (3 332) аҙыраҡ теркәлгән.** Августа иһә июль менән сағыштырғанда бындай төр кредиттар 7 процентҡа кәмегән булған. Шулай ҙа былтырғы йылға ҡарағанда 2023 йылда барыбер автокредиттар күберәк: сентябрҙә + 47,6, августа 41,6 процент. Рәсәйҙә сентябрҙә автокредиттар тағы ла кәмегән. Аналитиктар әйтеүенсә, февраль-июлдә машиналар күберәк һатылған, һуңғы ике айҙағы түбән һандар автокредит баҙарының тынысланып, бер хәлгә килеүе тураһында һөйләй. Шулай ҙа августа уртаса автокредит хаҡы рекорд һандарға еткән - республика буйынса 1,38, ил буйынса 1, 49 миллион һум. Былтыр күпселек миллион һум тирәһе автокредит алған.

✓ **Башҡортостандан йәш шахматсы Адель Йосопова ауыл ерендә уҡыған ҡыҙҙар араһында классик шахмат буйынса ике тапҡыр Рәсәй чемпионы исемен яуланы.** Был хаҡта республикаһының Шахмат федерацияһынан хәбәр иттеләр. Адель Йосопова 2-10 октябрҙә Һамар өлкәһендә ауыл уҡыусылары араһында ойошторолған Бөтә Рәсәй ярыштарында ҡатнашты. "Башинформ"ға хәбәр итеүҙәренсә, турнирҙа ҡыҙ спорт ҡомарын һәм еңеүгә ынтылышын күрһәтте. Шулай уҡ яҡташыбыҙ турнирҙа 17 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар араһында беренсе, сатраш композицияларын сисеү буйынса конкурста икенсе урынды алды, тип белдерҙеләр Башҡортостандың Шахмат федерацияһында.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан тамырҙарын таҙартыу

❖ 100-әр грамм киптерелгән ромашка сәскәһе, һары мәтрүшкә, шиңмәҫгөл һәм ҡайын бөрөһөн алырға, йыйылманың 1 ҡалағына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 3-4 сәғәт төнәтергә. Шунан төнәтмәнең яртыһын һөҙөп алырға, 1 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм киске аштан алда эсергә. Иртәнсәк ҡалған төнәтмәне йылытырға, 1 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм иртәнге аштан алда эсергә. Йыйылма бөткәнсе шулай дауаланырға. Был юсул менән 5 йылға бер тапҡыр ғына ҡулланырға мөмкин.

❖ 1 стакан укроп орлоғона 2 ҡалаҡ ваҡланған валериана тамырын һәм 2 стакан бал ҡушып, термосҡа 2 литрға тиклем еткереп һыу ҡойорға, 1 тәүлек төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Бөйөр һәм ҡан тамырҙарын таҙартыу маҡсатында 5 ҡалаҡ ваҡланған ҡарағай, шыршы, пихта ыҫмалаһы, 3 ҡалаҡ ваҡланған гөлйемеш, 2 ҡалаҡ ваҡланған һуған ҡабығына 800 грамм ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатып, 30 минут төнәтергә. Шунан ҡалын туҡыма аша һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр һәм берҙе төнгөләккә ҡарай 200-шәр мг эсергә.

## Быуындарҙы таҙартыу

❖ 5 грамм лавр япрағына 300 грамм һыу ҡойоп, ҡайнап сыҡҡас, тағы биш минут тотоп, уттан алырға. Шунан термосҡа 3-4 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне һөҙөргә һәм аҙлап ҡына (1 ҡалаҡтан да артыҡ түгел) 12 сәғәт эсендә эсергә. Дауаланыуҙың икенсе һәм өсөнсө көндәрендә ошо уҡ юсул менән яңынан әҙерләп, шулай уҡ бер эскәндә 1 ҡалаҡтан да арттырмай эсергә кәрәк. Шунан туҡтап торорға, ике аҙна үткәс, был өс көнлөк дауаланыуҙы ҡабатларға мөмкин. Унан һуң кәрәк осраҡта тағы ла 3-4 айҙан ҡабаттан дауаланырға мөмкин, артабан йылына 1-2 тапҡыр. Лавр япрағы эсте ҡатырыуын иҫтә тотоғоҙ.

## Йөрәк йыш ҡаҡһа

❖ 1 ҡалаҡ мелиссаға (лимон бөтнөгө) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда ярты стакан эсергә.

**Гәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Башҡортостанда ике дәүләт теле, туған һәм сит телдәр уҡытыла икән һәм 1-се Республика полилингваль күп профилле гимназия үрнәгендә бик матур тәжрибә күрҙек. Ғөмүмән, һеҙҙә белем культы йәшәй, был һоҡландыра.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Сәңкелдәк ҡаҙ, ваҡ ҡашҡа ҡаҙ

**(Пискулька. Малый белолобый гусь)**



Ваҡ ҡашҡа ҡаҙҙан айырыуы ауыр, тик унан вағыраҡ. Маңлайындағы табы ҙурыраҡ һәм түбәһенә тиклем етеп тора. Тик шулай ҙа уларҙы айырыу өсөн ҡошто ҡулға тотоп ҡарарға кәрәк. Сәңкелдәк ҡаҙҙың исеме үк әйтеп тороуынса, тауышы ныҡ көслө. Ғәҙәттә, бер төркөм генә булып осмайҙар, киреһенсә, тәртипте боҙоп, ныҡ тауышланып осоп барыуынан уны танырға була.

Евразия континентының көньяҡ тундраһы һәм урманлы тундраһында көн итә.

XIX - XX бб. арауығында Урал алдында осоп үткәне күренеп ҡала. Беҙҙең заманда Кама йылғаһы үҙәне, Ағиҙел йылғаһының түбәнге ағымында, Асылыкүл һәм Ҡандракүлдә һирәк булһа ла, осраштыра. Каспийҙа, Ҡара диңгел алдында, Көнбайыш Европаның көньяғында ҡышлай.

## Аҡ ҡаҙ

**(Белый гусь)**



Ҡаҙға тулыһынса оҡшап тора. Башҡаларҙан айырыусы һыҙаты - ул тулыһынса аҡ төҫтә, бары тик ҡанат остары ғына ҡара. Түбәһендә һоро йәки ерән һыҙаты булыуы бар, суҡышы һәм тәпәйҙәре - алһыу. Йәш ҡаҙҙар бысрағыраҡ аҡ төҫтә, башы ла ҡарараҡ, тәпәйҙәре менән суҡышы - һоро. Кәүҙә оҙонлоғо 65-80 см.

XX быуаттың 30-сы йылдарында осоп барышлай Кама йылғаһында йыш туҡтар булғандар. 30 йылдан һуң Ағиҙел тамағында 8 ҡоштан торған төркөм тап була. Ә. Мәмәтов 1990 йылдың 17 апрелендә Краснокама районында Түбәнге Кама һыуһаҡлағысында 7 аҡ ҡаҙҙы күреүен теркәй.

Рәсәйҙә аҡ ҡаҙ бар. Врангель күлендә, Көнсығыш Себерҙең материклы тундараларында оя ҡора. Беҙҙең территорияла бик һирәк осрай, унда ла осоп барған ҡоштарҙың 1,5 процентын ғына алып тора.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*МӘҒАРИФ*

# БЕҘҘЕҢ ТӘЖРИБӘ...

## өлгө булараҡ ҡабул ителде

**Рәсәйҙә һәр халыҡтың үҙ туған телендә белем алыу һәм туған телен өйрәнеү хоҡуғы бар һәм илебеҙҙең һәр төбәгендә быны бойомға ашырыуҙың үҙ үҙенсәлектәре, үҙ тәртибе булдырылған. Ошо турала Өфөлә булып үткән Полилингваль белем биреү буйынса халыҡ-ара форумда ҡатнашыусыларҙың фекерен тыңланыҡ.**



***Индира Ашурова, 11-се Каспий гимназияһы рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Дағстан Республикаһы:*** Был форумдан оҙаҡ йылдар онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар алдым. Тәү сиратта, Башҡортостан халҡының иҫ киткес ҡунаҡсыл, асыҡ йөҙлө булыуы, ойоштороу эштәренең юғары кимәлдә ҡуйылыуы арбаны. Ә инде халыҡ-ара форумға килгәндә, унын йөкмәткеһе һәр ҡатнашыусы өсөн тәжрибә уртаҡлашыу, фекер алышыу йәһәтенән файҙалы итеп төҙөлгәйне. Ике көн дауамында барған сарала Башҡортостандың полилингваль белем биреү, милли мәғариф системалары өлкәһендә тупланған тәжрибәһен күрҙек, уртаҡ яҡтарыбыҙ ҙа, айырмалар ҙа бар. Дағстанда көн дауамында эшләгән мәктәптәр һирәк, дәүләт теле лә берәү - рус теле. Ә бына ерле халыҡтар һаны республикабыҙҙа 14, тағы шул тирәһе аҙ һанлы халыҡтар бар һәм уларҙың да туған телдәрен һаҡлау, үҫтереү мәсьәләһе беҙҙең өсөн бик әһәмиәтле. Мәктәптәрҙә туған тел булараҡ 14 тел өйрәнелә. Мәҫәлән, беҙҙең белем усағында авар, даргин, лак, лезгин милләтле балалар күпселекте тәшкин итә һәм уларҙы төркөмдәргә бүлеп уҡытыу ҡаралған. Ә бына табасарандар күп түгел, уларға гимназиябыҙҙа туған телдәрен өйрәнеү мөмкинлеге юҡ. Туған телдәр аҙнаһына ике, ә рус теле биш сәғәт уҡытыла. Башҡортостанда ике дәүләт теле, туған һәм сит телдәр уҡытыла икән һәм 1-се Республика полилингваль күп профилле гимназия үрнәгендә бик матур тәжрибә күрҙек. Уҡыусылар һәм педагогтар өсөн полилингваль, полимәҙәни мөхитте үҫтереү маҡсатында урындағы Мәғариф министрлығы тарафынан ғәжәйеп уңайлы шарттар булдырылған. Бындай мөхиттә тәрбиәләнгән киләсәк быуындың шәхес булып формалашыуына шигем юҡ. Ғөмүмән, һеҙҙә белем культы йәшәй, был һоҡландыра. Быны беҙҙә лә бойомға ашырып булыуына ышаныс менән ҡайтам.

***Мадина Царазонова, Төньяҡ Осетия - Алания Республикаһының Владикавказ ҡалаһындағы "Алания гимназияһы" мәктәп-интернаты директоры:*** Башҡортостанда күрһәтелгән полилингваль мәктәптәрҙе ҡарап, методика йәһәтенән ҡараштарыбыҙ айырылыуын аңлайым. Иң мөһиме, барыбыҙ ҙа аныҡ бер сиктәрҙе билдәләргә, һәр төбәктең үҙенсәлектәрен иҫәпкә алған һәм ҡулланғанда файҙалы, һөҙөмтәле булған полилингваль белем биреүҙең 2-3 моделен айырып алырға ынтылабыҙ. Беҙҙә эштәр нисек ҡуйылыуын ентекле аңлатып тормайым. Шулай ҙа көн буйы эшләгән мәктәп бала һәм ата-әсәләр өсөн уңайлы булыуын, шуға беҙҙә интернат та булдырылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алам. Унан һуң, "Алания гимназияһы"нда башланғыс белем биреү, йәғни уҡытыуҙың 1-се баҫҡысы туған телдә бойомға ашырыла. Башланғыс кластарҙа рус теле һәм әҙәбиәте предметтары, әлбиттә, рус телендә уҡытыла. Башҡа предметтар осетин телендә алып барыла, 5-се класҡа күскәс тә ҡапыл ғына русса уҡытыла башламай: үткән йылда өйрәнелгәнде ҡабатлап, дәрестәр яйлап ике телдә үткәрелә. Шуға балалар ике телдә лә терминдарҙы яҡшы белә, осетин телендә уҡыу урта кластарҙа ҡатмарлыҡтар тыуҙырмай. Яҡын киләсәккә күҙ һалып, дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы талап иткән предметтарҙы милли телдәрҙә бойомға ашырыу әлегә нигеҙһеҙ булыуын аңлайбыҙ, әммә ул талап ителмәгән предметтарҙы тел мөхитен һаҡлап ҡалыу өсөн файҙаланыу кәрәк. Мәҫәлән, рәсем, музыка дәрестәрендә нәҡ шулай эшләй ҙә коллегалар. Бынан тыш, туған телде предметтарҙың крайға ҡағылышлы темаларын уҡытҡанда модулдәр, блоктар менән ҡулланырға була. Шул уҡ география дәрестәрендә нишләп тыуған төбәк тураһындағы материалдарҙы туған телдә һөйләмәҫкә, ти! Уҡыусылар ҡабул итә икән, бының бер ҡатмарлығы ла юҡ. Бына ошондай уй-фекерҙәр менән ҡайтам был форумдан.

***Жанна Амырова, Алтай Республикаһы Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү һәм һөнәри әҙерлек институтының алтай теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы кафедраһы мөдире, педагогия фәндәре кандидаты:*** Форумдың беренсе көнөндә республиканың полилингваль күп профилле гимназияларын барып күрҙек, уларҙа 3-4 һәм унан күберәк телдәр өйрәнелә икән. Беҙҙә полилингваль белем биреү буйынса проект бындай кимәлдә әлегә бойомға ашарылмай, шулай ҙа 2020 йылдан алып Алтайҙа полилингваль балалар баҡсалары эшләй. Был 24 балалар баҡсаһында кескәйҙәр менән уҡытыу-тәрбиә эштәре тәүге йылда алтай телендә, икенсе йылда алтайса-русса, өсөнсө йылда русса-инглизсә алып барыла. Ошолай белем бирелгән тәүге тәрбиәләнеүселәр быйыл беренсе класҡа барҙы һәм коллегалар менән уларға артабан белем биреүҙә Башҡортостан тәжрибәһен ҡулланыу бик яҡшы булыр, тигән һығымтаға килдек. Мәҫәлән, тирә-яҡ мөхит, музыка дәрестәрен башҡорт, рус, инглиз телдәрендә берҙәй алып барыу буйынса күрһәтелгән асыҡ дәрес күңелебеҙгә ятты.

Форум шулай уҡ һәр төбәктең мәғариф өлкәһендәге проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшергә, кәңәшләшергә мөмкинлек бирҙе. Барыбыҙҙы ла милли мәғариф өлкәһендә кадрҙар мәсьәләһе, туған телдәрҙең ғаиләләрҙә әһәмиәте юғала барыуы борсой булып сыҡты. Беҙҙә урта һөнәри һәм юғары уҡыу йорттарында алтай телен белгән педагогик кадрҙарҙы әҙерләүсе факультеттар ябылып бөткәйне, колледждарҙа балалар баҡсалары һәм башланғыс кластар уҡытыусыларын әҙерләүсе бүлектәрҙе киренән астырҙыҡ. Һуңғы йылдарҙа йәштәрҙең алтай телен белеү теләге артыуын күҙәтәбеҙ, шулай ҙа ғаиләләрҙә туған телдә аралашыу ҡыйын бирелә. Бына шуға ла беҙҙә эште балалар баҡсаһынан башларға ҡарар ителде лә инде.

***Баир Балданов, Бүрәт Республикаһының милли телдәр һәм башҡа этномәҙәни йүнәлештәге мәсьәләләрҙе өйрәнеүгә ярҙам итеү буйынса "Бэлиг" республика үҙәге директоры:*** Башҡортостанда бойомға ашырылған полилингваль күп профилле белем биреү мәғариф учреждениеларының эшмәкәрлеге - бөтә илгә таратылырға тейешле үҙенсәлекле үрнәк. Был идеяны мин үҙ республикама алып ҡайтам, тәжрибә уртаҡлашырға башҡа коллегаларым мотлаҡ һеҙгә киләсәк. Әлеге көндә беҙҙә 467 мәктәп бар, шуларҙың 105-ендә бүрәт теле туған тел булараҡ аҙнаһына 5 сәғәт өйрәнелә, ә 260-ҡа яҡын белем усағында аҙнаһына 2 сәғәт бүрәт дәүләт телен уҡыйҙар. Бынан тыш, мәғариф системаһында аҙ һанлы ерле халыҡтарҙың - эвенк һәм сойоттарҙың туған телдәре уҡытыла. Республикабыҙҙа ике үҙенсәлекле белем усағында уҡыусыларға дүрт телде өйрәнеү мөмкинлеге бирелгән, тағы икенсе сит тел индерелһә, биш тел булыр ине. Шулай уҡ халыҡтың милли составына ҡарап, тик рус теле генә уҡытылған белем усаҡтары ла бар. Әммә бүрәт телендә белем биреү эше бер мәктәптә лә ҡуйылмаған, дәреслектәр ҙә юҡ. Полилингваль белем биреү буйынса халыҡ-ара форум сиктәрендә бына ошо мәсьәләләр тураһында коллегалар менән һөйләштек, һәр кем үҙенә ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле мәғлүмәт туплай алды. Сараның мәғариф хеҙмәткәренә, бигерәк тә Рәсәй халыҡтарының туған телдәр өлкәһе белгестәренә әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ булды. Мин үҙем дәүләт тарафынан милли телдәрҙе үҫтереү һәм һаҡлауҙа ярҙам күрһәтеү программаһын эшләү мөһимлеген билдәләп үттем.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа

**Халыҡтарҙың бөйөк күсеше эпохаһы (IV-V б.б.)**

370 йылдар тирәһендә гундарҙың һәм усундарҙың берләштерелгән көстәре Волга аша сыға һәм көнбайыш йүнәлешендә әүҙем хәрби хәрәкәттәр башлай. Был поход башында Көньяҡ Урал һәм Түбәнге Волга далаларында барса сәйәси ситуацияны контролдә тотҡан Кангюй дәүләте торғандыр, тип фараз итергә була. Беҙҙең эраның тәүге быуаттарында Кангюйҙа көнсығыш сығышлы юечжиларҙың әйҙәүсе этник төркөм булыуы хаҡында уҡыусыға билдәле инде. Гундарҙың көнбайыш походтарында Көньяҡ Урал ҡәбиләләре әүҙем ҡатнаша, һәм был мәғәнәлә гун атамаһы йыйылма исем булып тора. Гундар Төньяҡ Кавказ, Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйы ерҙәрен бик еңел генә яулап ала, шунан һуң улар Рим империяһы сиктәренә бәреп инә. Эске ҡапма-ҡаршылыҡтары арҡаһында көсһеҙләнгән Рим ҡаршылыҡ күрһәтә алмай, был уның тарҡалыуына килтерә. Тиҙҙән үҙәге Паннонияла булған гун державаһы барлыҡҡа килә, әммә ул оҙаҡ йәшәмәй һәм Аттиланың үлеменән һуң юҡҡа сыға (453 йыл).

Замандаштары көнбайыш гундарҙың ғәҙәттәре хаҡында үтә ҡыҙыҡлы яҙмалар ҡалдырған. Мәҫәлән, Рим тарихсыһы Аммиан Марцелин гундар тураһында "...уларҙан бер кем дә иген үҫтереү менән шөғөлләнмәй һәм бер ваҡытта ла һуҡаға тотонмай. Уларҙың барыһы ла, аныҡ йәшәгән урыны ла, йорт-усағы ла, ҡануны ла, тотороҡло йәшәү рәүеше лә булмаған, мәңгелек ҡасҡындар кеүек, ғүмере буйына йәшәгән тирмәләре (кибиткалары) менән төрлө урынлар буйлап күсеп йөрөй. Уларҙың ҡатындары шунда меҫкен генә кейем-һалымын туҡый, ирҙәре менән йоҡлай, балаларын таба һәм балиғ булғансы ашата. Тыуған илдәренең ҡайҙа булыуы хаҡындағы һорауға уларҙың береһе лә яуап бирә алмай: бер урында яралған, унан йыраҡта тыуған, тағы ла алыҫыраҡ ерҙәрҙә үҫкән... Улар етендән туҡылған йә иһә урман сысҡандары тиреһенән тегелгән кейем кейә: уларҙың эш һәм көнәл асыу өсөн тегелгән кейемдәре араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ", - тип яҙып ҡалдырған. Был һүҙҙәрҙең европаса белем алған һәм фекерләү рәүеше лә европаса булған кеше тарафынан яҙылыуын иҫәпкә алырға кәрәк, һәм дошмандарының күп нәмәләре уның өсөн сәйер булып күренгән. Артабан ул бына низәр яҙа: "Һөжүм итеү хәүефе янағанда алышҡа шынаға оҡшаш строй менән, вәхши тауыштар сығарып ташланалар. Иҫ киткес йылғыр булғанға улар ҡай сағында көтөлмәгәндә һәм юрамал төрлө яҡҡа һибелеп китә һәм тәҙөк булмаған төркөмдәре менән киң арауыҡта үлем сәсеп йөрөй; еҙәттән тыш тиҙ хәрәкәт итеүҙәре арҡаһында уларҙың стена артына баҫып кереүҙәрен йә иһә дошмандары лагерын талауҙарын күреп өлгөрөргә мөмкин булмай. Улар, йыраҡтан тороп, осло башы урынына шаҡ ҡатырлыҡ оҫталыҡ менән осло һөйәктәр беркетелгән һөңгөләрҙе ырғытып алыша, ә ҡул һуғышында, унды-һулды ҡарамай, ҡылыс менән сабыша, хәнйәр менән сәнсеүҙән тайшанып ҡалып, дошмандары өҫтөнә нығ итеп үрелгән арҡандарын ырғыта, ат өҫтөндә ултырырға ирек бирмәү һәм йәйәү ҡасып китә алмаһындар өсөн дошманының ағзаларын сырматып ала, шуға күрә уларҙы иң ғәйрәтле яугирҙар тип атап була".

Ишембай районындағы Салих ҡурғандары Көньяҡ Уралда IV-V быуаттар эпохаһын бөтөн тулылығында сағылдыра. Улар ваҡ соҡорҙар өҫтөнән 10 - 35 см бейеклегендә диаметры 5 метрҙан 12 метрға тиклемге бейек булмаған ер өйөмдәренән хасил булған. Күп кенә ҡәберҙәрҙең боронғо ер өҫтө кимәлендә таштар менән уратып алыныуы иғтибарға лайыҡ. Ҡәберҙәрҙең күбеһе ябай формалы, һайҙар, әммә улар араһында оҙонса стенаһының береһе буйында киртләстәре (баҫ-



ҡыстары) булғандары ла осрай. Был баҫҡыстар ҡәберҙе ябыу өсөн түшәлгән ағас ярҡалар өсөн эшләнгән. Бер осраҡта мәйетте ҡәберҙең оҙон стенаһы буйында соҡоп эшләнгән ләхеткә ерләгәндәр. Ҡәбеҙәрҙә таҡта ҡалдыҡтары табылыуы мәйеттәрҙең, моғайын, табуттарға һалыныуын күрһәтә. Башлыса, улар төньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә ерләнгән. Уларға итле ризыҡ өсөн һарыҡ түшкәһе өлөштәрен һалғандар. Ҡәберлектәргә боронғо осорҙарға уҡ кеше ҡулы тейгәнлектән материал бик аҙ һаҡланған. Табылдыҡтар араһында IV - VI быуаттар башына ҡараған бронза таралғылар (ҡаптырма) һәм бил ҡайыштары биҙәүестәре, ҡош (өйрәк) һындары, һөйәктән яһалған уҡ башаҡтары, беләҙектәр бар.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

**Ковель йүнәлешендәге һәм Владимир-Волынский янындағы яу хәрәкәттәре**

1944 йылдың ҡышҡы кампанияһында совет ғәскәрҙәре ҙур уңыштарға өлгәшә. Дүрт Украин фронты бик киң арауыҡта, дошманды ҙур юғалтыуҙарға дусар итеп, көнбайышҡа табан хәрәкәт итә. 3-сө һәм 4-се Украин фронттары ғәскәрҙәре дошмандың Никополь плацдармын юҡ итә. Днепрҙың һул яры фашистарҙан тулыһынса азат ителә. Ҡышҡы операциялар барышында немецтарҙың 10 дивизияһы һәм бер бригадаһы юҡ ителә, ә 23 дивизияһының составы яртылаш ҡыҙа ҡала. Дошман Днепр ярҙарынан 80 саҡрымдан 350 саҡрымға тиклем ерҙәрҙе ҡалдырып, сигенергә мәжбүр ителә.

Әммә яҙға табан Днепрҙың уң яғы ерҙәренә сыҡҡан частарға алға барыу нығ ауырлаша. Иртә килгән яҙ юлдарҙы үтеп сыҡҡыһыҙ итә, уларҙан ауыр автомашиналар үтә алмай, ялан аэромайдарындағы ерҙәргә самолеттарҙы ултыртыу мөмкин булмай. Ғәскәрҙәрҙе бер урындан икенсеһенә күсереү, маневрҙар яһау бик аҡрын бара.

Ҡышҡы һуғыштарҙан һуң 1-се Украин фронтының уң ҡанаты һәм 1-се Белорус фронты араһында өҙөклөк барлыҡҡа килә. Сигенгән дошман ошо арауыҡты файҙаланып өлгөрмәҫтән алда бында өр-яңы фронт булдырыу зарурлығы тыуа. Юғары Баш командование Ставкаһының 1944 йылдың 17 февралендәге ҡарары менән бында 2-се Белорус фронты формалаша. Беҙҙең 16-сы гв. атлы дивизияһы 7-се гв. атлы корпусы составында 2-се Белорус фронты ҡарамағына ебәрелә.

Март айының беренсе декадаһында 1-се, 2-се һәм 3-сө Украин фронттары Украинаның уң яҡ яры ерҙәрендә һөжүмгә күсә. 15 мартта 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре лә хәрби операцияға ҡушыла, ул Советтар Союзы Маршалы Г.К. Жуков командалығындағы 1-се Украин фронты менән үҙ-ара бәйләнештә хәрәкәт итә.

7-се гв. атлы корпусына яңы дислокация урынында - Волын өлкәһенең Ковель ҡалаһы янында һуғышҡа инергә бойорола.

16-сы гв. атлы дивизияһы 28 мартта Волын өлкәһенең Яблонка Малая ауылы янында урманда туплана. Яугирҙар аттары менән бында хәрби эшелондарға тейәлеп килә, юлда немец самолеттары уларҙы бомбаға тоторға маташһа ла, асыҡ платформалағы зенит пушкаларынан мәргән ут асылғас, бомбаларын ҡайҙа етте, шунда ташлап, ситкә осоп китеү яғын ҡарай.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**[12]. Төркиҙәрҙең телен аңлатыу.**

Кемдәр тик бер генә телдә белә, фарсылар менән буталмаған һәм ҡалаларҙа йәшәргә күнекмәгән, шуларҙың теле иң дөрөҫө. Ә кемдәрҙең теле икәү һәм кемдәр ҡала кешеләре менән ҡатышҡан, уларҙың һөйләше йомшара биргән, былар, мәҫәлән, соғдийҙар (sogdaq), кенчектар (kencek), аргулар (arru). Икенсе төркөм - хотандар (xotan), тибеттар (tibet) кеүек булғандар, һәм тангуттарҙың ҡайһылары (tagut), былар - төрки илдәренә килеүселәр ҡатламы. Мин һәр бер ырыуҙың теле хаҡында яҙасаҡмын. Ә Японияла (Jabarqa) йәшәүселәр хаҡында әйткәндә, уларҙың теле алыҫта йәшәүҙәре һәм уның (Японияның) Мачиндан ҙур диңгеҙ ашаһында ятыуы айҡанлы билдәһеҙ. Мачин һәм Чиндың үҙ теле бар, әммә ҡалала йәшәүселәр төрки телен дә яҡшы белә. Беҙҙең менән төрки яҙмаһында хат алышалар. Гог һәм Магогтың телдәре шулай уҡ билдәһеҙ, сөнки улар бөйөк стена менән уратып алынған һәм Мачинға яҡын булған тауҙар һәм диңгеҙ ашаһында йәшәй. Һәм Тибетта ла үҙҙәренең айырым теле [бар], тап шулай уҡ Хотанда ла айырым яҙма һәм тел, ә төрки телен яҡшы белмәйҙәр.

Уйғырҙарҙың теле саф төркисә (lisan), әммә уларҙың башҡа ләғәте (luga) лә бар, улар үҙ-ара ошо ләғәттә һөйләшәләр. Уларҙың егерме дүрт хәрефтән торған [бер] яҙмаһы төркисә, мин был хаҡта китабымдың башында яҙған инем. Был яҙмала улар китаптар яҙа һәм хат алыша. Ә башҡа бер, Чин [яҙмаһына] оҡшағанында, эш һәм канцелярҙар ҡағыҙҙары яҙыла, уны, жрецтарҙан башҡа, бер кем дә уҡый алмай. Былары мин ҡала кешеләре тип атағандарҙан. Кускенселәргә ҡағылғанда, улар араһында чомулдар бар; уларҙың аҙ аңлайышлы айырым һөйләше (ratana) бар, әммә улар төрки телен дә белә. Ҡай, ябаку, татарҙар һәм басмылдар шундайҙар, уларҙан һәр берләшмәнең айырым һөйләше (luga) бар һәм шул уҡ ваҡытта төрки телен дә яҡшы беләләр. Ә ҡырғыҙҙарҙың, ҡыпсаҡтарҙың, уғыҙҙарҙың, тухсиларҙың, яғмаларҙың, чигилдәрҙең, ограҡтарҙың, чаруктарҙың телдәре саф һәм берҙән-бер төрки теле; емек һәм башҡорттарҙың теле уларҙың теленә яҡын. Булғарҙарҙың, суварҙарҙың, Румға яҡын [йәшәгән] бәшәнәктәрҙең теле төркисә, [һүҙҙәрҙең] бер үк төрлө ҡыҫҡартыла биргән аҙағы менән. Телдәрҙән иң еңеле - уғыҙ теле, иң дөрөҫө - яғма теле, тухсиҙарҙың һәм кемдәр Илә (Ila), Иртыш (Artis), Обь (Jamar), Волга (Atil) үҙәндәрендә йәшәй - уйғыр иленә тиклем. Ә иң матуры - хаҡан биләмәләрендә һәм уларға йәнәш йәшәгәндәрҙә. Баласағун халҡы соғдийса ла, төркисә лә һөйләшә, тап Тараз (Tiraz) һәм Аҡ ҡала (madinat al-bajda) кешеләре кеүек. Исфиджабтан (ispijab) Баласағунға тиклемге аргу өлкәләрендә йәшәүсе халыҡтың телендә нескәлек (яңғырауыҡлылыҡ) бар. Ҡашғарҙа кенчексә һөйләшкән ауылдар бар, ә ил үҙәгендә - хаҡан-төрки [телендә]. Төрки өлкәләренең күп өлөшөнөң Румдан Мачинға тиклемге араһы - биш мең фарсах (фарсах= 2,25 км) һәм киңлеге өс мең фарсах, барлыһы һигеҙ мең фарсах. Мин уларҙың барыһын да белһендәр өсөн түңәрәк эсендә - ер картаһында күрһәттем.

**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

**✓ Сәйәсәттең нигеҙе урындағы иҡтисадты иҫәпкә алып үҫтерелергә тейеш, шул ваҡытта ғына ул дөрөҫ була. Иҡтисадтың, йәмғиәттең үҙәгендә, төп урында кеше булырға тейеш.**



# УРЫНДАҒЫ

## урынынан да,

(Башы 1-се биттә).

### Теркәүле терәкле

Беҙҙең ауылдан биш фән докторы сыҡҡан: Хәлил ағайым менән мин - иҡтисад фәндәре докторҙары, Яхъя ағай Ҡәйепов - ауыл хужалығы, Шәһит Ҡәйепов - техник фәндәр, Марсель Тойғонов медицина фәндәре докторҙары. Ике улым да иҡтисад буйынса фән кандидаттары. Өс туған апайымдың ҡыҙы Розалия Шәрәфуллина иҡтисад фәндәре кандидаты, Өфө фән һәм технологиялар университетының кафедра доценты. Тәүҙә беҙгә Хәлил ағай йүнәлеш биргәндер - ул беҙҙең тоҡомда тәүге теоретик. Атайым ғүмере буйы колхозда баш бухгалтер булды, ауыл иҡтисадын бик яҡшы белә ине, практик яҡтан, әлбиттә, төп консультант ул булды. Етенсе кластан һуң бухгалтерҙар курсын бөткән дә, эш башлаған, биш йыл һайын белем камиллаштырыу курстарында уҡып ҡайта торғайны. Имтихандарын гел бишкә биргән, шул туралағы танытмалары һаҡлана.

"Ауыл хужалығы институтының иҡтисад факультетына бар, баш экономист, йә баш бухгалтер булырһың", - тип атайым башлап әйтте. Тик ниңәлер күңел унда тартманы, йәш саҡта бит баш менән эшләгән эрҙе өнәмәй, физик яҡтағыһына өҫтөнлөк бирелә, спорт буйынса йә башҡа хәрәкәт талап иткән эргә барғы килә. Ауылда ул осорҙа юғары белемлеләр ҙә һирәк ине. Беҙҙең кластан, мәҫәлән, дүрт кеше юғары белем алды, аҙаҡ ситтән тороп уҡып бөткәндәр ҙә булды, ниңәлер, ғилемгә ынтылыу булманы. "Бөтә класс менән колхозға" тигән лозунг та йоғонто яһағандыр. Элегерәк бит ауыл кешеһенә хатта паспорт та бирмәгәндәр. Беҙ паспорт алһаҡ та, теркәлеү мәсьәләһе ауыр булды, ҡайҙа барһаң да теркәлеп булмай, күптәр кире әйләнеп ҡайттылар. Берәй ҙур ойошмаға эшкә урынлашып, эшселәрҙең дөйөм ятағынан, йә уҡыу йортоноң ятағынан урын алып була торғайны. Уныһы ла ваҡытлыса мөһөрө менән, шуға ла фатир алып, ауылдан ситкә китеп йәшәгәндәр бармаҡ менән һанарлыҡ ине, йәштәрҙең күпселеге ауылда төпләнде.

Ана шул теркәлеү мәсьәләһе ҡай саҡ көлкөлө хәлдәргә барып етә ине. Ростов университетын тамамлағас, Өфөләге авиация институтына йүнәлтмә бирҙеләр. Эшкә килһәм, кадрҙар бүлеге теркәлеүһеҙ эшкә алмайым, ти. Хәл торошон аңлатып ҡарайым, ҡымшанмай ҙа. Ахырҙа, ректор үҙе шәхсән баш ҡаланың бер райисполкомы менән һөйләшеп, дөйөм ятаҡтың бер бүлмәһенә ваҡытлыса теркәп ҡуйҙылар. Ярай әле кафедра мөдире Брежнев менән бергә һуғышта булған фронтовик, бер нәмәнән дә ҡурҡмаған тәүәккәл кеше ине. "Борсолма, кафедра бүлмәһенә булһа ла "пропишу", ти. Хәҙер уйлайым да, бындай сәйәсәт ауылдарҙы һаҡлауға һәйбәт этәргес булғандыр, тим.

### Ауыл тарихы

Йомаш ошо яҡтағы бөрйәндәрҙең тарихи ауылы. Ул бер тамырҙан - Ямаштан айырылып сыҡҡан: Ямаш менән Йомаш бер туған булғандар. Йомаштың үҙәнән айырылып сыҡҡан ауылдар ҙа бар, уларҙың күбеһе ваҡытында "перспективаһыҙ", тип бөтөрөлдө. Айырылған 6-7 ауылдан Йылым, Сәйғәфәр, Байыш ауылдары тороп ҡалды. Ҡартатайым, атайымдың әсәһенең ағаһы, егерменсе йылдарға тиклем йәйләүгә сыға торғайныҡ, тип һөйләй торғайны. Ул граждандар һуғышы башланғанда хәрби хеҙмәткә саҡырылы йәшендә булған. Уның олатаһының атаһы, Һибәтулла Сәйетғәфәров, билдәле тарихи шәхес - 3-сө Бөрйән олоҫонон старшинаһы. Ул Зәки Вәлидиҙең ышаныслы кешеһе булған, башҡорт Хөкүмәтенең алтынын үҙендә һаҡлаған, тиҙәр. Бындай ышаныс боронан килгән, олатаһы 1812 йылғы Ватан һуғышында Парижда булған, ике көмөш миҙал алып ҡайтҡан. Ғаиләләре шул осорҙан күтәрелеп киткән. Ҡартәсәйем, уның ейәнсәре, "Ҡартатайым урыҫтарға ер һатманы", тип, йыш ҡабатлай торғайны.

Ҡартатайым, ана шул олатайҙың ейәне: "Беҙҙең Йомаштың ерҙәре ҙур була торғайны, хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл ҡасабаһына тиклем барып етә ине", - тип һөйләй торғайны.

Һаҡмар буйы ауылдары йәйләүҙәренең үҙ сиктәре булған, йыл да шулай күсенеп йөрөгәндәр, аҫаба башҡорттар булараҡ, ерҙәрен нығытҡан грамоталары булған. Яйыҡ йылғаһына тиклем барып етеп, далала малға аҙыҡ наҡыҫланғансы йөрөтөп, кире урман яғына Йылымға ҡышлауға күсенгәндәр. Аҙаҡ тарихи сығанаҡтарҙан уҡып белдем: баҡтиһән, 19-сы быуат аҙағтарында башҡорттарға ауыл эргәһенән алып күпмелер саҡрымға тиклем ерҙәрҙе бирергә рөхсәт ителгән, ә ситтәрәген хөкүмәт үҙ иҫәбенә ала башлаған. Ерҙәрен сикләй башлағас, башҡорттар ауылдарынан айырылып сығып, алыҫтағы ерҙәргә сығып урынлашҡан. Бының аҙағы насар бөттө, бәләкәй ауылдар перспективаһыҙға һаналып, юҡҡа сыҡты - һуңғы һөжүм шул булды. Мәктәптәр, социаль структуралар ҙур ауылдар иҫәбендәге башҡа милләт ауылдарына күсте. Йомаш ауылы һаҡланып ҡалған. Беҙ уҡый башлағанда мәктәп ун класлыға әйләнде, урындағы кадрҙарҙан тупланған көслө уҡытыусылар коллективы барлыҡҡа килде. Ауыл советы ла, колхоз үҙәге лә Йомашта булды.

### Туған телле мәктәп

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән Ғабдулла Сәиди тоҡомонан бик көслө уҡытыусы - Роза Ильясова уҡытты. Боронғо башҡорт халҡының бер ҡайҙа ла яҙылмаған тарихын, Зәки Вәлиди тураһында ла ҡурҡмай һөйләй торғайны. Йыш ҡына иншалар яҙҙырҙы, шиғырҙар аша башҡортса матур тел менән матур итеп фекерләргә өйрәтә торғайны. Һәйбәт фекерләү тик туған телдә икәнен ул яҡшы белгән, әлбиттә. Беҙҙең быуынға туған телдә уҡытыу ныҡ тәьҫир иткәндер, сөнки тарихты төрлө яҡлап өйрәттеләр, милли рухта тәрбиәләнеләр. Әле ла иҫләйем: урыҫса уҡытып ҡарайҙар, килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Ул мәлдә бит хәҙергеләй телефонда ултырмайбыҙ, бөтән нәмә тик башҡортса. Русса аңлайбыҙ, тик һөйләй белмәйбеҙ, тел әйләнмәй ҙә ҡуя. Инша яҙһам, төрлө факттарға таянып, логика менән яҙам. Роза Булат ҡыҙы: "Иншаң фәнни хеҙмәт һымағыраҡ яҙылған", - ти торғайны. Ҡанатын ҡайырмайым, тигәндер, шулай үҫтергәндәр. Хәҙер класташтар менән: "Беҙҙә бит ниндәй шәп уҡытыусылар уҡытҡан, көслө белем биргәндәр",- тип иҫләп алабыҙ.

Ауыл менән бәйләнеш өҙөлмәй. Хәлил ағай мәрхүм иң яҡшы сығарылыш уҡыусыһына Грант булдырғайны, шуны дауам итәм, "Профессор Хәлил Барлыбаев исемендәге грант"ты үҙем финанслайым, йыл һайын май аҙағында ун беренсе класты лайыҡлы бөтөүсегә тапшырам. Шуныһы үкенесле, мәктәптә балалар һаны кәмегәндән-кәмей бара, йәштәрҙең ауылда ҡалмауы ғына ҙур проблема.

### Урындағы иҡтисад

Демографик проблеманы фәнни яҡтан төптән өйрәнеп, был мәсьәләне төрлө яҡлап тикшерергә кәрәк. Тәүге һылтау: "Эш юҡ", - тибеҙ. Был иң тәүҙә дөрөҫ алып барылмаған сәйәсәт һөҙөмтәһе. Сибайға күсеүемдең дә үҙ сәбәбе бар: ҡайҙалыр өҫтән, үҙәктән, халыҡ тураһында фекер йөрөтөү, фәнни эштәр яҙып ятыу дөрөҫлөккә тап килмәй. Халыҡтан алыҫлашмай, мөмкин булғансы тыуған яҡҡа тоғро булып эшләргә, йәшәргә кәрәк. Кешенең бәхетле, комфортлы йәшәүе Эске тулайым продукттың (ВВП-ның), сәнәғәттең үҫеүенә, уртаса эш хаҡының артыуына туранан-тура бәйле түгел. Йәшәү кимәле кешенең йәшәгән урынында билдәләнә, иҡтисади үҫеш, тотороҡлоҡ урындағы берләшмәнең йәшәү рәүешенә, урындағы шарттарға, мөхиткә бәйле. Кем менән эшләйһең, кем менән йәшәйһең, ғаиләнә матур йәшәргә шарттар, мөмкинлектәр бармы? Иҡтисади сәйәсәт тә ошо һорауҙарҙы иң төп урынға ҡуйырға тейеш. Ә беҙҙә улай түгел, ҡалдыҡ принцибы буйынса эшләнә, йәнәһе, төп эштәр ҡайҙалыр алыҫта, кеше күп йәшәгән урындарҙа башҡарыла, провинцияла түгел. Сәйәсәттең нигеҙе урындағы иҡтисадты иҫәпкә алып үҫтерелергә тейеш, шул ваҡытта ғына ул дөрөҫ була. Иҡтисадтың, йәмғиәттең үҙәгендә, төп урында кеше булырға тейеш. Кешене уйлайбыҙмы, кешенең мәнфәғәтен ҡайғыртабыҙмы, кеше өсөн тырышабыҙмы? Аныҡ яуап юҡ. Шулай булғас, кем өсөн тырышабыҙ һуң? Аңлашылмай.

Тыуған яҡҡа ҡайтып эшләй башлағас та шул турала бихисап ғилми хеҙмәттәр яҙҙым, китаптарым шул турала һөйләй, улар бөтәһе лә урындағы иҡтисадҡа бағышланған. Колхоздар осоронда кешеләр ауылдарҙа тырышып йәшәне, мал көттө, баҡса үҫтерҙе, балаларын да эшкә өйрәтте, күмәкләп, бер-береһенә ярҙам итешеп, өмәләр ойоштороп, өйҙәр һалышты. Шулай бергәләп йәшәүҙең нигеҙе ныҡлы булды, артабан күтәрергә генә кәрәк ине. Шул осорҙа төҙөгән программаларыбыҙ урындағы иҡтисадҡа нигеҙләнеп эшләнгәйне. Шәхси хужалыҡтарҙы үҫтереү, колхоз-совхоздарҙы кооператив формаһында һаҡлап ҡалыуҙы күҙ уңында тотҡайныҡ. Мәҫәлән, ул ваҡытта кешеләргә техника юҡ ине, ул колхоз-совхоздарҙа булды. Ер һөрҙөртергә, бесән саптырырға хужалыҡ етәкселегенә мөрәжәғәт итә инеләр. Техниканы бит хужалыҡ иҫәбе нигеҙендә халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеүгә әйләндерергә мөмкин ине, юҡ, базар иҡтисадының йылғырҙары үҙ файҙаһына бороп алдылар ҙа киттеләр, буштан-бушҡа, йә бәләкәй хаҡҡа халыҡ милкен үҙҙәренә алып бөттөләр. Сөнки шундай закондар ҡабул ителгәйне.

### Кеше һәм иҡтисад айырылғыһыҙ

Баймаҡ районының бер нисә хужалығында эксперимент формаһында үҙ программаларыбыҙҙы тормошҡа ашырып ҡараныҡ, Хәлил Әүбәкировичтың бер командаһы Учалы районында эшләне. Тәүҙә хөкүмәт кимәлендә ярҙам да булды, ауылда тотороҡло тормошто һаҡлап алып ҡалыуға һәйбәт мөмкинлектәр бар ине, әммә район хакимиәттәре кимәлендә ни эшләптер ыңғай ҡараш булманы. Уйлап ҡараһаң, ҡыҙыҡ. Мәҫәлән, токарь станогы еңел тартмай. Шуны, әллә нисә тонналы агрегатты, стенаны емереп, кран менән күтәреп алып, металлоломға тапшырып бөттөләр. Ә ауылда ике токарь бар, Өфөлә уҡып, моторҙар заводында эшләп, тәжрибә туплап, оҫтарып ҡайтҡандар. Станокты ниңә шуларға ҡуртымға бирмәҫкә? Ауылда бит запас частар һәр ваҡыт кәрәк. Ҡыҫҡаһы, кешене беренсе урынға ҡуйған сәйәсәт булмауҙан килеп тыуҙы бындай хәлдәр, киреһенсә, кешене талау сәйәсәте башланғайны.

Ерҙәрҙе киңәйтергә, мал һанын арттырырға ла мөмкинлектәр бирелмәне. Күптәр тырышып ҡараны, әммә документтар төҙөүҙә аҙағына еткерә алманы. Ваҡытында колхозда эшләгән быуын олоғайҙы, йәштәргә бындай тормош ҡыҙыҡ түгел ине. Аңлайышһыҙ мөхиттә ни эшләп йөрөһөндәр улар? Ситкә китә башланылар, өлкәндәр үҙҙәре, бар китегеҙ, беҙҙең һымаҡ ыҙалап йөрмәгеҙ, тип, фатиха бирҙеләр. Ә бит шул осорҙа балалар ата-әсәләре менән бергәләп һәйбәт фермер хужалыҡтары, ИП-лар асып, кооперативтарға берләшһәләр, ауыл һаҡланып ҡалыр ине. Быны бөгөн аңлаһаҡ та ул, хәҙер ауылда эшләрлек кеше юҡ. Шулай ҙа беҙҙең программаларҙың файҙаһы булды, йөҙҙән ашыу кооператив барлыҡҡа килде.

Бөгөн, кешегә яҡшылыҡ эшләйем, тигән сәйәсәт юҡ, хәҙер ҙур етештереүселәргә иғтибар артты, ситтән килгән бай инвесторҙар мәнфәғәте беренсе урында. Улар бит ошо ерлекте, мөхитте яҡшыртам тип килмәй, иң тәүҙә үҙҙәрен ҡайғырталар. Беҙҙә бит экстенсив хужалыҡ: йылҡы ҡырҙа йөрөй, һыйырҙар ҙа ҡар яуғансы ҡураға инмәй. Тәбиғи шарттарҙа мал көтөү боронан килә. Интенсив хужалыҡҡа ҙур фермалар кәрәк, ҙур майҙандағы һөрөнтө ерҙәрҙә ашлыҡты сәсеп үҫтерәләр ҙә, малға ашаталар, хәҙер шуға баҫым яһайҙар. Был төптән дөрөҫ түгел - ауылды артабан бөтөрөү, урындағы иҡтисадты юҡҡа сығарыу был. Миҫал килтерәм. Коньяк ҡайҙан килеп сыҡҡан? Франциялағы Коньяк тигән провинциянан. Унда күпләп виноград үҫтерәләр. Коньяк провинцияһында ерҙең сифаты ул тиклем түгел. Һәйбәт виноға һәйбәт виноград юҡ. Шуның арҡаһында уларҙың башына уй килгән: ә был виноградтан файҙа сығарырға буламы? Шунан коньяк ҡыуа башлағандар. Коньяк күбәйгәс, бутылкалар кәрәк. Береһе быяла заводы асҡан, икенсеһе пробкалар етештерә башлаған, өсөнсөһө транспорт хеҙмәте күрһәткән. Урындағы иҡтисад урындағыларҙың һәр береһенә эш булдыра, һәр береһе эргәләрендәгеләргә килем килтерә, бөтөн нәмәне олигархтар системаһы һымаҡ һурып, ситкә ебәрмәй. Килем етештергән урында ҡала. Бөтөн ерҙә лә шулай булырға тейеш. Мәҫәлән, Бөрйәндәге туризмды алайыҡ. Ул урындағы халыҡҡа файҙа килтерергә тейеш. Туристар нимәгә зарлана? Тәбиғәт ожмахтай, юлдар асфальтлы, бөтөн нәмә һәйбәт, тик юл эргәһендәге кафелар юҡ. Улар булһын өсөн өҫтән төшөрөлгән программа кәрәк. Ә ул программаның инвесторҙары ситтә. Улар глобаль иҡтисад уйынсылары, бер Башҡортостанда ғына эшләмәйҙәр. Ситтән килгәндәр шәберәк, үҙебеҙҙекеләргә ышаныс юҡ, килеп сыға. Был дөрөҫ булмаған фекерләү, урындағы кешене иҡтисадтан айырыу була. Иҡтисад айырым, кеше айырым - был нонсенс!

### Кәсеп һәм сауҙа

Эшҡыуарлыҡ мәҙәниәте юҡ беҙҙә. Мал үрсетә беләбеҙ, файҙаһын икенсе берәү ситтән ки-

✓ ***Тарҡаулыҡ булмаһа, ауылдарҙы ла, ерҙәрҙе лә һаҡлап алып ҡалырға була. Ниндәй матур урындарҙы ташлап китәләр, ә бит унда ҡасан булһа ла ситтән килеп ултырасаҡтар, аҙаҡ зыяратҡа ла индермәүҙәре ихтимал.***



# ХАЛЫҠТЫ...
## иҡтисадтан да айырмау кәрәк

леп күрә. Был бик насар ҙа түгелдәр, кешенең менталитетын һындырыу, бөгөү дөрөҫ нәмә түгел, уны хәҙерге иҡтисадҡа яраҡлаштырырға ғына кәрәк. Элек-электән башҡорттарҙа коллективизм, ғаилә принцибы үҫешкән булған, донъяны атаәсәһе, балалары бергәләп көткәндәр. Күршеләре, яҡын туғандары менән дә аралар йылы булған, бер-береһенә ярҙам иткәндәр, бер-береһенә терәк булғандар. Дөрөҫөн әйткәндә, иҡтисадтың төп нигеҙҙәрен ошо сифаттар нығыта, бер-береңә ышанған, терәк булған ерҙә генә иҡтисад үҫешә ала - был уның төп законы. Конкуренция беренсе урында түгел, ул - икенсел. Ә беҙ конкуренцияға баҫым яһайбыҙ. Ул аяуһыҙ, шундуҡ юҡҡа сығарып ташларға ла мөмкин. Хәлеңдән килмәне икән, һин - көсһөҙ! Улай булмай, һәр кешенең һәйбәт яҡ һыҙаты бар. Беҙҙең халыҡтың алыш-бирешкә оҫталығы юҡ, ә кәсепкә шәп, оҫта ҡуллылар бик күп: техниканы ла белә, ағас менән дә эш итә, теләгән әйберен эшләй ала. Ана, ағинәйҙәр нимә генә текмәйҙәр ҙә, нимәләр генә бешермәйҙәр. Бар ул беҙҙә талантлар, тик уларҙы күрергә, файҙалана белергә кәрәк. Сауҙагәрлек электән дә булмағандыр. Шуға ла бит ҡәрҙәш халыҡ менән дуҫлашып, туғанлашып бөткәнбеҙ, беҙҙекеләр кәсеп итә, улар сауҙагәрлеккә маһир.

### Үҙеңдеке - үҙеңә

Элек әҙерлек контораларының халыҡҡа файҙаһы ҙур булды: йомортҡа йыйҙылар, шешә алдылар, ит, тире, йөн һәм башҡаһын тапшырҙыҡ. Ул Хөкүмәт тарафынан ойошторолған үҙәкләштерелгән ҙур структура ине. Ул шәхси ҙә була ала, ләкин бының өсөн эшҡыуарҙар иң төүҙә файҙаһын күрергә тейеш, шунһыҙ булмай. Ошоға тиклем күп тауарҙарҙы сит илдәрҙән һатып алдылар, үҙебеҙҙекен эшкәртеп ыҙалағансы, ситтән алыу отошло тойолдо, етмәһә, ситтән килгәндең сифаты ла яҡшы булһа, шәп тәбаһа! Уларҙағы етештереү ғаилә бизнесына ҡоролған, бер нисә быуын тик шуның менән шөғөлләнгән. Хәҙер санкциялар ул тауарҙарҙың хаҡын арттырҙы. Ә ауыл халҡы малын да көтә, баҡсаһын да үҫтерә, һатыу итеү өсөн генә етештермәй, картуфының ҡалғанын яҙғыһын сығарып ташлау ҙа бер ни тормай уға, көҙгөһөн йәшелсәһен дә эшкәртеп бөтә алмай. Был традицион иҡтисад, үҙ-үҙеңде тәьмин итеп йәшәү. Берәй санкцияға, ауыр ситуацияға эләкһәк тә, еңел ҡотолабыҙ. Ҡайһы илдә шундай традицион иҡтисад юҡ, шундуҡ инфляция башлана, дефицит әйберҙәр күбәйә, хаҡтар арта, ҡыҫҡаһы, паника, хаос тыуа. Ә былай булды-булманы, бөтөн нәмә үҙеңдеке: итең, картуфың, йәшелсәң, майың-ҡаймағың. 90-сы йылдарҙа ана шул үҙ-үҙеңде тәьмин итеп йәшәү ярҙам итте, алты сутыйҙар ҡала халҡын ҡотҡарҙы.

### Брендтар

Ярай, башҡорт атын һаҡлап ҡала алғанбыҙ. Элек бит башҡорт тоҡомло эте лә булған. Шундай эт Венгрияла әле лә бар икән. Улар боронғо венгрҙар күсенеп йөрөгән ваҡыттан уҡ һаҡланып ҡалған. Ә беҙ ул этте бөтөргәнбеҙ ҙә, юҡ, тибеҙ. Ә нинә шул венгр этен үҙебеҙҙең ерлеккә алып килеп, боронғо башҡорт эте формаһында аяҡҡа баҫтырмаҫҡа. Һарыҡ йөнөнә оҡшаш йөнтәҫ эттәр улар, күҙҙәре лә күренмәй хатта. Йөнөнән йылы ойоҡбаштар бәйләргә була. Ҡартәсәйем, хәҙерге һарыҡтар элекке тоҡомдарҙың бәрәсе ише генә, тип һөйләй торғайны. Элек уларҙың артында көс еткеһеҙ көрҙөгө булған. Вәт улар исмаһам һарыҡ ине, тигәне иҫтә ҡалған. Ҙурайғас, шундай һарыҡтар тураһында ҡыҙыҡһындым. Баҡтиһәң, ҡаҙаҡтарҙа әле лә бар икән ундай тоҡом. Иҙелбай тип атала улар. Башҡорттарҙың көрҙөк һарыҡтарын яңынан барлыҡҡа килтерергә кәрәк ине, тигән хыялым булды. Уның өсөн селекцияны яҡшы белергә, йә селекционерға түләгәндәй капитал кәрәк. Примитив кимәлдә генә ҡаҙаҡтыҡын, тажиктыҡын (уларҙа - гисар, тиҙәр) алып, урындағыларҙы ҡушып, яңы тоҡом барлыҡҡа килтереп була. Эште яйға һалһаң, брендҡа әйләнә. Ҡаҙаҡтар ҡаҙының төрлө сорттарын етештереп, баҙарҙы баҫып алып баралар, нинә, беҙ шуны эшләй алмайбыҙмы ни? Тырышлыҡ кәрәк. Иҡтисадты, урындағы халыҡтың тормошон үҫтереү тик өҫтәге властың ғына эше, тип ҡарап, ҡасан шуны, ҡасан быны бирәләр, тип, көтөп ятһаҡ, әҙерге-бәҙер булмаҫ.

### Һин миңә указ түгел

Элек бит совхозда өй бирҙеләр, эш хаҡын түләнеләр, эшкә барып ҡайтаһың да, телевизор ҡарайһың. Еңелгә өйрәндек, үҙ-үҙебеҙҙе ҡайғыртмай башланыҡ. Хәҙер бар ул тырышып, маҡсаттар ҡуйып йәшәгәндәр, тик, минең уйымса, берҙәмлек етешмәй, күп эштәрҙе яңғыҙ атҡарып булмай, тарҡаулыҡ ҡамасаулай. Беҙҙең халыҡтың бер яғы бар: мәсәлән, әртист халҡын бөтәһе лә белә, ғалимдарҙы берәү ҙә белмәй. Ғалимдарҙы кешегә һанамайҙар хатта. Тәкдимдәремде әйтһәм, һин теоретик ҡына, тиҙәр. Мин профессор, фән менән шөғөлләнәм, студенттар уҡытам, донъямды ла һеҙгә ҡарағанда артығыраҡ күтәрҙем, тип тә ҡарайым. Һин тормошто белмәйһең, тип тә ебәрә яҡын туғандарым. Аҡыллыраҡ булып ҡыланма, һин миңә указ түгел, тигән һымаҡ яңғырай уларҙың һүҙҙәре. Ғилем кешеләрен, ғилми эштәрҙе һанға һуҡмау бар беҙҙә. Борондан киләме был сифат, белмәйем. Элек башҡорт ырыуҙары һәр береһе үҙ көсө менән йәшәй алған. Бындай сәйәси ҡоролоштоң бик һәйбәт яғы бар. Әгәр ҙә үҙәкләштерелгән, иерархик структуралы власть булһа, өҫтәгене алып ташлап, халыҡты буйһондорһаң, уның юҡҡа сығыуы ихтимал. Тарихты ҡараһаң, күпме халыҡ шул арҡала юҡҡа сыҡҡан, башҡорттарҙы иһә бындай ҡоролошо һаҡлап алып ҡалған. Ана шул замандан киләләр инде, һин миңә указ түгел, тигәне.



### Ейәндәр ҡайтырмы ауылға?

Иң мөһиме, ауылдағы ололар, һаулыҡ булһын, йәштәрҙең киләсәге яҡты булһын, кредиттарға батмаһын, банктарҙы байытыусы булмаһын, тип ҡайғыра. Әгәр үҙҙәре кредит алып, пенсияһынан түләп тора икән, аҡсаһын башҡаларҙы байытыуға тотона, тип аңларға кәрәк. Аптырағандың көнөнән, кисектергеһеҙ хәлдә генә ҡулланырға мөмкиндер ундай тырнаҡ эсендәге ярҙамды. Ауылды һаҡлау, артабан үҫтереү тураһында һәр ваҡыт ҡайғыртырға кәрәк. Йәштәр ҡайтмаһа, ауылдар бөтәсәк, пенсионерҙар ваҡытында тоғро хеҙмәт итеп, актив йәшәү осорон үткәргәндәр, әле лә бирешмәй матур йәшәйҙәр. Әлегә йәштәребеҙ ҡаланың ҡатлы йорттарынан төшөп, ерҙә йәшәй башланылар, хатта ҙур ҡалалар эргәһендә шәхси өйҙәр күбәйә. Бөгөн иң тәүҙә төпкөл райондарҙағы башҡорт ерҙәрен һаҡлап ҡалыу тураһында һүҙ йыш күтәрелергә тейеш. Ауылда тыуып-үҫеп, ҡалаға китеп йәшәгәндәрҙең балалары ҡайтырмы икән ауылға? Быны минең ейәндәрем каникул ваҡыттарында, йәйгеһен Сибайға килеп, беҙгә хужалыҡ буйынса ярҙам итәләр, картуф сәсепалышалар, мал да көтөшәләр. Бер ейәнебеҙ ике аҙна беҙҙә булып ҡайтып ингәс: "Ял ит, тип әйтәһегеҙ, унда ял юҡ, рабство унда", - ти икән. Әле мәктәптә лә уҡымай, ҡайҙан белә икән рабство һүҙен? Бер яҡтан - көлкө, әммә уйландыра ла.

### Аманатҡа хыянат

Хәҙерге интернет, IT-технологиялар заманында, бәлки, ҡалала йәшәйһеңдер, яратҡан эшең барҙыр, ғаиләң комфортта йәшәйҙәр, унда оҡшайҙыр. Ауылда ла шул уҡ мөмкинлектәр бар бит хәҙер. Әйтәйек, ауылдағы яҡының менән бергәләп ниндәйҙер эш башлайым тиһәң, Өфөнән ауылға күсеү мотлаҡ та түгел. Ауыл халҡы, ауылдан сыҡҡан кешеләр (улар араһында бик хәллеләр бар!) Фонд булдырып, тыуған ауылды нинә үҫтермәҫкә? Ошондай коммуникатив мөхит булһа, аралашыу бергәләп эш ойоштороу мөхитенә әйләнер ине. Хәҙер бит берләшеүҙең төрлө формалары бар. Замандың IT-технологияларын да ауылды һаҡлап алып ҡалыуға егергә була. Ғаилә кәсебе асып, шөғөл табып, берәү етештерә, ҡалала йәшәгәндәре һатыша. Шундай ғаиләләр бар бөгөнгө көндә, мәсәлән, ҡустыһы ауылда йылҡы тота, ҡымыҙ етештерә, ағаһы ҡалала шул ҡымыҙҙы һатыу яғын ҡайғырта. Шулай бергәләп эшләгәндә ауылды һаҡлап алып ҡалып була. Ауыл ерендәге кеше ҡул көсө менән эшләмәй хәҙер. Техника етештереүсәнлекте күтәрә, бер кеше хәҙерге заманда ун кешене алмаштыра ала. Ауыл ерендә лә етештереүсәнлеге көслө булған иҡтисади структура эшләргә була. Ә инде кооперация төҙөгәндә, етештереүсәнлек күпкә артасаҡ. Шулайтып йәшәргә тырышырға кәрәк. Ҡайһы бер бөткән ауылдарҙың зыяраттарын кәртәләйҙәр, ҡайһы бер бөткән ауылдарҙы яңынан тергеҙгән осраҡтар ҙа бар. Тарҡаулыҡ булмаһа, ауылдарҙы ла, ерҙәрҙе лә һаҡлап алып ҡалырға була. Ниндәй матур урындарҙы ташлап китәләр, ә бит унда ҡасан булһа ла ситтән килеп ултырасаҡтар, аҙаҡ зыяратҡа ла индермәүҙәре ихтимал. Хоҙай биргән ожмахҡа тиң урындар буш ятмаясаҡ, биргәндең файҙаһын күрмәһәк, аңламаһаҡ, ата-бабаларыбыҙ алдында ғәйепле булып сығабыҙ, ейәндәребеҙгә ҡалдыра алмаһаҡ, аманатҡа хыянат итәбеҙ.

### Онлайн ҡатнашайыҡ

Йәштәргә өмөтөм бар, миңә хәҙерге йәштәр оҡшай. Үҙебеҙ уҡытҡан йәштәр менән аралашыуҙан сығып әйтәм быны. Йәш туғандарым менән аралашҡанда ла һиҙәм, уларҙа берҙәмлек бар. Ҡасан да булһа аңлаясаҡтар, уларҙың тормошонда икенсе төрлө ҡиммәттәр барлыҡҡа киләсәк, сөнки уның өсөн нигеҙ бар. Улар байлыҡ, милек тип кенә йәшәмәй, тормошто кинерәк аңларға тырышалар. Дуҫлыҡ көслө йәштәр араһында, берҙәмлек һиҙелә. Иҫләйһегеҙҙер, Рәсәйҙең урта райондарында матур тәбиғәтле урындарҙа ауылдар бөткәйне, хәҙер шунда төрлө хәрәкәттәр ойошторып, ауылдарҙы тергеҙеү бара. Интернет аша ойошалар ҙа, тәбиғәттән айырылмайса, зыян килтермәй, ҡаланың дача формаһындағы ауылдар барлыҡҡа килә. Йәй буйы балалары, ейәндәре менән шунда йәшәйҙәр, өлкәндәре ҡышҡылыҡҡа ла тороп ҡала. Ниндәйҙер йәнләндереү, яңырыу бара. Ә беҙ бәләкәй ерҙәге бәләкәй халыҡ, еребеҙ бигерәк тә ҡәҙерле. Үҙебеҙ ҙә аҙ, еребеҙ ҙә аҙ! Сибайҙан Өфөгә дүрт сәғәттә барып була. Йәштәребеҙ, ана, араүыҡҡа ҡарамай, Салауат Юлаев командаһы артынан ҡалалар буйлап эйәреп йөрөйҙәр, бер кис өсөн араны ла, ваҡытты ла бар тип тә белмәйҙәр. Беҙгә хәҙер офлайн түгел, онлайн ҡатнашып йәшәргә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әҙеһәм Әғзәм улы менән һөйләшкәндә бер риүәйәт иҫкә төштө: "Мөхәммәт (с.ғ.с.) иртәнге намаҙға килгәнендә тәҙрәнән мәсет эсен күҙәтеп торған шайтан-мәлғүнде күргән. "Тағы кемде Хаҡ юлынан аҙаштырырға йөрөйһөң?" - тип һораған Бәйғәмбәр. Мәсет эсен ҡараһа, унда берәү намаҙ уҡый, икенсеһе йоҡлап ята икән. "Анау йоҡлап ятҡанын аҙҙырыр кәрәк ине, ғилеме күп. Был намаҙ уҡып торғанын аҙҙырһам, ғилемлеһе кире мәсеткә алып килә", - тигән шайтан-мәлғүн".**

**Эйе, ғалимдарыбыҙ барҙа халҡыбыҙ дөрөҫ юлдан тайпылмаҫ.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

***✓ Һәм ҡырҡа боролоп китеп тә барҙы. Ҡараһам, уның артынан бер тотам ҡалмай тыҡылдата баҫып кәзәһе лә китеп бара. Нишләп ваҡытында ул кәзәне мин күрмәнем икән, нишләп күрмәнем икән? Күрһәм, былай шаяртмаҫ инем.***

*КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!*

# БЫЙЫЛ ДА ӘРЕ КАРТУФ АШАП БУЛМАЙ ИНДЕ!



Яҙ башланып, картуф сәсер мәл еткәс, ошо хәлде иҫкә төшөрөп, көләмһерәп ҡуям. Сөнки һөйләй торған һүҙ тап ошо картуфҡа бәйле. Шуны ла әйтеп үтеп китергә кәрәктер. Беҙ йыл әйләнәһенә тигәндәй картуфты йә кәртүк, йә бәрәңге тип йөрөй-йөрөйбөҙ ҙә, шуны сәсер мәл етһә, нишләптер, картуфты сименә тибеҙ. Нишләптер орлоҡ тип әйтмәйбеҙ. Билдәле инде, сименә һүҙе беҙҙең һөйләшеү теленә урыҫтың семенаһынан килеп ингән. "Күрше, картуф баҡсаһының мөйөшөнә әҙ генә сименә етмәне лә ҡуйҙы, берәй биҙрә сименәң артып ҡалманымы", - тип йә беҙ күршегә, йә, киреһенсә, ул беҙгә инер инек заманында. Сименә артып ҡалһа, әлбиттә, уны тоттороп сығарабыҙ. Булмаһа, хәл юҡ инде, тип кире бормайбыҙ. "Арғы урамда йәшәгән фәлән-фәлән кеше, сименәм артып ҡалды, тип һөйләнеп торғайны, шуға бара һал", - тип ярҙам итергә ашҡынып торабыҙ. Ауылда борон-борондан кеше бер-береһенә шулай ярҙамсыл булды.

Сименә лә сименә, тип, мин һеҙҙе бушҡа "сименәләп" тормайым. Сөнки һөйләйәсәк хәл урыҫ теленә бәйле. Һәм шул уҡ ваҡытта Аллаһы Тәғәләнең һәр кемебеҙгә бүлеп биргән өс төрлө холҡона бәйле. Тәүгеләрен мин "йырыҡ ауыҙҙар" тип атар инем. Бына улар, Аллаға шөкөр, шаяртыуҙы аңлай. Ундайҙар менән күпкә рәхәт. Улар менән, исмаһам, бер туйғансы көлөшөп-шаярып алаһың. Ярай әле йырыҡ ауыҙҙар күп был донъяла, тип уйлап ҡуям мин ҡайһы саҡ. Икенсе төркөм - шартлы рәүештә "ҡымтым ирендәр". Бына былар шаяртыуҙы аңламай. Уларҙың, халыҡ әйтмешләй, кәзәһе эргәһендә генә тора. Һин шаярттың - уның кәзәһе төкөнө. Һәм вәссәләм. Был кеше үсегә лә ҡуя. Бындайҙар менән, әлбиттә, шаярып-көлөшөп булмай. Улар менән ауыҙҙы самалап-үлсәп кенә асырға тура килә. Шул уҡ ваҡытта Аллаһы Тәғәлә өсөнсө төр кешеләрҙе лә яратҡан. Шартлы рәүештә мин уларҙы "көлмәҫйәндәр" тип атап ҡуйҙым әле. Бына былары бик һирәк. Әммә улар бар. Ундайҙар һирәк-һаяҡ миңә лә осрап тора. Аптырарһың, көлмәҫйәндәр шаяртыуҙы бөтөнләйе менән аңламай. Эйе-эйе, бөтөнләйе менән аңламай. Һәр әйткән һүҙенде ысынға ала улар. Ниңә әйттем, ниңә шаярттым, тигән көнгә төшәһең ундайҙар менән. Күптәргә, моғайын, ундай "көлмәҫ-йылмаймаҫ" кешеләр менән осрашырға насип иткәндер. Бына ошо өс төр кешеләрҙе тулыһынса аңлау өсөн бер хәлде һөйләп үтәйем әле. Туҡта әле, нишләп сименә алып ҡайтып барған ауыр биҙрәне тотоп торам ул. Уны ергә ҡуйып тороп тәмләп тороп һөйләйем әле.

Урамда бер танышты осраттым. Күптән күргән юҡ ине уны. Йәтеш булды осрауы. Бер шаяртып-көлөп алайым әле үҙенән. Көлөргә сәбәбе лә бар - бик килешле генә яңы кейем кейеп алған! Былай кейеме буйтым килешә үҙенә. Әйткәндәй, элек беҙ яңы кейем кейгән кешене, кейемең ҡотло булһын, тип, нишләптер семтеп ала торғайныҡ. Нишләп улайтҡанбыҙҙыр инде, белмәйем. Былай бик ихлас ҡыуана торғайныҡ. Бына әле лә мин уны яңы кейеме менән ҡотлап бер булам. Әммә элекке һымаҡ семтеп ҡотламайым. Тел менән йыуам тегене.

- Һай-һай, буй-һыныңа ҡалай килешеп тора. Әйтерһең дә, һиңә тип кенә теккәндәр. Сосрап-мосрап торған урыны ла юҡ. Ялбырап-малбырап та торған ере күренмәй. Ситсамы? Ситса шул. Ситса икәне әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора. Төҫөн әйтсе әле, төҫөн... (Шулай тип телде шартлатып алам). Бигерәк матур, бигерәк килешә. Ҡара әле, ҡыҙыл төҫ (ысынында иһә кейем ҡара күк төҫтә) һинең ҡыҫыҡ-мыҫыҡ күҙҙәреңде бер аҙ асып ебәргән һымаҡ икән дәбаһа! (Бына быныһы бер аҙ артығырыҡ булды, буғай, әммә шаярыуҙы аңлаған кеше аңлап ҡабул итә уны). Кейем кешене йәшәртә лә ебәрә шул. Ағас күрке япраҡ, әҙәм күрке сепрәк, тип бушҡа әйтмәйҙәр шул. Бына һиңә кем алтмыш йәш бирһен инде, кем бирһен... (Ә уға ни бары ҡырҡ ҡына йәш!) Был кейемдә һине хатта танымай ҙа торҙом әле. Кем килә икән салыш-солош баҫып киң урамды тар итеп, тип аптырап торҙом әле бер килке. Бик матур булған кейемең, бик матур... Йылы тәнеңдә кейеп туҙҙырырға насип итһен. Иҫкерҙе йә бысранды тип ташлап ҡуйма, хаҡына ҡарамай үҙем алырмын...

Минең ошолай "маҡтап-ҡыуанып" торғандың бушҡа түгеллеген һиҙә танышым. Ауыҙ сите менән генә көләмһерәп торһа ла уның башында төрлө уйҙар ҡайнай. Ҡайһы яҡтан һәм нисек төрттөрөр икән был, тип уйлай ул. Әйткәндәй, һеҙ ҙә был турала уйлап ултыраһығыҙҙыр әле. Һәм ул мәл килеп етә. Мин уға эйеләә төшәм һәм үтенесле тауыш менән төп һорауҙы бирәм.

- Бындай матур кейемдең ирҙәр кейә торғаны буламы икән?

Бер килке тын алмай торабыҙ ҙа... рәхәтләнеп көлөп ебәрәбеҙ. Минең шаяртыуҙы аңлаған таныш бер аҙға тынып тора ла ҡыуанысл тауыш менән ҡысҡыра биреп яуап бирә.

- Була!

Һәм беҙ тағы рәхәтләнеп көлөп ебәрәбеҙ.

- Әммә һатыуға бик һирәк сығарыла!

Тағы бер килке көлөшөп алабыҙ.

Шул арала ул миңә төрттөрөп алырға ла онотмай.

- Мин алғанда ҡатын-ҡыҙҙар күп түгел ине. Хәҙер барһаң, өлгөрәһең.

Ошолай көлөшә-көлөшә бер аҙ торғас, һәр кем үҙ юлын дауам итә. Бына шулай күңелле ул шаяртыуҙы аңлаған кеше менән. Уға ла күңелле, миңә лә күңелле, тигәндәй. Аҙаҡ һөйләгән кешегә лә күңелле. Бына, моғайын, әлеге мәлдә һеҙгә лә күңеллелер. Әллә күңелле түгелме? Күңелле лә инде!

Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, икенсе төр кешеләренә бигүк күңелле түгел икән шул. Ундайҙар менән хәл бөтөнләй икенсе. Бына ошондай ҡымтым ирендәрҙең береһе миңә ошолай "шаяртыуҙан" һуң оҙаҡ текләп торҙо ла үпкәсел тауыш менән әйтеп ҡуйҙы.

- Кемдән-кемдән, ә бына һинән көтмәгәйнем бындай мыҫҡылды!

Һәм ҡырҡа боролоп китеп тә барҙы. Ҡараһам, уның артынан бер тотам ҡалмай тыҡылдата баҫып кәзәһе лә китеп бара. Нишләп ваҡытында ул кәзәне мин күрмәнем икән, нишләп күрмәнем икән? Күрһәм, былай шаяртмаҫ инем. Әммә хәҙер эш үткән, әйтер һүҙ әйтелгән. Уның артынан мин бер аҙ, шаярттым бит шаярттым, тип мыңғырлап барған булдым. Әммә ул минең был һүҙҙәремә ҡолаҡ та һалып торманы. Ҡулдарын һелтәй-һелтәй урам буйлап тыҡылдата баҫып китеп тә барҙы. Шул кәрәк миңә, тип ҡулды ҡулға ышҡып-ыуаланып тороп ҡалдым мин. Бына хәҙер миңә лә күңелһеҙ, уға ла күңелһеҙ, тигәндәй. Ә шулай ҙа кемгәлер күңелле, буғай. Ана бит, гәзит уҡыусылыр араһынан кемдер көлөп ултыра! Әллә минең ҡолаҡҡа ғына ишетелде микән уның көлөүе?

Ә бына өсөнсө төр кешеләр менән эш күпкә ҡатмарлы. Көлмәҫйәндәр, алдан әйткәнемсә, шаяртыуҙы бөтөнләйе менән аңламай. Улар әйткән һәр һүҙеңдең барыһын да ысынға ала ла ҡуя. Бына әлеге шаяртыу менән мин тап шундайҙарҙың береһенә эләктем. Алдан матур итеп "маҡтаным-маҡтаным"да аҙаҡ "Бындай матур кейемдең ирҙәр кейә торғаны буламы икән?" тип әйтеп бөтөр-бөтмәҫтән көлөп тә ебәрҙем. Иҫ китмәле, мин көләм, ә миңә ҡушылып көлөүсе юҡ. Аптырамалы хәл, ошондай һын ҡатҡыс көлдөрөүгә лә көлмәҫ кеше булыр икән был донъяла. Юҡ, көлмәй бит теге көлмәҫйән. Ҡая таш һымаҡ упайып ҡарап тик тора. Аптырағас, мин көлөүҙән туҡтайым да ни эшләргә белмәй тамаҡты ҡырып ҡуям. Әйткәндәй, ә һеҙ нимәгә көләгеҙ ул? Көлмәгеҙ әле. Көлөрбөҙ әле аҙаҡ. Бына шулай. Беҙҙең дөйөм көлөү туҡтағас, теге көлмәҫйән ошолай тей.

- Был кейем ирҙәрҙеке.

Ә йөҙө үҙенең шундай тыныс. Аптырамалы инде.

- Шулаймы ней? (Был һүҙҙәр ирекһеҙҙән үҙҙәренән үҙҙәре килеп сыға).

Бына һиңә мә! Был кейем ирҙәрҙеке икән дәбаһа! Мине тағы көлкө баҫа. Һеҙҙе лә баҫамы? Баҫа шул! Шулай ҙа көлмәҫкә тырышыр кәрәк. Сөнки көлмәҫйәндең күҙҙәре миңә шундай аяныс ҡараш менән ҡарай. Йәнәһе лә, мин ирҙәр кейемен ҡатын-ҡыҙҙар кейеменән айыра алмай торам! Шуға ул мине йәлләй. Берәү әйтмешләй, ғибрәт инде.

- Бына этикеткаһына ҡара әле. Унда мужской тип яҙылған.

- Шулаймы ней?

Мин аптырап-албырғанып торған арала ул кейемен сисә (йыбанмауын әйтсе әле) һәм ундағы яҙыуҙы миңә күрһәтә. Күрһәтмәһә лә була инде. Ирҙәр кейеменә, мужской, тип яҙыла инде. Ә мин һаман шаяртыуымды дауам итәм. Дөрөҫөрәге, дауам итергә маташам.

- Яңылыш яҙғандарҙыр әле.

Әммә минең был шаяртыу бушлыҡҡа оса. Сөнки уның дәлил көслө.

- Ҡатын-ҡыҙҙар кейеменең тегелеше бөтөнләй башҡа була.

- Шулаймы ни? (Минең шулай тип әйтеүҙән башҡа һүҙем дә юҡ шул).

Һәм мине тағы көлкө баҫа. Ә ул, иҫ китмәле, тып-тыныс тауыш менән миңә ҡатын-ҡыҙҙарҙың кейеме тегелеше нескәлектәрен аңлата башлай. Бына был ере былай була, теге ере тегеләй була, ә бына был урыны, киреһенсә, бөтөнләй булмай һәм башҡаһы. Исмаһам, бер йылмайһасы! Иҫ китмәле инде.

- Һәм был кейемдең төҫө ҡара күк!

- Шулаймы ней? (Тағы нимә тип әйтәһең инде).

- Һәм миңә алтмыш йәш түгел!

- Шулаймы ней? (Бына ошо урында һеҙ нимә тип әйтер инегеҙ икән).

- Һәм мин салыш-солош түгел, ә тура атлап йөрөйөм!

- Шулаймы ней! (Мин "салыш-солош"то әле әйттем, әле оноттом).

Көлмәҫйән миңә ихлас аңлата. Ә мине көлкө баҫа. Ҡысҡырып көлһәң, уңайһыҙ. Шуға тегеләй итеп ҡарайым, былай итеп ҡарайым. Тамаҡты ҡырып ҡарайым. Сәсте һыйпаған булам. Танау осон бер килке тызып ҡарайым. Юҡ, көлкө килә инде. Көлмәҫйән миңә бер килке тынһыҙ текләп тора һәм тәрән итеп көрһөнөп ҡуя. Шунан уң ҡулын минең яурынға һала.

- Һиңә оҙаҡҡа һуҙмай ошо арала ғына күҙ табибына күренер кәрәк!

- Шулаймы ней?

- Әйләнгән һайын, шулаймы ней, тип тороуың да борсоуға һала мине.

- Шулаймы ней?

Көлмәҫйән тамам аптырай төшә. Хәҙер уның бар уйы - мине нисек тә ҡотҡарыу. Сөнки мин ауырыйым. Мине ваҡытында дауалау кәрәк.

- Миңә осрауың хәйерле булды әле. Ауырыуың көсәймәҫ борон һиңә мотлаҡ табипҡа күренер кәрәк.

Эйе шул, шулай шул, тип ыңғайына һыпырып торорға була бит инде. Юҡ инде, көлкө килә лә китә. Ул арала көлмәҫйән миңә ҡарап уфтанып ҡуя.

- Күҙең йүнләп күрмәй, хәтерең насарайған, килделе-милделе хәбәр һөйләйһең, буш-барға ихахай ҙа михахай! Хатта минең нисә йәштә икәнде лә онотҡанһың бит.

Һәм миңә ҡарап күңелһеҙ һығымта яһап ҡуя.

- Көлөүең төптән дөмбөрләп килә, әйтерһең дә, һин үҙең түгел, ә эстән кемдер көлә. Хәйерлегә генә булһа ярар ине! Минең бер танышым вафат булыр алдынан өс көн алдан тап һинең һымаҡ ошолай дөмбөрләтеп көлөп йөрөгәйне. Урыны йәннәттә булһын инде.

Ә һеҙ нишләп көләһегеҙ? Бына хәҙер минең бер ҙә көлкө килмәй. Бар уй - тиҙерәк бының эргәһенән тайыу. Аптыраған өйрәк ҡойроғо менән һыуға сума, тейҙәр бит әле. Бына был осраҡта өйрәк күпкә бәхетле. Ул нисек етте, шулай сумып ҡотолор ине. Башы менәнме, ҡойроғо менәнме, ҡабырғаһы менәнме, арҡаһы менәнме, быныһы артыҡ мөһим түгел. Сумды - вәссәләм. Әгәр өйрәк булһам, ошо урында, билләһи, күҙҙе йомоп батыр ҙа китер инем! Әммә мин өйрәк түгел шул. Шуға юҡбар һылтауҙы бар итеп, саҡ тайҙым теге көлмәҫйән эргәһенән. Ҡабат уның менән шаяртып һөйләшәһе булһамсы!

Бына ошолай өс төр кешеләр була был донъяла. Ярай, ҡайтайым әле. Оҙаҡлап кителде. Баҡса мөйөшөнә әҙ генә сименә

етмәгәйне. Шуны сәсеп ҡуя һалыр кәрәк. Әй, әттәгенәһе, сименә лә сименә тип һүҙ башлағайным. Ә уға бәйле хәлде һөйләргә онотоп торам бит әле. Эш шунда, беҙҙең ауылда ошондай бер көлмәҫйән йәшәй. Баҡтиһәң, уның йыл һайын картуфы уңмай икән. Ә, бәлки, уңалыр ҙа. Бәлки, ул үҙе генә шулай мыжып йөрөйҙөр. Кем белә инде уныһын. Бер көн урамда осраны ла миңә лә зарланып китте әле ул.

- Күршенең картуфы йыл һайын уңа, ә минеке йыл һайын уңмай. Ул уңышын тоҡлап ташый. Ә мин биҙрәләп кенә ташып бөтәм. Шуныһы аптырата. Ул нимә эшләй, мин дә шул уҡ эште эшләйем бит әле. Ул ерен һөрҙөрһә, мин дә шул уҡ көндә һөрҙөрә һалып ҡуям. Ул сәсә башланы, миндә сәсә һалып ҡуям. Ул утай башланы, мин дә утай һалам. Һәм башҡаһы.

Ә мин тот та уға ошолай кәңәш бир.

- Һинең күршең урыҫ бит.

- Эйе, урыҫ.

- Шуға һин картуф сәскән-утаған мәлдә урыҫса һөйләшеп ҡара!

Мин әйттем дә оноттом. Ә көлмәҫйән... тап шулай эшләгән! Әйткәндәй, бындай тәҡдимдән ҡатыны ҡырҡа баш тартҡан. Бергә нисәмә йыл йәшәп, уның холҡон белеп бөткән инде ул. Көлмәҫйән дә ныҡ торған. Улай булғас, тип әйткән ул, картуф эшенә тығылмайһың. Ҡатыны шатланып риза булған. Көлмәҫйән бәләкәй балаларына ҡарап торған да, былары әле ней башҡортса, ней урыҫса белмәй, йөрөмәһендәр аяҡ араһында буталып, тип уларын да картуф эшенә йәлеп итмәҫкә ҡарар иткән. Урыҫса апаруҡ һупалаған, әле өсөнсө синыфты тамамлау өҫтөндә булған өлкән улы менән урыҫса һөйләшеп кенә мул уңыш алырға ҡарар иткән былар. Күпмелер ваҡыт үткәндән һуң урамда осраттым мин уны. Бер аҙ һөйләшеп торғандан һуң көлмәҫйән әйтеп ҡуйҙы.

- Быйыл да эре картуф ашап булмай инде!

Мин бер килке аптырап торҙом. Сөнки был мәлгә теге биргән "кәңәште" бөтөнләйе менән онотоп өлгөргәйнем инде. Яҙа-йоҙа ғына хәтергә төшә биреп ҡуя былай. Шул арала көлмәҫйән һүҙен дауам итә.

- Малай ғына эште боҙҙо.

Нисек малайы эште боҙҙо икән? Минең быға баш етмәй.

- Мин малайға "Принеси два ведра сименә" тигәйнем. Ә ул: "Хәҙер, атай", - тип йүгереп китте лә барҙы (һәм ул... ауыр көрһөнөп ҡуйыр тиһәм, юҡ, рәхәтләнеп йылмайып ултыра). Бына быйыл да картуф уңмай инде!

Иҫ китмәле, көлмәҫйән "Картуф уңмай" тигәнде зарланып түгел, ә йылмайып әйтәсе!

- Ә шулай ҙа улым башҡортсалап: "Хәҙер, атай",- тигәне күңелгә рәхәтлек бирҙе бит! Элек белмәгәнмен, үҙ телеңдә һөйләшеп йөрөүе бигерәк рәхәт икән. Ә картуф булыр әле. Биргәненә шөкөр итә белергә кәрәк...

Бик дөрөҫ һығымта яһаны бит был көлмәҫйән, тип уйлап ҡуйҙым мин.

**Әғләм ШӘРИПОВ тыңлап торҙо.**

РУХИӘТЕБЕҘ

# ҠАЛАЙ КИЛЕШЛЕ БЫЛ ТАҠЫЯ!



**Халыҡтар берҙәмлеге көнө алдынан Өфөлә "Таҡыя" 1-се Халыҡ-ара балалар милли кейеме оҫталары конкурсына йомғаҡ яһалып, еңеүселәр билдәләнде. Өс турҙан торған конкурста "Балалар традицион кейеме коллекцияһы" авторы, Салауат районы Комсомол ауылында йәшәүсе оҫта Гөлдәр Шәбиева еңеү яуланы.**

Милли кейемдә сағылған традицион ҡиммәттәрҙе һаҡлау, популярлаштырыу, этник элементтарҙы заманса кейемдәргә интеграциялау һәм милләт-ара бәйләнештәрҙе нығытыу маҡсатында уҙғарылған конкурс Педагог һәм остаз йылына арналды. Беренсе тапҡыр ғына ойошторолған булыуына ҡарамаҫтан, "Таҡыя" халыҡ-ара кимәлгә сығып, Рәсәй төбәктәренән һәм яҡын сит илдән 70-тән ашыу оҫтаны үҙенә йәлеп итте. Ижади ҡараш, халыҡ тарихына булған иғтибар, оҙайлы эҙләнеүҙәр, милли кейемдең тәбиғилеген һаҡлау менән бер рәттән, уны заманға яраҡлаштырыу оҫталығы - быларҙың барыһы ла финалға сыҡҡан 44 ҡатнашыусының эштәрендә сағылыш тапты.

Милли костюм һәм уның менән бәйле булған һәр аксессуар - халыҡтың тарихын сағылдырған, милли үҙаңын һаҡлаған, мәҙәни үҙенсәлеген күрһәткән уникаль күренеш. Милли кейемдең һәр биҙәге, элементтары ниндәйҙер символик мәғәнәгә эйә. Шуға күрә уларҙың быуындан-быуынға тапшырылып килеүе мөһимлеге менән бер рәттән, милли кейемдәрҙең алдағы йылдарға төп нөсхәһендә, үҙгәртелмәйенсә барып етеүе лә шарт. Конкурста "Балалар кейеме - реконструкция" һәм "Милли балалар костюмы аксессуарҙар реконструкцияһы" номинацияһында ҡатнашыусылар жюри һәм тамашасылар иғтибарына ғаиләләрендә һаҡланған шәхси фотоһүрәттәр, крайҙы өйрәнеү материалдары һәм музей экспонаттарын ҡуллланып ижад иткән коллекциялар тәҡдим итте. Мәҫәлән, конкурс еңеүсеһе Гөлдәр Шәбиева белдереүенсә, үҙенең коллекцияһындағы балалар баш кейемен ул Михаил Антонович Круковскийҙың "Мосабайҙан башҡорт ҡатын-ҡыҙы балалар менән" исемле фотоһүрәтенән ҡарап эшләгән. Фотоһүрәт әлеге мәлдә Рәсәй Фәндәр академияһының Бөйөк Петр исемендәге антропология һәм этнография музейында һаҡлана. Ә күлдәк өлгөһөн Екатеринбург тыуған яҡты өйрәнеү музейында һаҡланған уникаль башҡорт милли кейеме коллекцияһынан алған. Нәҡ ошо рәүешле, йәғни электән килгән бесеү элементтары традицияларына, биҙәү ысулдарына ҙур иғтибар бүлеп, тәбиғи материалдар ҡулланып тегелгән милли костюмдар бөгөнгө мәлдә генә түгел, ә киләсәктә лә йәшәүен дауам итәсәк, йәмғиәттә үҙенең лайыҡлы урынын тотоп торасаҡ.

"Балалар кейеме - реконструкция" һәм "Милли балалар костюмы аксессуарҙар реконструкцияһы" номинацияларына тәҡдим ителгән эштәр, ысынлап та, һоҡланыуға лайыҡ, сөнки улар үткән менән киләсәкте тоташтырыусы күпер, милләттең булмышын сағылдырыусы сығанаҡ, быуаттар төпкөлөнән саф килеш беҙҙең көндәргә килеп еткән тарих ролен үтәй. Шулай уҡ конкурс оҫталарының үҙ тамырҙарына иғтибарлы һәм яуаплы ҡарауҙарын, тарихи өлгөләргә һаҡ ҡағылыуҙарын да билдәләп үтергә кәрәктер. Ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөнгө көндә ҡайһы берәүҙәр сәхнәләштерелгән, хатта төрлө халыҡтың милли биҙәктәрен берләштереп тегелгән милли кейемде үткән замандарҙан килеп еткән кейем өлгөһө итеп күрһәтергә тырыша. Шуға күрә "Таҡыя" конкурсының һәм унда ҡатнашыусылар әҙерләп, киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарған эштәрҙең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

"Милли музейҙың уникаль ҡомартҡыларының фондтарҙа ғына һаҡланып, күргәҙмәләрҙә генә күрһәтелеп ҡалмайынса, урамға, кеше араһына "сығыуы"н күреү беҙгә, музей хеҙмәткәрҙәренә, айырыуса ҙур шатлыҡ өҫтәй", - тине Башҡортостан Милли музейының күргәҙмәләр ойоштороу бүлеге мөдире Элвира Хәмиҙуллина. Ысынлап та, музейҙарҙың тарихты һаҡлаусы мәҙәни үҙәк кенә түгел, ә тарихи йәһәттән дөрөҫ мәғлүмәт биреүсе сығанаҡ ролендә булыуын да онотмаҫҡа кәрәк.

Кейемдәрҙә милли элементтарҙы ҡулланыуҙы һуңғы йылдарҙың популяр тенденциялары рәтенә ҡуйырға мөмкин. "Таҡыя" конкурсының "Балалар костюмының автор интерпретацияһы" номинацияһында финалға сығып, еңеүгә дәғүә итеүселәрҙең заманса кейемдәрҙе һәм традицион милли элементтарҙы, аксессуарҙарҙы ҡулланыуҙың алтын урталығын табыуы һөйөндөрә. Этнобиҙәк, ысынлап та, йәшәйешебеҙгә ныҡлы үтеп инде, быны беҙ республикала милли биҙәкле кейемдәргә өҫтөнлөк биреүселәрҙең артыуынан, милли биҙәүестәр тағыусыларҙың күбәйеүенән асыҡ күрәбеҙ. Конкурсҡа тәҡдим ителгән эштәр араһында ла нәзәкәтле, юғары стилле, матур эштәр күп булды. Балаларҙың һәм үсмерҙәрҙең күңелдәренә үтеп инерлек, уларҙың һорауҙарына тап килерлек, ҡыҙыҡтырырлыҡ, башҡаларҙан айырылып торған милли биҙәкле кейем - уларға үҙ халҡының булмышын аңларға, уның менән бер бөтөн икәнлеген төшөнөргә булышлыҡ итеүсе сараларҙың береһе ул. Шуға күрә был өлкәлә эшләгән оҫталарҙы күреп, күтәрмәләп, рухи һәм матди ярҙам күрһәтеп тороу мотлаҡ. "Таҡыя" кеүек конкурстар ошондай ярҙамдың бер төрө лә инде.

**Гөлназ МАНАПОВА.**



# "АШҠАҘАР МОҢДАРЫ"

**Халҡыбыҙҙың изге аманаты йыр булып быуаттарҙан-быуаттарға яңғырай, һәм ул артабан да өҙөлмәйенсә, быуындан-быуынға, дәүерҙән-дәүергә тапшырыла. Ошо бөйөк ҡомартҡыны замандаштарына еткерер, уларҙың рухын үҫтерер ғәйрәт эйәләре була. Ана шундай сағыу талант эйәһе Абдулла Солтанов яҡты донъяны күреүҙән мәхрүм булып та, күңелендәге нуры, йөрәк түренән урғылған моңо менән тирә-йүнде, кешеләрҙең юлын яҡтыртып йәшәне. Рухы менән көслө йыр солтаны үҙе беҙҙең менән булмаһа ла, ошо рухты һаҡлаусылар, килер быуындарға еткереүселәр бар һәм буласаҡ.**

Уларҙың аҙ ғынаһы Абдулла Солтановтың 95 йәшенә арнап, 2023 йыл башында иғлан ителгән "Ашҡаҙар моңдары" бәйгеһендә сығыш яһаны. Быйыл унда ҡатнашыу өсөн Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 100-гә яҡын кеше ғариза биргәйне. "Тере тауыш" менән йырлау турында 30 ҡатнашыусы үтте. Абруйлы баһалама ағзаларына - республиканың билдәле шәхестәре Юлай Ғәйнетдинов, Тәнзилә Үҙәнбаева, Нәфисә Тулыбаева, Миләүшә Иҙрисоваларға шулай ҙа "иң-иң"дәрен һайлап алыу еңел булмағандыр. "Ашҡаҙар моңдары" икенсе тапҡыр үткәрелә, тимәк, ниндәйҙер кимәлдә сағыштырыу мөмкинлеге лә бар: быйыл башҡарыусылар араһында 30-40 йәшлек йыраусылар күберәк булды.

30 октябрҙә икенсе турҙы уңышлы үткән 22 башҡарыусы М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә сығыш яһаны. "Быйылғы сараны ла үҙенсәлекле итеп әҙерләргә тырыштыҡ. Ҙур тиҙлектәр дәүерендә донъя артынан ҡыуабыҙ, ҡайҙалыр йүгерәбеҙ, һәр саҡ ашығабыҙ. Бер-беребеҙгә йылы һүҙ әйтергә ваҡыт тапмайбыҙ. Был йәһәттән Абдулла ағайҙың тормошо һәр кемебеҙгә һабаҡ булырлыҡ. Яҡты донъяны күреүҙән мәхрүм булһа ла, күңелендәге нуры, йөрәк түренән урғылған моңо тирә-йүнде, кешеләрҙе йылытырға етте. Ошо фекерҙе тамашасыларыбыҙға еткереү өсөн сәхнә биҙәлешен дә, ут менән эшләүҙең төрлө ысулдарын да ҡулландыҡ. Үткән йыл бик күптәр "Башҡорт халыҡ йырҙарының тарихын да белергә ине", тигән теләк еткергәйне. Шуға ла быйыл иғтибар үҙәгендә мәңгелек йырҙарыбыҙ тарихы булды", - ти проект етәксеһе, "Ашҡаҙар" радиоһының баш мөхәррире Гәүһәр Батталова.

...Бына сәхнәгә бер-бер артлы халыҡтан сыҡҡан йырсылар күтәрелә. Һәр йыр оло тарих, һәр йыр халыҡ яҙмышын аса, гүйә, халыҡтың зары ла, оло өмөтө лә ошо моңға һалынғандай тойола. Залға йыйылған тамашасы ошо моң тулҡынында тирбәлеп, сәхнә, йыраусы менән бер бөтөнлөктө хасил итте һәм сығыштар тамам булыуы иғлан ителгәс кенә үҙ ысынбарлығына ҡайтып, сығыштарға баһа бирелеүен көттө. Жюри ағзалары бик оҙаҡ кәңәшләшкәндән һуң, I урынды Ейәнсура районынан Динислам Юлдыбаев менән Баймаҡтан Фәнүр Аралбаевҡа, II урынды Ейәнсуранан Вафа Мәүлетов менән Шишмәнән Айгөл Ғәзиеваға, III урынды Иглиндән Фәһим Тоҡомбәтов менән Өфөнән Юнир Һағынбаевҡа бирҙе. Шулай уҡ "Башҡорт халыҡ йыр традицияларын һаҡлаусылар" номинацияһында Ырымбур өлкәһенән Флүзә Хәлитова, Силәбе өлкәһенән Харрас Фәйзуллин менән Винер Ҡәҙербаев, Хәйбулла районынан ҡәйнәле-киленле Тәнзилә һәм Нәзифә Ҡыҙрасовалар еңеүсе тип билдәләнде. "Һирәк яңғыраған башҡорт халыҡ йырын башҡарыусылар" араһында Йылайырҙан Сәкинә Юлгилдина, Өфөнән Гөлсинә Йәрмөхәтова, Мәләүездән Райхана Хафизова еңеп сыҡты. "Өмөт" призына Стәрлебаш районынан Зөфәр Атанғолов лайыҡ булды. "Иң йәш башҡарыусы" номинацияһында Мәләүездән Роза Кинйәбаева, "Тыңлаусылар һөйөүен яулаған йырсы" тип Ейәнсуранан Рәфис Ишмөхәмәтов танылды.

Абдулла Солтановтың рухы халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусыларҙан ризалыр. Сөнки изге ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлаусылар һәм пропагандалаусылар бар. Был ҙур көс, һәм ул халыҡ йырҙары аша заманыбыҙҙы балҡыта, замандаштарыбыҙға йәшәү мәғәнәһен нығыраҡ төшөндөрә ала. Абдулла Солтанов һәр саҡ белде: рух яҡтылығы булғанда донъяны бер ҡасан да һөрөм ҡапламай. Күҙҙәре көн яҡтыһын күрмәгәндә лә Абдулла Солтанов рухы менән дөрләне, рухы менән балҡыны. Ошо осҡон бөгөн һәр беребеҙҙең күңелендә тоҡанды. "Ашҡаҙар моңдары" иһә үҙенең изге башланғысын дауам итәсәк. Икенсе йыл ошо ваҡыттарҙа әлеге маһирҙар менән бер рәттән, халыҡ йырҙарын башҡарыусы яңы исемдәрҙе лә ишетерһегеҙ.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА.**

✓ *Был сирҙән һаҡланыуҙың берҙән-бер юлы - ул вакцинация. Тәүге вакцина 12 айҙа эшләнә. Әгәр ҙә әсәй кешенең ҡыҙылсанан прививкаһы булһа, унан күскән иммунитет сабыйҙы 3 айға тиклем һаҡлай.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙОҠО - ДАУА

■ Табип һәм телетапшырыуҙар алып барыусы Александр Мясников насар йоҡлауҙың онкологияға килтереүе ихтималлығы тураһында белдерҙе. Йоҡоһо туймағандарҙың ҡанында "насар" холестерин кимәле лә юғарыраҡ була икән. "Йоҡо гормоны - мелатонин бүленеүендәге тайпылыштар матдәләр алышыныуына насар йоғонто яһай һәм хатта онкология башланыуында ла уның "гәйебе" бар тиҙәр", - тип билдәләне табип. Шулай уҡ йәйге ваҡыттан ҡышҡы ваҡытҡа күсеү ҙә организм өсөн зыянлы, ул да яман шеш үсешенең бер факторы булып тора.

■ Һалҡын тейҙереп ауырыуға, иммунитетты күтәреүгә бәйле имеш-мимештәр күп кенә. Мәҫәлән, барыбыҙ ҙа лимон ауырыуҙан һаҡлай тип уйлайбыҙ. Әммә был дөрөҫ түгел, лимондағы С витамины миҡдары шул тиклем аҙ, бының өсөн көнөнә 200 лимон ашарға тура килер ине. Билдәле табип Елена Малышева белдереүенсә, лимонды витаминға бай булғаны өсөн түгел, ә үҙенсәлекле тәме өсөн яратабыҙ. Шулай уҡ йылы ойоҡтар кейеп йөрөү ҙә һалҡын тейҙереп ауырыуҙан һаҡламай. "Ауырыуҙы вирустар һәм бактериялар булдыра, тын юлдарына вирус эләккән икән, йөн ойоҡ та ҡотҡара алмаясаҡ", ти табип. Шулай уҡ медицина күҙлегенән ҡайнатылған һөт эсеү ҙә дөрөҫ түгел. Ул вирустарға ҡаршы көрәшә алмай, әммә бына уларҙың тағы ла күбәйеүенә булышлыҡ итә ала. Һөт ауыҙ ҡыуышлығында микробтар өсөн ҡулайлы шарттар тыуҙыра.

■ Коронавирус инфекцияһының иң хәүефле эҙемтәһе - инсульт, тип иҫкәртә иммунолог, медицина фәндәре кандидаты Николай Крючков. Кем COVID-19 менән оҙаҡ ауырыған (лонгковид), уларҙа йөрәккан тамырҙары үсеше - инсульт, инфаркт h.б. булыуы ихтимал. Табип әйтеүенсә, бындай кешеләр күп һәм бөгөнгө көндә был ярайһы ҙур проблема булып тора. Шул уҡ ваҡытта, коронавирустың ниндәй оҙайлы эҙемтәләре булыуы әлегә яҡшылап өйрәнелмәгән һәм асыҡланмаған да, ти Крючков: "Һүҙ - уның балалар һәм үҫмерҙәргә ҡурҡыныс тураһында. Нервы системаһына йоғонтоһо бар, быныһын эш практикаһында үҙебеҙ күҙәтәбеҙ". Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә был вирус менән 22,9 миллион кеше ауырыған. Һуңғы аҙнала 72 төбәктә сир тағы күбәйгән, 51 төбәктә госпитализациялау осраҡтары артҡан.

■ Тәм-том кешелә шәкәр диабеты үсешенә туранан-тура йоғонто яһамай, тип белдерә табип-гастроэнтеролог Татьяна Селиверстова. Татлы ризыҡ һимереүгә килтерә, ә уныйҙарҙа йыш ҡына шәкәр диабеты башлана, шуға ла беҙ тәм-том ашаһаң, ошо сиргә килтерә, тип уйлайбыҙ. "Диабет менән татлы ризыҡтың бәйле булыуы - уйҙырма. Йәмғиәттә киң таралған 2-се типтағы диабет - ул һимеҙҙәр ауырыуы", ти Селиверстова. Даими рәүештә күп итеп татлы ашау зыянлы, организм килеп торған глюкоза күләмен эшкәртеп өлгөрмәй һәм май йыйыла башлай. Шулай уҡ кәнфит-печеньелар һыҡтылар сығыуға сәбәп була алмай, әммә дисбактериоз үсешенә булышлыҡ итә. Ә ул иһә һыҡтыларҙың төп сәбәбе лә инде. Шуға ла кәнфитте барыбер ҙә сиклә яҡшыраҡ булып сыға. Ашаһағыҙ ҙа, уны көндәҙгә 3-кә тиклем ашағыҙ. Шул саҡта ғына ул билде ҡалынайтмаясаҡ. Татлы бәлештәрҙә лә сикләү яҡшыраҡ, ул ҡанда холестерин кимәлен арттыра.

*ТАБИП МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

**Ҡыҙылса менән ауырыған баланы ҡыҙыл әйбергә төрөп, ҡыҙыл әтәстең ҡанын маңлайына һөртөп, ҡыҙыл ризыҡ ашатып дауалау миҫалдарын нәфис әҙәбиәттә күп кенә осратабыҙ. Халыҡтың боронғо ышаныстарынан килгән, ҡыҙылса эйәһе, ҡыҙылса инәһенә табынып эшләнгән был йола медицинаһы үҙ заманында, бәлки, ғүмерҙәрҙе лә аяп ҡалғандыр, кем белә инде. Әммә вакцина уйлап табылып, үлемесле был сирҙе еңдек тигәндә лә һуңғы йылдарҙа ҡыҙылса осраҡтары теркәлеп тороуы ябай ғына кешенең аңына һыйырлыҡ нәмә түгел. Ошо хаҡта юғары категориялы педиатр, Өфө ҡалаһы 47-се балалар поликлиникаһының 1-се педиатрия бүлеге мөдире, БР-ҙың атҡаҙанған табибы Эльза Тимербай ҡыҙы АҠСУЛПАНОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# ҠЫҘЫЛСА ЙОҠТОРМАҒЫҘ!

➔ **Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла ҡыҙылса сире арта тигәнде йыш ишетәбеҙ. Был ысынбарлыҡҡа тап килә икән, уның сәбәбе нимәлә?**

- Һуңғы ваҡытта, ысынлап та, ҡыҙылса менән ауырыусылар күберәк теркәлә. Был бөтөн донъяла шулай. Беренсенән, хәҙерге атай-әсәйҙәр араһында балаһын вакцинациялауҙан баш тартыусылар күп. Ни өсөн бындай ҡарарға килеүҙәрен аңлата ла алмай улар. Вакцинанан һуң бала ауырыған, йәки ул кире эҙемтәгә килтергән тип интернетта уҡығайныҡ, ти ҡайһы берәүҙәр, дуҫтарыбыҙ шулай тип һөйләгәйне, тигәнерәк тә аҡланыу табалар.

Икенсе сәбәп - халыҡтың миграцияһы. Беҙгә күрше дәүләттәрҙән күпләп халыҡ күсеп килә. Уларҙа медицина насар үсешкән тип әйтеп булмай, киреһенсә, шул уҡ Үзбәкстанда, Тажикстанда ҡыҙылсаға ҡаршы вакцина яһатыуға дәүләт ныҡ иғтибарлы ҡарай. Әммә былтыр республикала теркәлгән бер осраҡта тап мигранттың ғаиләһе ауырыны һәм уларға прививка яһалмағайны. Ҡыҙылса менән балалар ғына ауырымай, ул өлкәндәр өсөн дә ҡурҡыныс сир. Миҫал итеп килтерелгән осраҡта ла өлкән кеше ауырыны. Әммә 5 йәшкә тиклем балалар хәүеф төркөмөндә, уларҙың иммунитеты нығынып етмәүе арҡаһында, сирҙе ауырыраҡ кисереүҙәре мөмкин. Шулай уҡ ҡыҙылса сирен таратыуға сигандар ҙа үҙ өлөшөн индерә.

➔ **Интернеттың бөгөн кеше фекерен формалаштырыуҙа роле, ысынлап та, ҙур. Тик уның бер үҙенсәлеге бар - ниндәй яуап алырға теләйһең, ул шуны бирә. Вакцина зыянлымы тигән һорауға яуап эҙләүсегә ул бихисап миҫал килтерәсәк...**

- Интернет күп эштә ярҙамсы, әммә вакцина яһатырғамы, юҡмы тигән һорауға ул яуап бирә алмай. Киреһенсә, ул башты бутай ғына. Унда кемдәр яҙышып ултырғанын, уларҙың яҙмышын, уйын-ниәтен һеҙ ҡайҙан беләһегеҙ? Табиптарға бирегеҙ һорауҙарығыҙҙы, шиктәрегеҙҙе улар таратһын, дәлилдәр, миҫалдар килтерһен. Был йәһәттән поликлиникалар - участка педиатрҙары, шәфҡәт туташы патронажы ҙур эш алып бара.

Был сирҙән һаҡланыуҙың берҙәнбер юлы - ул вакцинация. Тәүге вакцина 12 айҙа эшләнә. Әгәр ҙә әсәй кешенең ҡыҙылсанан прививкаһы бар йәки ул ҡасандыр уның менән ауырыған икән, унан күскән иммунитет сабыйҙы 3 айға тиклем һаҡлай. Икенсе вакцина 6 йәштә эшләнә. Һис шикһеҙ, һәр атаәсә балаһын ярата, тик уға яҡшылыҡ теләп, зыян килтереп ҡуйыуы ихтимал. Шуға ла аҡыл менән эш итһәгеҙ ине, тигән теләктәмен.

Шулай уҡ хәҙерге йәштәр йылы илдәрҙә ял итергә ярата. Йәше тулмаған бала менән сығып китергә лә күп уйлап тормайҙар. Әгәр ҙә балаға ҡыҙылсанан вакцина яһалмаған икән, өйҙә ултырыуы күпкә ышаныслыраҡ. Ауырыу осраҡтары бөтөн донъяла теркәлә бөгөн, аэропортта, самолетта кемдәр менән осрашырығыҙҙы белмәйһегеҙ бит.

➔ **Сирҙең төп билдәләре ниндәй? Һәм ни өсөн ул кешенең сәләмәтлеге һәм ғүмере өсөн үтә ҡурҡыныс сир иҫәпләнә?**

- Сирҙе ауырыу кеше тарата. Алдан әйтеүемсә, ҡыҙылса менән балалар ғына ауырый тигән ҡараш формалашҡан, был дөрөҫ түгел. Өлкәндәр ҙә ауырый, улар ҙа ауырыу тарата. Һауа-тамсы юлы менән күсә һәм бик тиҙ таралa. Шулай уҡ вирус осоусан. Мәҫәлән, ниндәйҙер йортта бер кеше ҡыҙылса менән ауырыған, тигән мәғлүмәт була икән, медицина хеҙмәткәрҙәре тотош йорттағы балаларҙы һәм ололарҙы тикшерергә, вакцина яһарға, 21 көн буйына көндәлек күҙәтеү аҫтына алырға тейеш. 1-се подъездағы ауырыуҙың 7-се подъезда йәшәгән минә ни зыяны бар, тиһәгеҙ, тағы яңылышаһығыҙ. Вирус лифт, вентиляция шахтаһы аша һауа ағымы менән осоп таралыу һәләтенә эйә. Шулай уҡ вакцинацияғыҙ юҡ икән, ауырыу эргәһенән үтеп кенә киткәндән дә сирләй алаһығыҙ, йәғни уны йоҡтороу өсөн мотлаҡ бергә ултырырға, аралашырға кәрәкмәй.

Сирҙе йоҡторған кеше быны белмәҫкә лә, үҙе сир сығанағы булып йөрөргә мөмкин. Инкубацион осоро 21 көн, шунһың аҙаҡҡы көндәрендә үк һәм сабыртма сыға башлағандың 4-се көнөнә тиклем ул башҡалар өсөн хәүефле. Педиатр булараҡ, балаларҙа ауырыу нисек башланыуын әйтәйем. Ҡыҙылса ябай вирусы сирҙәр кеүек башлана: температура күтәрелә, ҡоро йүткереү барлыҡҡа килә, бала маңҡалай, күҙенән йәш аға. Һуңғараҡ сабыртма сыға. Ул этаплы булыуы менән айырылып тора: башта йөҙҙә, артабан муйында, тәндә һәм иң аҙаҡтан аяҡтарҙа була. 6-7-се көнгә кәмей һәм урынында пигменттар ҡала. Ауырып бөтөүгә, ғәҙәттә, 2-се аҙна аҙағына был пигмент таптар ҙа юҡҡа сыға. Сирлелә ғүмерлеккә ҡыҙылсаға ҡаршы иммунитет формалаша.

Әммә ҡыҙылсаның ауыр формала үтеүе лә бар, бына ошонһонан ҡурҡырға кәрәк тә. Уға бактериаль инфекция ҡушылыуы, ларингит, бронхит, пневмония, отит, энтероколит, менингит, энцефалит, кисҡен энцефаломиелит h.б. булыуы бар. Һәр осраҡта табипҡа иртә мөрәжәғәт итеү яҡшы. Был осраҡта поликлиникаға үҙегеҙгә килергә ярамай, табипты өйгә саҡырағыҙ. Был ҡыҙылсаны йоҡтороусылар һаны күп булмаһын өсөн кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һаҡланғандың һағы ятыр, тигән халыҡ аҡылын ҡыҙылсаға ҡарата ла әйтеп булыр ине. Әлбиттә, бер кемде лә көсләп прививка яһатып булмай, әммә был ҡарар ныҡлы уйланылған булһын. Эльза Тимербай ҡыҙының: "Бала сәләмәтлеге һәм ғүмере менән уйнауҙың ниндәй эҙемтәләргә килтереүен был сирҙе күрмәгән кеше генә аңламай",- тиеүендә лә хаҡлыҡ бар. Атай-әсәйҙәребеҙ, үҙебеҙ ҡыҙылсанан вакцина яһатҡан кешеләр булараҡ, был ауырыуҙы, шөкөр, күргәнебеҙ юҡ. Күрергә лә яҙмаһын. Балаларыбыҙ ҙа күрмәһен. Тик бының өсөн һәр кемебеҙ уйлап эш итергә тейеш.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ ЙОЛАЛАРҘЫ...

## ғилем итеп өйрәнһен



**М. Акмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында "Башҡорт шәле һәм студент йәштәр: йолаларҙы тергеҙеп" тип аталған төбәк конкурс-фестивале үтте. Мәҙәниәт, сәнғәт һәм креатив (ижади) индустрия өлкәһендәге проекттарҙы тормошҡа ашырыусы Рәсәй Федерацияһы Президентының мәҙәни инициативалар гранты конкурсында еңеүсе булған был үҙенсәлекле сараны уҡыу йортоноң Башҡорт фольклоры фәнни-тикшеренеү үҙәге һәм башҡорт филологияһы факультетының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы уҡытыусылары уйлап сығарған.**

Башҡорт халыҡ кәсептәренә, уларҙы яңынан тергеҙеүгә, башҡаларға өйрәтеүгә арналған саралар республикала йыш үтә. Райондарҙа ағинәйҙәр хәрәкәте лә был йәһәттән күп эш башҡара, БР Мәҙәниәт министрлығы, Рес-

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

# ҠАН ХӘТЕРЕ ТАРТАЛЫР...

**"Башҡортостан ирекмәндәре Махсус хәрби операция зонаһына генетик кимәлдәге ынтылыш менән бара. Был күренеш уларға Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары һалған патриотлыҡ менән бәйле", - Башҡортостандың дәүләт именлеге органдары ветерандары төбәк йәмәғәт ойошмаһы советы ағзаһы подполковник Рөстәм Нәзметдинов ошондай фекерҙәре менән уртаҡлашты. Дәүләт именлеге ветераны республика халҡы батырлыҡ күрһәткән Афғанстанда, Төньяҡ Кавказда хеҙмәт итә, шуға күрә ул Донбасста Ватанды яҡларға киткән ир-егеттәрҙе яҡшы аңлай.**



"Башҡорт халҡының илһөйәрлегенә олатай-өләсәйҙәребеҙ нигеҙ һалған. Улар бик ауыр юл үткән һәм Тыуған илгә янаған хәүефтең нимә икәнен белә. Минеңсә, уларҙың хистәре беҙгә генетик кимәлдә тапшырылған, - ти Рөстәм Нәзметдинов. - Илде һаҡлау мәсьәләһе килеп тыуғанда Башҡортостан бер ҡасан да ситтә ҡалманы. Беҙҙең халыҡ Рәсәйҙә иң батырҙарҙың береһе икәнен, уның өсөн ғаилә, яҡташтар, Ватан, тыуған ер элек-электән бик мөһим булғанын уҡығайным. Рәсәйҙә бер генә халыҡ та тыуған ерен һаҡлап, шул тиклем күп ҡан ҡоймай. 1812 йылда, 1941-1945 йылдарҙа ла яҡташтарыбыҙ хәрби рухын күрһәтә. Хәҙер уларҙың тоҡомдары Махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итә".

Яугир юлын һайлаған кеше мотлаҡ экстремаль шарттарға әҙерәсәк, тип билдәләй Рөстәм Нәзметдинов. Илдең оборона ведомстволары менән контрактҡа ҡул ҡуйғанға тиклем төҙөүсе, уҡытыусы, табип, менеджер булып эшләгән ир, ҡулына автомат алғас, психологик көсөргәнеш кисереүе аңлашыла. Был осраҡта быуындар бәйләнеше мөһим, сөнки бер сафта йәш яугир ҙа, тормош тәжрибәһе булған 50 йәшлек, хатта унан өлкән яугир ҙа булыуы сер түгел. "Төрлө быуын береһенә тулыландыра ала. Күп яугирҙың ҡыҙыу нөктәлә хеҙмәт итеү тәжрибәһе бар. Һис шикһеҙ, улар иптәштәрен күп нәмәгә өйрәтә ала. Бер йылдан ашыу алғы һыҙыкта хеҙмәт иткән ир-егеттәр ҙә яңы ҡушылғандарға күп нәмә тураһында һөйләй ала. Дөйөм алғанда, улар барыһы ла бер-береһе менән аралашырға тейеш. Бындай бәйләнеш уңыш нигеҙе булып тора. Яңы мөхиттә яңы хәрбиҙәргә мөмкин тиклем күберәк тыңларға, ҡарарға һәм белергә кәрәк. Сөнки үҙеңдең, иптәштәреңдең ғүмере, отрядтың көсө шуға бәйле", - ти Рөстәм Нәзметдинов.

Хеҙмәткә китергә ниәтләгән ир-егет был ҡарарҙы ныҡлы уйлап ҡабул итергә, уның өсөн көслө мотивация булырға тейеш, ти Рөстәм Нәзметдинов. Уның билдәләүенсә, алғы һыҙыҡта икеләнеүсән һәм өҫтөнлөктәрҙе дөрөҫ билдәләмәгәндәр ғазап сигә. Түләүҙәр - яҡшы, әммә иң мөһиме - Тыуған илгә һөйөү. "Мин икеләнгән кешеләр менән нимә булғанын күрҙем. Шул уҡ ваҡытта үҙ-үҙенә артыҡ ышанған кешеләрҙе лә хәүеф көтә. Хәрби хеҙмәткәргә хәрби хәрәкәттәр шарттарында тотороҡло һәм тыныс ҡалыу мөһим. Отрядта үҙ урыныңды, башҡарырға тейешле эшеңде белергә һәм командирҙарҙы тыңларға кәрәк. Беҙҙең егеттәрҙең яҡшы икәнлегенә беләм. Контракт менән хеҙмәт итергә барырға теләүселәр булыуы Башҡортостан халҡының енеү һәм балаларының тыныс тормошо хаҡына батырлығы һәм тәүәккәллеге хаҡында тағы бер тапҡыр һөйләй", - тип өҫтәне Рөстәм Нәзметдинов.

Башҡортостанда контракт буйынса хәрби хеҙмәткә саҡырыу дауам итә. Мобиль пункттар республиканың бөтә ҡала һәм райондарында эшләй. Унда йыйыу тәртибе, льготалар һәм түләүҙәр тураһында консультация күрһәтелә, ниндәй документтар кәрәклеге аңлатыла. Килешеүҙе пенсияға сыҡҡан запастағы хәрбиҙәр һәм армияла хеҙмәт итеп ҡайтыусылар, шулай уҡ юғары йәки урта һөнәри белемле армияла булмаған ир-егеттәр төҙөй ала. Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә рядовойҙан прапорщикка тиклем 65 йәшкә тиклемге ир-егеттәр ҡабул ителә. Контракт төҙөү мәсьәләһе буйынса республика халҡы Берҙәм белешмә номеры - 177, Ситуацион үҙәккә - 122 йәки (347) 218-19-19, күп функциялы үҙәккә "Минең документтарым" офисына мөрәжәғәт итә ала. Шулай уҡ һорауҙарға яуапты башбат.рф сайтында, Телеграмдағы чат-боттарҙа табырға мөмкин.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

---

публика халыҡ ижады йорто ла йыл һайын ҙур фестивалдәр ойоштороп тора. Башҡорт шәлен популярлаштырыу тураһында һөйләгәндә "Урал" халыҡ сәнғәте галереяһын (хәҙер ул этноүҙәк тип атала) асылған көнөнән үҙе хаҡлы ялға сыҡҡансы етәкләгән Кәримә Шәрип ҡыҙы Кайдалованы телгә алмайынса мөмкин түгел. Республикала ул башлап ебәргән "Башҡорт шәле" фестивале бөгөн дә ойоштоРола, йыл да оҫталар баш ҡалаға йыйылып, бәйгелә ҡатнаша.

"Башҡорт шәле һәм студент йәштәр: йолаларҙы тергеҙеп" төбәк конкурс-фестиваленең тәғәйенләнеше башҡараҡ - ул йәштәргә йүнәлтелгән. Юғары уҡыу йорто студенттары һәм оҫталар араһында бәйләнеш булдырыу әле беренсе генә тәжрибә. "Ағиҙел" башҡорт художестволы кәсептәр берекмәһе генераль директоры Гүзәл Кәримова әйтеүенсә, был проекттың төп маҡсаты - башҡорт шәле брендын фәнни яҡтан тикшереү. "Киләсәктә студенттарҙың башҡорт шәле буйынса курс эштәре, дипломдар, диссертациялар яҙыуын теләр инем. Үҙебеҙ ошо шәлдәрҙе күреп, бәйләп, ябынып үҫкәс, быныҡ кәрәклеге хаҡында уйламайбыҙ ҙа. Әйтәйек, беҙҙең берекмә төрлө илдәрҙә үткән сараларҙа ла ҡатнаша. Унда теге йәки был милли кәсеп тураһында сығыш та яһарға тура килә. Сикле ваҡыт эсендә үҙемә уны фәнни яҡтан өйрәнеп, бар мәғлүмәтте бергә тупларға тура килә. Ошо йәштәр кәсептәребеҙҙе донъя кимәлендә фәнни яҡтан күрһәтһен ине", - ти Гүзәл Миҙхәт ҡыҙы.

Унан һуң, эшмәкәрлеге нигеҙендә милли кәсептәребеҙ ятҡан был берекмә оҫталарға өйҙәрендә генә ултырып эшләү мөмкинлеген кире тергеҙеү мәсьәләһен дә тормошҡа ашырырға ниәтләй. Совет осоронда берекмәнең балаҫ һуғыусы оҫталарының эш урыны үҙ өйөндә булған, берекмә уларға заказ ебәреп торған. "Ағиҙел"дең тарихында бейәләй бәйләүселәр ҙә бар, улар экспортҡа йылына 4 мең пар бейәләй бәйләгән. Башҡорт шәле буйынса ла ошо йүнәлеште булдырып була, тигән фекерҙә Гүзәл Кәримова. Тимәк, ошо проект артабанғы үҫешкә лә башланғыс булып тора.

Сараны күтәрмәләп, Хәйбулла һәм Ейәнсура райондарынан килеп еткән оҫталар һәм уларҙың күҙ нуры түгел бәйләгән, һуҡҡан шәлдәре был байрамды тағы ла йәмләне. Хәйер, шәл генә түгел, иҫ киткес зауыҡлы дебет бейәләйҙәр, бирсәткәләр, жилеттәр ҙа алып килгәйне улар. Сауҙа ла ҡыҙыу ғына барҙы. Хәйбулла мәҙәниәт йортоноң халыҡ ижады буйынса методисы Миңзифа Ишемғолова әйтеүенсә, "Вәзәм шәле" тигән бренд булдырған хәйбуллалар хәҙер дебет балаҫтар ҙа һуға башлаған. Йәштәргә оҫталыҡ дәрестәрен дә ошо апайҙар ойошторҙо, дебет һуғырға, иләргә, шәл сите бәйләргә өйрәтте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡтың көн күргән шөғөлдәренең береһе инде ул - шәл бәйләү. Әле лә ул башҡорт ҡатын-ҡыҙының ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итеүҙең, балаларына белем биреүҙең бер мөмкинлеге булып тора. Ырымбур баҙарҙарында һатылып, шул арҡылы "Ырымбур дебет шәле" булып тарихҡа инеп киткән шәлдең ғилми йәһәттән өйрәнер яҡтары бихисап. Йәштәр ошоно ҡәләм осона эләктереп, ҡағыҙға төшөрөр, тигән ниәттә ҡалайыҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Ғайса бәйғәмбәр ҙә миллионер булған

Моғайын, күптәрегеҙ, бай кешегә Ожмахҡа инеүе дөйәгә энә күҙенән үтеүгә ҡарағанда ла ауырыраҡ, тигәнде ишеткәне барҙыр. Аҡсаның һеҙҙе туранан-тура Тамуҡҡа илткән яуызлыҡ икәнлеген раҫлаған икенсе дәлил табып буламы? Хәҙер был турала минең фекеремде тыңлағыҙ: минеңсә, тамуҡ - ул дүрт бала менән ҡыҫынҡы фатирҙа йәшәү, иртәнән-кискә тиклем ике эштә арығансы тир түгеү һәм һәр саҡ кредиттар буйынса түләй алмаҫмын, тип ҡурҡыу. Бына был ысын Тамуҡ!

Изге китаптарҙа яҙылғанса, бай булыу - ҡәнәғәт булыу ул. Әгәр һеҙ булғанына шөкөр итһәгеҙ, башҡа теләр нәмәгеҙ юҡ. Был иһә пассивлыҡҡа, йүнһеҙлеккә, күңел төшөнкөлөгөнә килтерә.

Тимәк, ярлы булыу - ул күберәкте теләү, үҫешергә теләү. Тормошоғоҙҙа күберәк тәжрибә, күберәк мажара, күберәк азатлыҡ, күберәк мөхәббәт, күберәк ижад, күберәк иркенлек теләү. Әгәр һәр ваҡыт аҡса тураһында уйлаһағыҙ - уларҙы әрләһәгеҙ, улар менән идара итһәгеҙ, уларҙы һаҡлаһағыҙ, аҡсаһы күп булған кешенән көнләшһәгеҙ - ул һеҙҙең Аллағыҙ булып ҡалыр. Әгәр уйығыҙҙа һәр саҡ аҡса икән, тимәк, ул һеҙҙең хужағыҙ, ә һеҙ уның ҡоло.

Әгәр аҡсаны маҡсат итеп түгел, ә файҙаланыу сараһы итеп ҡараһағыҙ, ул һеҙҙең менән идара итеү көсөн юғалта. Был йәһәттән Ғайса бәйғәмбәрҙе миллионер булған тип әйтергә мөмкин. Үҙе теләгәнсә эшләгән, теләгән урынына бара алған кешене башҡаса тағы нисек атарға мөмкин? Ошо үҙе байлыҡ түгелме ни?

## Һеҙ аҡсаға ниндәй мөнәсәбәттә?

Бөгөн мин өйгә эш бирергә ниәтләйем, сөнки уңыш рецебы һеҙгә кәрәк. Ә уның сере ябай: һорағыҙ - алырһығыҙ... Шуға күрә аҡса тураһында нимә уйлауығыҙҙы ентекле яҙыуығыҙҙы һорайым: ул һеҙҙә ниндәй хистәр тыуҙыра; байлыҡ тураһында нимә уйлайһығыҙ; аҡса менән идара итеү, уларҙы контролләү кәрәк; аҡса бөтөүе мөмкин тип уйлайһығыҙмы; үҙегеҙҙе бай булырға хаҡлы тип уйлайһығыҙмы; әгәр лотереяла отоп, исем-шәрифегеҙҙе һәм фотоғыҙҙы гәзиттәрҙең беренсе битендә күрһәгеҙ, ҡәнәғәт булыр инегеҙме; ҡиммәтле машинағыҙ булһа, ҡәнәғәтлек кисерерһегеҙме һәм аҡсағыҙ булғаны өсөн уңайһыҙлыҡ тоймаҫһығыҙмы; һеҙ һәр саҡ финанс ҡыйынлыҡтарына осрауҙан ҡурҡаһығыҙмы; ресторанға барғанда йәки отпускыға киткәндә һәр саҡ бер ни тиклем аҡса ҡалдыраһығыҙмы?

Оялмағыҙ, аҡса "ен"дәрегеҙҙе ирекккә сығарығыҙ һәм яуаптарҙы ентекле итеп яҙығыҙ. Тап улар һеҙҙә финанс хәүефе тыуҙыра һәм аҡса мәсьәләһендә һығылмалы булырға ирек бирмәй. Нимә уйлайһығыҙ - барыһын да яҙығыҙ! Был - иң мөһим күнекмәләрҙең береһе. Беләһегеҙме, миллионерҙар нимә ти: "Үҙегеҙгә иң яҡшыны алығыҙ һәм башҡа нәмә тураһында онотоғоҙ".

**Пьер МОРАНСИ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 10 НОЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ФӘН КӨНӨ



**Бөтә донъя тыныслыҡ һәм үҫеш өсөн фән көнө йәмғиәткә фәндең файҙаһын аңлатыу, шулай уҡ фәнни-техник ҡаҙаныштарҙы кешелек цивилизацияһы тыныслығы һәм үҫеше өсөн ҡулланыу зарурлығын халыҡ-ара берләшмәнең хәтеренә төшөрөп тороу маҡсатында билдәләнә.**

Был иҫтәлекле датаны 1999 йылда Будапештта үткәрелгән конференцияла тәҡдим итәләр, ә 2001 йылда ЮНЕСКО уны рәсмиләштерә һәм 2002 йылдан алып билдәләнә башлай. Уның сиктәрендә ғилми учреждениеларҙа асыҡ ишектәр көндәре, төрлө мәсьәләләр буйынса ҡорҙар, уҡыу йорттарында, музейҙарҙа махсус саралар уҙғарыла.

Рәсәйҙә бөгөнгө көндә фән үҫешенә юғары иғтибар бирелә. Рәсәйҙең 2035 йылға тиклемге фәнни-технологик үҫеше стратегияһы 2016 йылда ҡабул ителә һәм милли сәйәсәттең яңы моделе булып иҫәпләнә. Уның ете өҫтөнлөклө маҡсаты бар: цифралы технологиялар нигеҙендә етештереү, экологик яҡтан таҙа энергетика, персоналләштерелгән медицина, ныҡлы ауыл хужалығы, милли хәүефһеҙлек, транспорт һәм телекоммуникация инфраструктураһы, киләсәккә әҙерлек. Рәсәй ғалимдары Менделеев таблицаһын яңынан-яңы химик элементтар менән тулыландыра, Антарктидала Көнсығыш тип аталған күл барлығын асыҡлай, Алтайҙа боронғо кешеләрҙең өсөнсө төрөн - денисовсыларҙы таба, мең йыллыҡ математик гипотезаларҙы раҫлай, йыһанды өйрәнә, коронавирус кеүек ауырыуҙарҙан вакциналар эшләй. Башҡортостанда ла ғилми берләшмәләр әүҙем эшләй, үткән XX быуатта һалынған ныҡлы нигеҙ үҫешен дауам итә.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**42-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Минин. Гимнаст. Ҡомаҡ. Папка. Илһам. Третьяк. Гөжләү. Емтек. Балсыҡ. Мөсәл. Ата. Селән. Вәли. Аҡса. Ҙур. Йән. Күбә. Титаник. Мәкер. Мәскәү. Ләпәкәй.

**Вертикаль буйынса:** Гермоген. Пожарский. Әмәл. Ант. Грек. Ирәмәл. Ат. Мамыҡ. Алама. Үксә. Мстиславский. Үкһеү. Нотоҡ. Ай. Ике. Сиҙәм. Мәке. Елкә. Мәк. Нөгәр.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 ноябрь "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 12+

**11 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 ноябрь "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 16+

**10 ноябрь "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+

**"Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. 12+

**12 ноябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00 0+

**"Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 18.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**6 ноябрь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

**12 ноябрь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**6 ноябрь "Асъя кыа"** Коми Республикаһының В. Морозов исемендәге йыр һәм бейеү ансамбле концерты. 6+

**8 ноябрь "На златом крыльце сидели"** ҡомло фантазия. 6+

**10-11 ноябрь "Осенний Jam"** халыҡ-ара джаз фестивале. 6+

**11 ноябрь "В ожидании чуда".** 11.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**7 ноябрь Премьера! "Ярлыҡау"** (М. Кәрим), баллада. 13.00, 19.00 12+

**10 ноябрь "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов), шиғри драма. 12+

**11 ноябрь "1+1=3, или математика судьбы"** (Б. Ҡаһарманова). 13.00 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**10 ноябрь "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**9 ноябрь "Вернулся я, спустя сто лет..."** Р. Ғамзатов иҫтәлегенә концерт. 6+

**11 ноябрь Премьера! "Әсәй, бына һинә килен...дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 18.00 12+

**12 ноябрь "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), музыкаль әкиәт. 12.00 0+

**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ЙӘШ ӘСӘГӘ...

Дәүләт Думаһына ауырлы һәм декрет ялындағы ҡатын-ҡыҙҙар өсөн кредит каникулдары тураһында закон проекты индерелде. Башланғыс авторҙары - "Яңы кешеләр" фракцияһы вәкилдәре. Закон проектында заемсыға - йөклөлөгө 12 аҙнанан ашыуыраҡ булған, шулай уҡ ике йәшкәсә балаһы менән декрет ялында ултырған ҡатын-ҡыҙға кредит каникулы менән файҙаланыу хоҡуғын бирергә тәҡдим ителә. Йәш әсә һәм уның тормош иптәше кредиторға кредит килешеүе шарттарын үҙгәртеүҙе һорап мөрәжәғәт итергә мөмкин. Түләүҙәрҙе ваҡытлыса туҡтатып торорға йәки уларҙың күләмен кәметергә була. "Йөклөлөк осоронда һәм бала тыуғандан һуң медицина сығымдарына, балалар тауарҙары һатып алыуға һәм бала ҡарауға бәйле өҫтәмә финанс бурыстары барлыҡҡа килә. Кредит каникулдары ғаиләгә финанс яғынан ауырлыҡтарҙы еңелерәк үткәрергә һәм заемсыларға үҙе, балаһы тураһында хәстәрлек күрергә мөмкинлек бирер ине", - тиелә закон проектында.

✓ *Был әҫәр һуғыш тураһында түгел, ә тормоштоң фажиғәле минуттарында һайлау ауырлығы алдында ҡалыу тураһында. Был спектаклдә уйнау бик ауыр. Рәхмәт, Илсур Юлай улына, ул Мостайҙың ни әйтергә теләгәнен аңлаған.*



АФАРИН!

# БЕР ҠЫЙЫҠ АҪТЫНДА



**Сибайҙар - байҙар! Ысынлап та шулай, мәғдәндән бигерәк, йыр-моңға, дәртле бейеүҙәргә бай улар. Был байлыҡты һаҡлауҙа, киләсәк быуынға тапшырыуҙа Сибай концерт-театр берекмәһенең өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Берекмәнең ижад буйынса урынбаҫары Азат Арыҫлан улы НӘБИУЛЛИН менән ошо турала һөйләштек:**

- Быйыл Сибай концерт-театр берекмәһенә, халыҡ телендә йөрөтөлгәнсә, филармонияға 30 йыл! Ябай кешегә утыҙ йәш артыҡ һиҙелмәйҙер ҙә, әммә коллектив өсөн өс тиҫтә ваҡыт арауығы ҙур ваҡиға. Был уның барлығы, һаҡланыуы, үҫеше тураһында һөйләй. Юбилей концертынан һуң мәҙәниәт министры Әминә Ивний ҡыҙы, сибайҙар үҙ традицияларын күҙ ҡараһылай һаҡлай, тине. Ысынлап та, Урал арьяғының йөҙәк ҡашы булып, башҡорт халҡының йолаларын ҡәҙерләп, тергеҙеп йәшәүебеҙ менән ғорурланабыҙ, ошо урында йәшәүебеҙ, ижад итеүебеҙ эшебеҙгә оло яуаплылыҡ өҫтәй. Шул уҡ ваҡытта донъянан артта ҡалмай, тамашасылар зауығын ҡәнәғәтләндергәндәй программалар әҙерләргә тырышабыҙ. Юбилейға арналған Ҙур концертты ла режиссер Сулпан Асҡарова заман һулышына тура килтереп ҡуйҙы. Беҙ халыҡ ижадынан ситләшмәйбеҙ, бары яңы алымдар ғына ҡулланабыҙ. Байрам тамашаһында берекмәнең бөтөн ижади коллективы ҡатнашты. Концертты "Сулпан"дар башланы. Театрлаштырылған пролог өлөшө тамашаны байытты, заманса технологиялар ҡулланыу концертты күн талабы кимәленә күтәрҙе. Шулай итеп күмәкләп, ҙур унышҡа өлгәштек.

Берекмә коллективына килгәндә, ҙур үҙгәрештәр булды. Был ғәҙәти күренеш, үҙгәртеү ҡыйын түгел, сифат яғы яҡшырыуы мөһим, ойошмала нығынған яҡшы йолаларҙы һаҡлап ҡалыу тағы ла ҡатмарлыраҡ, сөнки һәр нығынған йола коллективтың тарихы ғына түгел, ул үҫеш нигеҙе. Нигеҙ ныҡ булмайынса, өй ҙә ныҡ булмай бит. Раушан Ниәҙғолов, мин, Рәзилә Нәбиуллина һәм тегеү цехынан Рәшиҙә Бәҙри ҡыҙы Ҡудашевалар филармония асылғандан алып эшләйбеҙ, ҡалған состав яңырып тора. Йырсыларҙан Йәмил Ғайсин ҡушылды, сәнғәт колледжының студенты булыуға ҡарамаҫтан, концертта лайыҡлы сығыш яһаны. Ғөмүмән, беҙҙең кадрҙар сәнғәт колледжын бөтөүселәрҙән туплана: вокалистар, музыканттар, балет артистары шунан килә. Әле был уҡыу йортонон 8 студенты беҙҙә эшләй.

"Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле (Сибай концерт-театр берекмәһенән) янында эшләүсе "Ынйыҡай" балалар студияһы тураһында айырып әйтергә кәрәк. Эльвира Вәкил ҡыҙы Аҡназарова асҡан ансамблдә әлеге көндә Рәзилә Әнүәр ҡыҙы Нәбиуллина етәкләй. Студияны тамамлаусылар, ғәҙәттә, сәнғәт колледжына уҡырға инәләр, "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбленең репертуарын яҡшы белгәс, аҙаҡ концерт-театр берекмәһендә эшләйҙәр - күсәгилешлек шулай һаҡлана. "Сулпан" балалар театры менән бер ҡыйыҡ аҫтында дөйөм ойошма булып эшләүебеҙ бик уңышлы. Юбилей концертын Өфөлә күрһәттек, артабан республикабыҙҙың район үҙәктәре һәм ҡалалары буйлап гастролдәр башлана.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ яҙып алды.**

# СӘХНӘЛӘ - "ЯРЛЫҠАУ"

**Салауат дәүләт башҡорт драма театрында икеләтә байрам - башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәримдең "Ярлыҡау" повесы буйынса ҡуйылған спектакленең премьераһы һәм яңы 91-се театр миҙгелен асыу тантанаһы үтте.**



"Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты ярҙамында режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев тарафынан сәхнәләштерелгән спектакль премьераһына Үзбәкстан Республикаһы Фәндәр Академияһының үзбәк теле, әҙәбиәте һәм фольклоры институты доценты Гөлноз Сатторова кеүек ҡунаҡтар, журналистар, яҙыусылар, шулай уҡ театр тәнҡитселәре лә килгәйне. "Мин Салауатка, һеҙҙең театрығыҙҙың "Ярлыҡау" спектакле премьераһына ҙур тулҡынланыу менән килдем! - тине үҙенең сәләмләү һүҙендә авторҙың ҡыҙы, "Мостай Кәрим исемендәге фонд" етәксеһе Әлфиә Мостай ҡыҙы Кәримова. - Был әҫәр һуғыш тураһында түгел, ә тормоштоң фажиғәле минуттарында һайлау ауырлығы алдында ҡалыу тураһында. Был спектаклдә уйнау бик ауыр. Рәхмәт, Илсур Юлай улына, ул Мостайҙың ни әйтергә теләгәнен аңлаған. Рәссамдың, хореографтың эше, актерҙарҙың уйнауы ла оҡшаны. Минеңсә, был спектакль "Ярлыҡау"ҙың иң яҡшы ҡуйылыштарының береһе. Рәхмәт һеҙгә!"

Спектаклдән һуң театрҙың баш режиссеры Лиана Ниғмәтуллина артистарға һәм ҡуйыусы төркөмгә матур спектакль өсөн рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Артабан ул театрҙың яңы миҙгел асылыу алдынан яулаған уңыштары һәм наградалары тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, быйыл Салауат театры А.Житковскийҙың "Һырғалаҡ" спектакле менән Екатеринбургта XVI "Коляда - Plays" халыҡ-ара заманса драматургия театр фестивалендә ҡатнашҡан. Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Яҡуп Шәрипов Озод роле өсөн "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһына лайыҡ булған. Шулай уҡ күптән түгел театр А.Островскийҙың "На всякого мудреца довольно простоты" пьесаһы буйынса "Глумов" спектакле менән Сыктывкар ҡалаһында Үткән V Төньяҡ театр фестивалендә ҡатнаша һәм ике номинацияла еңеү яулай: "Иң яҡшы спектакль өсөн" - гран-при һәм Глумов ролендәге Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Рафаэль Ғәйнуллинға - "Иң яҡшы ир-егет роле".

Театр директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Ҡотошов билдәләүенсә, яңы, 91-се театр миҙгеле ҡыҙыҡлы тамашаларға бай булырға вәғәҙәләй: сәхнәнең алдынғы актерҙарының ижад кисәләре, сағыу спектаклдәр ҡуйыласаҡ, фестивалдәрҙә ҡатнашыу, тематик концерттар, Башҡортостан Республикаһы һәм унан ситтә гастролдәр планлаштырыла.

**Динә БӘШИРОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИР БАРҘА...
## ҡатын алға сыҡмаһын

Ҡатын сырағы ҡырҡ, бер янмаһа бер яныр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡатын-ҡыҙҙы яралтҡан саҡта Хоҙай Тәғәлә бик оҙаҡ, һуңға тиклем эшләй торған булған. Берҙәнбер көндө Уның эргәһенән үтеп барған фәрештә һорай ҡуя:**

**- Ни өсөн ҡатын-ҡыҙ һынын шул тиклем оҙаҡ эшләйһең, Аллам?**

**- Ә һин был һындың барлыҡ камиллығын тояһыңмы? - ти Алла. - Ул теләһә ниндәй аҙыҡты ла ашарға, бер юлы бер нисә баланы ҡосаҡларға, үҙенең ҡосаҡ йылыһы менән бар сирҙәрҙе лә дауалай алырға тейеш. Һәм ошоларҙың барыһын да ул ике генә ҡул менән башҡарасаҡ...**

**- Ике генә ҡул менәнме? - тип аптырай фәрештә. - Был мөмкин түгел!**

**- Мөмкин! Ауырыһа, ул үҙен-үҙе дауаласаҡ. Тәүлегенә 18 сәғәт эшләй аласаҡ... - ти Алла.**

**Фәрештә ҡатын-ҡыҙ һынына яҡыныраҡ килеп, уға ҡулдары менән ҡағыла һәм:**

**- Аллам, ә һин бит уны бик нескә итеп яһағанһың... - ти.**

**- Эйе, ул бик нескә, - ти Алла, - әммә ул бер үк ваҡытта көслө лә. Уның түҙемлеген, сыҙамлығын һин күҙ алдына ла килтерә алмайһың!**

**- Ә ул уйлай беләме һуң? - тип һорай фәрештә.**

**- Ул уйлау ғына түгел, башҡаларҙы һөйләшеп килешеүгә ышандыра белә! - ти Алла.**

**Фәрештә һындың битенән һыйпап ҡарай һәм, аптырап, шулай ти:**

**- Аллам, был һындан һыу аға бит. Һин, моғайын, уға артыҡ ныҡ йөк һалғанһыңдыр?**

**- Был һыу түгел, ә күҙ йәштәре, - тип төҙәтә уны Хоҙай. - Күҙ йәштәре менән ул үҙенең ҡайғыһын, икеләнеүҙәрен, мөхәббәтен, яңғыҙлығын, көйөнөүҙәрен һәм шатлыҡтарын сағылдыра...**

**Был һүҙҙәр фәрештәгә шул тиклем ныҡ тәьҫир итә һәм ул:**

**- Аллам, ҡатын-ҡыҙ ысынлап та иҫ киткес ижад емеше! - тип таныурға мәжбүр була. -Унда ирҙәрҙе аптыратырлыҡ көс бар. Ул теләһә ниндәй бәләләрҙе һәм ауырлыҡтарҙы күтәрә белә. Ул бәхет, мөхәббәт, аңлашыу кәүҙәләнеше лә. Ул ҡысҡырғыһы килгәндә көлә, илағыһы килгәндә йырлай. Бәхетле булғанда ла илай, ҡурҡҡанда иһә көлә. Ул үҙе ышанған нәмәләр өсөн көрәшә. Ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы бара. Ул ғаиләһенең бәхете өсөн барыһын да эшләй. Уның мөхәббәте бер ниндәй шартлылыҡты ла ҡабул итмәй. Ул балаларының уңыштары өсөн илай. Дуҫтарының уңышына шатлана. Бала тыуғанда, туйҙар булғанда күккә ашҡандай ҡыуана. Ҡайғы ишерелгән мәлдә йөрәге шартларҙай булып һыҙлана. Ләкин һәр ваҡыт үҙендә йәшәүҙе дауам итеүсе көс таба белә. Ул үбеү һәм ҡосаҡлау әрнегән йөрәктәрҙе дауалай ала икәненә ышана...**

**Уның бары тик бер генә етешһеҙлеге бар: ул үҙенең барлыҡ ошо ыңғай сифаттары тураһында онота..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23043

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир 253-25-44**
**Хәбәрселәр 252-39-99**
**Матбуғат таратыу 252-39-99**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3177
Заказ - 1515